ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 апрель (алағарай) 2024

№15 (1108)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклә

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Һулар һауаң... ағыу булһа 2-3



Яҙғы ташҡын 6-7



Башҡортостанда йәшәйем дә ул, әммә башҡорттарҙы күрмәнем! 8





Француз яулыҡ кәштәлә... 12



@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***"Киске Өфө"** (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн **897 һум 06 тингә** баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Быға тиклем башҡорт милли кейемен сәхнәләрҙә генә күреп, уларҙы шулай ғына күҙ алдына килтерһәк, һуңғы йылдарҙа күптәр аутентик, йәғни, төп нөсхәләгеләрен тергеҙә. Ниндәй ул аутентик башҡорт милли кейеме?***



***Сәлимә УСМАНОВА, этнограф:*** Бөгөн беҙҙең республикала милли кейемгә ҡарата иғтибар ҙур. Башҡорт милли кейемен тергеҙеү серҙәренә өйрәнеп, тәжрибә туплап, коллекцияларҙы оҫта итеп етештереүселәр күбәйҙе. Һәр төбәктә үҙ ерлегенә хас булған үҙенсәлектәрҙе: милли биҙәктәр, өҫ кейеме төрҙәре, биҙәүестәрҙең нескәлеге, хатта аяҡ кейеменең төрлөлөгөн өйрәнергә тырышҡан инәй-апайҙарҙың, ҡыҙҙар-егеттәрҙең йылдан-йыл артыуы бик тә ҡыуандыра. Музейҙар фондтарына ғына түгел, ә тарихи сығанаҡтарға, башҡорт һәм рус әҙәбиәтенә лә мөрәжәғәт итеү бик хуп. Был күренеш Башҡортостандың фәнни өлкәһендә, мәҙәниәт тарихында яңы йүнәлеш.

Ысынлап та, аутентик милли кейемде тергеҙеү еңел эш түгел. Беҙ башҡа туғандаш халыҡтарҙан ҡабатланмаҫ милли һыҙаттарыбыҙ менән айырылып торабыҙ. Башҡорттарға ғына хас - селтәрле, көмбәҙле биҙәүестәр; аҡыҡ, фирүзә, гәрәбә, мәрйендәр, көмөш менән биҙәлгән баш кейемдәре; бормалы биҙәкле, тула ҡуңыслы, күн олтанлы аяҡ кейемдәре аша милләтте танып була. Был байлыҡтың беҙҙең көндәргә тиклем килеп етеүе һаҡсыл ҡарашҡа бәйле. Быуаттар буйы һандыҡ төбөндә ҡәҙерләп һаҡланған кейем өлгөләре, фондтарҙағы экспедиция мәғлүмәттәре, ғалимдар хеҙмәте - рухи мираҫыбыҙҙы һаҡлап ҡалыуҙа хәл иткес роль уйнай. Бөгөн беҙ ошо тарихи мәғлүмәттәр һәм кейем өлгөләренә таянып, дөрөҫ йүнәлешле эш алып барабыҙ. Әһәмиәтле башланғысты Башҡортостан етәкселеге хуплауы матур һөҙөмтәләргә килтерә. Төрлө кимәлдәге ярыштар, оҫталыҡ дәрестәре, ғәмәли әсбаптар дөйөм эштең һөҙөмтәһе тип баһалана ала.

Әлбиттә, милли кейемде быға тиклем тик сәхнәләрҙә генә күреп өйрәнгәнбеҙ. Башҡорт халыҡ бейеүҙәре, фольклор ансамблдәре, спектаклдәр аша милли кейем һыҙаттары һаҡланып ҡалды. Әммә сәхнә кейеме - ул айырым йүнәлеш. Милли кейемде сәхнә аша пропагандалау - ул халыҡтың мәҙәни байлығын күрһәтеү, донъяға танытыу эше. Профессиональ сәнғәт заман тамашаһына барып етһен өсөн тейешле костюмдар, аңлайышлы әҙәби тел, матур яңғырашлы фольклор өлгөләре булырға тейеш. Тап ошоларҙы һөнәрмән дизайнерҙар, режиссерҙар, музыканттар атҡарып сыға. Шул уҡ ваҡытта үҙенсәлекле ысулдар менән әҙерләнгән сәхнә кейемдәре бик кәрәкле табыш булып та тора.

Шуныһы ҡыуаныслы: мәҙәниәтен, тарихын һаҡлап ҡалған күп милләтле илебеҙ картаһында башҡорт халҡы үҙенең ҡабатланмаҫ кейеме менән дә айырым бер биҙәк булып тора.

## АФАРИН!

# БАШҠОРТСА СЫҒЫШ ЯҺАРҒА...

## балаларҙан өйрәнәйек!

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Мәҙәниәт һәм ял үҙәгендә "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар конкурсына йомғаҡ яһалды. Мәҙәктәре менән күңелдәрҙе күтәргән, дәрт өҫтәгән егерме икенсе тапҡыр уҙғарылған был ярыш Өфөнөң башҡорт телендә шаяртыусы балаларынан 44 команданы туплаған. Шуларҙың бишәүһе финал уйынында сығыш яһаны.**




"Шаяниум - 2024" конкурсының финал уйынында ҡатнашырға лайыҡ булған командалар "Сәләмләү", "Импровизация" һәм "Музыкаль өйгә эш" тигән һынау этаптарын үтте. Бөтә уйын Рәсәйҙә Ғаилә йылы уҙғарылыуға арналып, сығыштар "Ил ныҡлығы - татыу ғаилә" тигән темаға ҡоролдо. "Сәләмләү"ҙә һәр команда үҙе менән таныштырып сыҡты. Р. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһынан "Етегән+1" КВН-командаһы беренсе булып сығыш яһаны. Уларҙың үҙ ҡыҙынан башҡа кластағы бөтә уҡыусыларға ла "икеле" ҡуйған уҡытыусыһы хәтерҙә ҡалды.

**(Дауамы 9-сы биттә).**

12+

✓ *Беҙ сәхнәләрҙә күргән башҡорт милли кейемдәре ялтырап торған биҙәүестәренең күп булыуы менән күңелдәрҙе арбай, ләкин уларҙың күбеһе башҡорт халҡының көндәлек һәм байрамса кейемдәрен күҙ алдына баҫтырыуҙан алыҫ.*



КӨНАУАЗ

# ҺУЛАР ҺАУАҢ...

## ағыу булһа



**Ниҙәр булды, йәмғәт, беҙҙең менән? Һулаған һауабыҙҙың - еҫен, эскән һыуыбыҙҙың тәмен тоймайбыҙ, гөрләп килгән яҙҙың йәмен күрмәйбеҙ. Әллә заводтарҙан сыҡҡан ағыулы химик төтөн күҙҙәребеҙҙе, еҫ һиҙеү ағзаларын томаланымы? Бик ихтимал, сөнки бөрәү булмаһа, икенсе бөрәү сағ һуғыр, һулаған һауабыҙ, эскән һыуыбыҙ сифаты хаҡында йәмәғәтселеккә мәғлүмәт еткерер, тейешле органдарҙан яуап талап итер ине.**

Хәйер, йәмәғәтселәрҙең дә хәҙер әлеккеләй кәре юҡ һымаҡ, матбуғат та өндәшмәй, ә инде көн-төн телефон тотоп ултырғандарҙың унда эше лә юҡ. Ә бит интернеттан күренеп тора: Гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы буйынса Башҡортостан идаралығы үҙенең сайтында көн дә республикала һауа атмосфераһының торошо һәм уның бысраныу кимәле хаҡында отчет теркәп бара. Был отчетты ҡарап, сәстәрең үрә тора! Социаль селтәрҙә ошо юҫыҡта яңғыраған яңғыҙ тауыш эйәһе Гөлназ Латипова, әйткәндәй, 27 мартта уҡ был мәсьәләгә иғтибар итә һәм Өфөлә һауа атмосфераһын бысратыу буйынса мониторингтың күҙәтеү постары мәғлүмәттәрен килтерә. Бына ул мониторинг мәғлүмәттәренән бер нисә генә юл:

1-се ПНЗ (Бысраныуҙы күҙәтеү пункты), Минская урамы: Туҙан, көкөрт диоксиды, азот диоксиды, углерод оксиды, бензапирен.

2-се ПНЗ, Азатлыҡ (Свобода) урамы: углерод һәм азот оксидтары, фенол, водород хлориды.

5-се ПНЗ, Октябрь проспекты: водород көкөртө, формальдегид, толуол, этилбензол, хлорбензол, изопропилбензол, ауыр металдар (хром, ҡурғаш, марганец, никель, баҡыр, тимер, цинк, кадмий, магний).

14-се ПНЗ, Ульяновтар урамы: углерод һәм азот оксидтары, водород көкөртө, формальдегид, бензол, ксилол, толуол, этил-хлорбензол, изопропилбензол.

Ә бына 12 апрель көндөҙгө сәғәт берҙә был күҙәтеү посында изопропилбензол тупланышы нормала ҡаралғандан 4 тапҡырға артып киткән! Шул да мәғлүм булһын: изопропилбензол (кумол) - ул канцероген хәүефенә эйә: тын юлдарын ҡуҙғыта, бауырға зарар килтерә, уның тәьҫиренән баш әйләнә һәм ауырый, кешенең дөйөм хәле насарлана.

17-се ПНЗ, Ғафури урамы: фенол, бензол, ксилол, толуол, этилбензол, хлорбензол, изопропилбензол, водород хлориды.

23-сө ПНЗ, Ст. Злобин урамы: көкөрт диоксиды, азот диоксиды, азот оксиды, водород көкөртө, формальдегид, ауыр металдар (хром, ҡурғаш, марганец, никель, баҡыр, тимер, цинк, кадмий, магний).

Бөтөн Менделеев таблицаһы! Бындай хәл республиканың башҡа ҡалаларында ла күҙәтелә. Мәҫәлән, Башҡортостандың дәүләт аналитик контроль идаралығының лаборатория директоры урынбаҫары Рөстәм Сабиров Өфөлә булып үткән Экология форумында белдереүенсә, ғинуар-март айҙарында Стәрлетамаҡ ҡалаһында ғына ла аммиак, азот оксиды һәм диоксиды, винилхлорид, фенол, метанол һәм башҡа бысратыусылар буйынса норманан артып киткән 604 осраҡ теркәлгән! Былтыр йыл буйына бындай хәлдең 1 мең булыуын иҫкә алғанда, был күрһәткес быйыл тәүге кварталда уҡ "үтәлә" яҙған. Ә бына Салауатта былтыр ҡала халҡы һулаған һауаның бысраныуы 885 тапҡыр норманан артып киткән булһа, быйыл тәүге кварталда шулай уҡ былтырғының яртыһы тиерлек тәшкил ителгән дә инде. Өфөлә иһә һауаның бысраныуы 165 тапҡыр норманан ашып киткән һәм ул күберәк водород көкөртө буйынса теркәлгән. Быйыл ошо ҡалалар халҡынан ризаһыҙлыҡтар бик күп булыуға ҡарамаҫтан, Рөстәм Сабиров әйтеүенсә, "тегеүйәки был предприятиеға ҡағылышлы бысратыуҙар буйынса беҙ оператив рәүештә ошо предприятиеға инеп тикшереү үткәрә алмайбыҙ. Был юҫыҡта мәсьәләне хәл итеүҙә тейешле закон нигеҙҙәренә төҙәтеүҙәр индереүҙе һорап, бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итһәк тә, улар һаман ҡаралмай".

БР Экология министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республикала сәнәғәт предприятиелары һәм транспорт тарафынан атмосфераға йылына 550 мең тонна һауаны бысратыусы ағыулы химик матдәләр бүлеп сығарыла. Ошо күрһәткес буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында - 1-се, ә Рәсәйҙә 7-се урында тора. Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә күҙәтеү буйынса Федераль хеҙмәт етәксеһе Светлана Радионованың онлайн тәртиптә ҡатнашлығында 5 апрелдә булып үткән кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?** ***Быға тиклем башҡорт милли кейемен сәхнәләрҙә генә күреп, уларҙы шулай ғына күҙ алдына килтерһәк, һуңғы йылдарҙа күптәр аутентик, йәғни, төп нөсхәләгеләрен тергеҙә. Ниндәй ул аутентик башҡорт милли кейеме?***



*Айгөл КИРАНОВА, дизайнер, "Айым" брендын булдырыусы:* Милли кейем үҙендә ата-бабалар тарафынан һалынған тәрән мәғәнә һаҡлай, быуындар араһындағы мәҙәни код булараҡ сығыш яһай. Беҙҙең, дизайнерҙарҙың, кейем буйынса рәссамдарҙың, реконструкция эшләүселәрҙең бурысы ошо бөтөнлөктө боҙмайынса, замандаштарыбыҙға күрһәтеү, киләһе быуындарға еткереү, аутентик милли кейемде һаҡлап ҡалыуға үҙ өлөшөбөҙҙө индереү.

Милли кейем - халыҡ ижадының ҡиммәтле ҡомартҡыһы һәм музейҙарҙа, шәхси коллекцияларҙа, тыуған яҡты өйрәнеүселәрҙә һаҡланған аутентик кейемдәр төбәктең төрлө урынында йәшәгән башҡорттарҙың бөтә локаль варианттарын да күрергә мөмкинлек бирә. Тағы ла мин был тема менән ҡыҙыҡһынғандарҙы Рәсәй дәүләт каталогына индерелгән уникаль экспонаттар менән дә танышып сығырға саҡырам.

Һуңғы йылдарҙа милли кейемде тарихи ысынбарлығында тергеҙеү күренешенең артыуы ҡыуандыра. Беҙ сәхнәләрҙә күргән башҡорт милли кейемдәре үҙҙәренең сағыулығы, ялтырап торған биҙәүестәренең күп булыуы менән күңелдәрҙе арбай, ләкин уларҙың күбеһе башҡорт халҡының көндәлек һәм байрамса кейемдәрен күҙ алдына баҫтырыуҙан алыҫ.

Күп кенә сығанаҡтар менән танышҡандан, фотоһүрәттәрҙе ҡарағандан һуң башҡорттар кейемде, ғәҙәттә, туҡыма, кейеҙ, һарыҡ һәм башҡа йәнлектәр тиреһенән, күндән теккән икәнлеген белдем. Шулай уҡ башҡорттар кесерткән һәм киндер кеүек сүсле үҫемлектәр ҙә ҡулланған, аяҡ кейемен күн, буҫтау, тире ҡулланып теккән.

Башҡорттарҙа өҫ кейеме күп төрлө булған, эске кейем өҫтөнән улар бер нисә ҡат өҫ кейеме кейгән. Мәҫәлән, өҫ кейеменән оҙон еңле, эслек һалып тегелгән елән, шулай уҡ бишмәт, кәзәкей, камзул, сәкмән киң таралған булған беҙҙең халыҡта. Был хаҡтағы миҫалдарҙы башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә лә күрергә була. Мәҫәлән, Яныбай Хамматов, Һәҙиә Дәүләтшина һәм башҡа авторҙарҙың әҫәрҙәрендә башҡорттарҙың көндәлек кейемдәре - күлдәк, кәзәкей, бумазый ыштан тураһында мәғлүмәттәр тулы итеп бирелгән.

Тәү ҡарашҡа ябай ғына күренһә лә, кейемдәр еҢ һәм итәк остарына буҫтау һалынып, аппликация, сигеү, уҡа, тәңкә, мәрийендәр менән биҙәп, ҡатын-ҡыҙҙарҙың итәктәрен матурлап ҡатлы итеп тегелгән.

Әгәр ҙә милли кейем өлкәһендә эшләгәндәр аутентика хаҡында онотмаһа, беҙ ата-бабалар кейеп йөрөгән кейемдәр өлгөһөн юғалтмайынса, киләсәк быуынға теүәл генә алып барып еткерә аласаҡбыҙ. Аутентик башҡорт кейемен өйрәнеү беҙгә үҙ миллилегебеҙҙе, асылыбыҙҙы һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итәсәк, һәм мин был теманы өйрәнеүҙе дауам итәм. Әлегә "Айым" бренды аҫтында миллилеккә йүнәлтелгән, стилләштерелгән кейемдәр тегелә, биҙәүестәр эшләнә, ләкин киләсәктә үҙемдең эштәремдә аутентик теманы мотлаҡ сағылдырасаҡмын, сөнки был үҙ асылыбыҙҙан алыҫлашмаҫҡа булышлыҡ итә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 79 йыллығын билдәләүгә әҙерлек башланды. Республика Башлығы Радий Хәбировтың бойороғо менән 2024 йылда байрам датаһына арналған тантаналы сараларға әҙерләнеү һәм уларҙы үткәреү буйынса ойоштороу комитеты булдырылды. Республика етәксеһе бойороғонда билдәләнеүенсә, ойоштороу комитеты 2024 йылдың 19 апреленә тиклем тантаналы сараларға әҙерлек планын раҫларға тейеш.

✓2024 йылда Башҡортостанда Мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу көнө 28 апрелгә билдәләнгән. Республика Башлығының икенсе указы менән 2024 йылда ошо көн 2 майҙан 28 апрелгә күсерелә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 28 апрель - оҙайлы байрамдарҙың беренсе көнө. Был көндө Башҡортостанда йәшәүселәрҙең барыһы ла мәрхүмдәрҙең ҡәберҙәрен тәртипкә килтереү өсөн өмәгә саҡырыла. Хәбәр иткәнебеҙсә, апрель аҙағында республика халҡын алты көнлөк эш аҙнаһы көтә.

✓Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттә һәм үҙенең Хакимиәтендә кадрҙар алмашыныуы тураһында хәбәр итте. Урал Килсенбаев Башҡортостан Премьер-министрының беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Әлегә тиклем был вазифаны Азат Бадранов биләне, хәҙер ул - республика Башлығы хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары. "Урал Килсенбаев Азат Бадранов башҡарған эш өсөн яуаплы. Мин икегеҙгә лә уңыштар теләйем. Был өлкәлә хәл итеһе мәсьәләләр күп", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓15 апрелгә 33 район хужалыҡтарында яҙғы баҫыу эштәре башланды (бөтәһе 54 район). Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәтенә ярашлы, 24 муниципалитет баҫыуҙарында күп йыллыҡ үләндәрҙе тырматалар, әлегә 25 мең гектар майҙанда был эш башҡарылған. Ә 23 районда хужалыҡтар ужым культураларын (34 мең гектар), 20 районда иһә күп йыллыҡ үләндәрҙе (22 мең гектар) минераль ашламалар менән туҡландыра. Ғөмүмән, 5,3 мең гектар майҙанда эш тамамланған. Башҡортостанда яҙғы культураларҙы 2 миллион гектарҙан ашыу майҙанда сәсеү бурысы тора.

✓ *Киләсәккә инвестиция мөһим, ләкин беҙҙең бөгөнгө хәлебеҙ ҙә кисектереүҙе ғәфү итмәйәсәк, сөнки күпме кеше ағыулы һауа һулап, үпкә-тын юлдары, йөрәк-ҡан тамырҙары, аллергия сиренә дусар ителә.*



Радий Хәбиров республикала тирә-яҡ мөхитте һаҡлауҙа дүрт эш йүнәлешен билдәләне. Шуларҙың береһен атап, ул Рәсәй Экология министрлығы, "Росприроднадзор" һәм Башҡортостан Хөкүмәте менән "Башҡортостан сода компанияһы", "Салауат газпром нефтехим" һәм Стәрлетамаҡ "Синтез-Каучук" заводтары араһында һауаны бысратыуҙарҙы кәметеү буйынса килешеүгә ҡул ҡуйыуҙы юғары баһаланы. Былтыр предприятиеларға ошо маҡсаттарҙа 1,7 млрд һум аҡса бүленгән, ә инде 2030 йылға тиклем экологияны һаҡлауға инвестиция күләме 14 миллиардҡа етәсәк, тип өмөт ителә.

Әйе, киләсәккә инвестиция мөһим, ләкин беҙҙең бөгөнгө хәлебеҙ ҙә кисектереүҙе ғәфү итмәйәсәк, сөнки күпме кеше ағыулы һауа һулап, үпкә-тын юлдары, йөрәк-ҡан тамырҙары, аллергия сиренә дусар ителә һәм ваҡытынан алда донъя ҡуя, күпме сирле-зәғиф сабыйҙар тыуа! Тап шуның өсөн дә республика Башлығы әйтмешләй, "...Яҡындағы осорҙа беҙҙең алда торған бурыстар революцион үҙенсәлеккә эйә". Башҡортостан ере, һыуы һәм һауаһының ныҡ ҡаҡшауына килтергән был мәсьәләне хәл итеүгә әлеге "революцион" ҡараш һәм мөнәсәбәт ошо кимәлдән төшмәһен, изге ниәт кенә булып ҡалмаһын һәм тиҙ араларҙа үҙ һөҙөмтәләрен килтерһен ине, тигән теләктә ҡалайыҡ.

Әйткәндәй, ошо көндәрҙә Өфөлә булып үткән Экология форумы сиктәрендә ойошторолған "Һауа атмосфераһын һаҡлау өлкәһендәге закон нигеҙҙәренең көнүҙәк проблемалары" темаһына түңәрәк өҫтәлдә "Экология" милли проектының "Таҙа һауа" программаһы буйынса һауа бысраныуҙарын кәметеү мәсьәләләре ҡаралды. Унда БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының контроль-күҙәтеү эшмәкәрлеге бүлеге начальнигы Рөстәм Кәримов үҙенең сығышында республиканың һауа атмосфераһы бысраныуы буйынса Рәсәйҙә тәүге тиҫтә иҫәбенә инеүен төбәктә сәнәғәт үҫешенә бәйле булыуын, ләкин бының кире яғы булып граждандарға күкрәк тултырып саф һауа һуларға мөмкинлек ҡалмауын билдәләне. "Беҙ халыҡтан, айырыуса Стәрлетамаҡ, Салауат һәм Өфө ҡалаларынан бик күп ризаһыҙлыҡ белдерелгән хаттар алабыҙ", - тине ул. Роспотребнадзорҙың коммуналь гигиена буйынса бүлек начальнигы Лариса Кильдюшева ла халыҡтан яуған ялыу хаттарының артыуын раҫланы һәм һауаның таҙалығы даими рәүештә тикшерелеп тороуын әйтте. Уның һүҙҙәрен дауам итеп, БР Дәүләт аналитик контроль идаралығы директоры урынбаҫары Рөстәм Сабиров автоматлаштырылған постар тарафынан һауа атмосфераһы таҙалығына төбәк мониторингы һөҙөмтәләре, бысраныуҙарҙың норманан ашып китеүен теркәү һәм ундай хәлдәрҙең һаны хаҡында һөйләне.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Быға тиклем башҡорт милли кейемен сәхнәләрҙә генә күреп, уларҙы шулай ғына күҙ алдына килтерһәк, һуңғы йылдарҙа күптәр аутентик, йәғни, төп нөсхәләгеләрен тергеҙә. Ниндәй ул аутентик башҡорт милли кейеме?***



***Гөлдәр ШАБИЕВА-САМАТОВА, Салауат районы Комсомол ауылының шәхси этнография музейы етәксеһе, милли кейем реконструкторы:*** Мин башҡорт милли кейемен күптән өйрәнәм, уның төрлө өлгөләрен йыям һәм үҙемдең музейҙа күрһәтәм. Музей фондтарында һаҡланған, шәхси кешеләрҙең архивындағы фотоһүрәттәрҙә күрһәтелгән милли кейемдәрҙе тергеҙеү эшен дә йәнләндерҙем. Былтыр, мәҫәлән, "Таҡыя" беренсе Халыҡ-ара балалар милли кейеме оҫталары конкурсына ике эшемде тәҡдим иттем. Уларҙың береһе - Михаил Антонович Круковскийҙың "Мосабайҙан башҡорт ҡатын-ҡыҙы балалар менән" исемле фотоһүрәтенән (ул әлеге мәлдә Рәсәй Фәндәр академияһының Бөйөк Петр исемендәге антропология һәм этнография музейында һаҡлана) ҡарап эшләгән балалар баш кейеме һәм икенсеһе - Екатеринбург тыуған яҡты өйрәнеү музейында һаҡланған уникаль башҡорт милли кейеме коллекцияһынан алынған күлдәк. Уларҙың икеһе лә башҡорт милли кейеменең аутентик өлгөләре һәм беҙ, бөгөнгө көн оҫталары, ошондай бай тарихи сығанаҡтарҙы ҡарарға, өйрәнергә һәм уларҙы ҡабаттан тергеҙергә мөмкинлегебеҙ булыуы менән бәхетлебеҙ.

Мин оҙаҡ йыдар инде башҡорт милли кейемдәре тегәм һәм биҙәүестәрен эшләйем. Үҙемдең эштәремдә тик аутентик материалдар ҡулланам. Мәҫәлән, бай коллекциямда Санкт-Петербургтың Эрмитажында һаҡланған "сакома" селтәренең үҙ ҡулым менән эшләгән тулы күсермәһе бар. Ул XVIII быуатҡа ҡараған уникаль экспонат. Шулай уҡ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейемен - кәләпәште тегәм. Ул шлемға оҡшаш, артҡы яғы арҡаға төшөп тора һәм тәңкәләр менән биҙәлә. Тағы ла XIX быуатта эшләнгән һәм әлеге мәлдә Рәсәй этнография музейында һаҡланған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейеме таҡыя тураһында ла әйтеп үткем килә. Ул төньяҡ-көнсығыш башҡорттары ҡатын-ҡыҙҙары кейгән варианттағы таҡыя. Ошо һәм башҡа аутентик башҡорт милли кейемдәрен замандаштарыма күрһәтә алыуыма шатмын.

Милли костюм һәм уның менән бәйле булған һәр аксессуар - халыҡтың тарихын сағылдырған, милли үҙаңын һаҡлаған, мәҙәни үҙенсәлеген күрһәткән уникаль күренеш. Милли кейемдең һәр биҙәге, элементтары ниндәйҙер мәғәнәгә һәм символик йөкләнешкә эйә. Шуға күрә уларҙың быуындан-быуынға тапшырылып килеүе мөһимлеге менән бер рәттән, милли кейемдәрҙең алдағы йылдарға төп нөсхәһендә, үҙгәртелмәйенсә барып етеүе лә мөһим. Был осраҡта сәхнә кейемдәренә мөрәжәғәт итеү хаталы буласағын да билдәләп үткем килә.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# КӨСЛӨК БАРҘА ҮСЛЕК БАР



**Үткән аҙналағы донъя хәлдәре көтмәгәндә аҙна ахырында башланып киткән һәм БМО-лағы Рәсәй вәкиллеге дипломаты Дмитрий Полянский тарафынан "Яҡын Көнсығыштағы яңы көрсөк" тип аталған хәл донъя йәмәғәтселеген борсоуға һалды: 13 апрелдән 14-енә ҡарай төндә Иран Израилгә ут асты.**

Мәғлүмәт сығанаҡтарының төрлөһө төрлөсә яҙып сыҡты: берәүҙәр Иерусалим һәм башҡа ҡалаларға Ирандың 300-ләгән пилотһыҙ осоу аппараттары һәм ракеталары һөжүм итте, тиһә, икенселәр тиҫтәләгән, әллә йөҙләгән дрон ебәрелде, тип хәбәр итә, ләкин эш унда ла түгел, ә уйламағанда-нитмәгәндә Ирандың Израилгә асыуы ҡабарыуы. Һәм уның сәбәбе лә юҡ түгел: Яҡын Көнсығышта ҡон ҡайтарыу тигән "йола" бар. 1 апрелдә Израиль Сирияның баш ҡалаһы Дамаскиҙағы Иран консуллығын утҡа тота һәм шуның һөҙөмтәһендә Ирандың ислам революцияһы корпусының ике генералы - Мөхәммәт Риза Заһиҙи менән Мөхәммәт Һаҙи Рәхими, шулай уҡ уларҙың биш тән һаҡсыһы һәләк була. Унан алда ла Израиль Дамаск әргә-тирәһен утҡа тота, ул ваҡыт урындағы ике тыныс граждан йәрәхәттәр ала.

Шул һөжүмдән һуң Иран Израилгә үс алыу менән янай һәм был ниәтен атҡара ла. Дрондар осорғандан һуң Ирандың IRNA мәғлүмәт агентлығы хәбәр итеүенсә, Иран Израиль территорияһы үҙәгенә тоҫҡап, беренсе партия баллистик ракеталары ебәрә. "Известия" гәзите хәбәрсеһе Никита Кулюхин әйтеүенсә, Израиль халҡы киләһе һөжүм ихтималлығына әҙерләнә һәм ышаныслы йәшеренеү урындары эҙләй.

Тәбиғи, Көнбайыш илдәре, шул иҫәптән АҠШ, Британия, Франция Израилгә төнгө һөжүмде хупламай. АҠШ Конгресының демократтары ла, республикасылары ла Израилгә ҡарата теләктәшлек белдерә һәм хатта Тегеранға яуап бирергә саҡыра. Бына шунан башлана ла инде халыҡ-ара оло болалар. Үҙҙәрен цивилизациялы элита иҫәпләгән Көнбайыш илдәр властары ике яҡты ла килештереү юлдары эҙләү урынына уларҙы бер-береһенә ҡаршы һөслөтә. Шул да булдымы цивилизация! Әйткәндәй, Израилдең Ҡораллы көстәре ЦАХАЛ белдереүенсә, Ирандан ебәрелгән осоу аппараттарының "99 проценты" бәреп төшөрөлгән, имеш. Ирандың һөжүме һөҙөмтәһендә Иорданияның өс тыныс гражданы һәм бер бала һәләк булған, тип хәбәр ителә. БМО-ның Генеральный секретары Антониу Гуттериш Иранды Израилгә һөжүмен кисекмәҫтән туҡтатырға саҡыра һәм шулай ҙа Израиль тарафынан булған бер нисә хәрби һөжүмгә яуап биреп, Иран Ҡоралллы көстәре үҙ-үҙен һаҡлауға хоҡуҡтарын ғәмәлгә ашырҙы, тип иҫәпләй.

Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, тик шуның менән туҡтаһын ине ҡара-ҡаршы "ҡунаҡ аштары", юғиһә, тиктомалдан башлап ут асҡан яҡтың ныҡ ҡына ауыҙы бешеүе лә бик ихтимал. Донъя сәйәсәтселәре лә шундай фекерҙә, улар был конфликтты дипломатик юл менән хәл итергә саҡыра. Рәсәй Сит ил эштәре министрлығы ла Яҡын Көнсығыш конфликтын йәйелдереү айҡанлы борсолоу белдерә һәм 1 апрелдә Израилдең Сириялағы Иран консуллығына башлап һөжүм итеү факты буйынса БМО-ның Хәүефһеҙлек советы тарафынан тейешле һығымта яһалмауына ишаралай.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Радий Хәбиров Хөкүмәт кәңәшмәһендә Рәсәй Президенты Владимир Путин менән осрашыуҙа республика өсөн мөһим проекттарҙы бойомға ашырыу хаҡында һөйләшеүҙәрен әйтте. Һүҙ һуғыш ветерандары өсөн клиник госпиталь, Лидерҙар мәктәбе төҙөлөшө тураһында бара. Улар буйынса федераль кимәлдә ыңғай ҡарарҙар ҡабул ителде, Радий Хәбиров Премьер-министр Андрей Назаровҡа һәм профилле министрлыҡтарҙың етәкселәренә уларҙы ғәмәлгә ашырыу эшен башларға ҡушты. Бынан тыш, Өфөнөң Көньяҡ урау юлын төҙөү мәсьәләләре һәм башҡа проекттар тикшерелде.

✓Радий Хәбиров Элина Ғатауллинаны үҙ теләге менән Башҡортостандың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетының башҡарма директоры вазифаһынан бушатыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Икенсе указы менән Башҡортостан Башлығы Ғатауллинаны республиканың Йәмәғәт палатаһы аппараты етәксеһе вазифаһына тәғәйенләне.

✓Орск ҡалаһының депутаттар советы рәйесе Тимофей Чирков гуманитар ярҙам күрһәткәне өсөн Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттарына рәхмәт белдерҙе. Константин Толкачев Орск ҡала советының маҡтау грамотаһы менән бүләкләнде. Был хаҡта республика парламентының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Бынан алда республика парламентарийҙары Ырымбур өлкәһенең ташҡындан зыян күргән Орск ҡалаһына мең дана биш литрлыҡ һыу шешәһен ебәргәйне. Эсәр һыуҙың етешмәүе - һыу баҫҡан тораҡ пункттарҙа йәшәүселәрҙең төп проблемаларының береһе.

✓Башҡортостанда иң яҡшы табиптарға бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү күләме 20 мең һумдан 50 мең һумға тиклем артты. Республика Хөкүмәте ҡарарына тейешле үҙгәрештәр индерелде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйылдан ҙур булмаған тораҡ пункттарҙа эшләй башлаған терапевт, педиатр һәм дөйөм практика табиптарына өс миллион һум аҡса түләнә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең Мөрәжәғәтнамәһендә ошо турала белдерҙе, тип хәбәр иткәйне "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы.

✓Башҡортостан Башлығы Белгород өлкәһенән килгән балаларҙың ялын һәм уҡыуын тиҙ арала ойошторорға ҡушты. Башҡортостанға Белгородтан 498 бала һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәр килде, тип билдәләне ул. Балалар Илештәге "Орленок" һәм Әбйәлилдәге "Березка" лагерҙарына урынлаштырыла.

**✓ Башҡортостан үҙ миҫалында ҡатмарлы, комплекслы мәсьәләләрҙе нисек хәл итергә мөмкин икәнен күрһәтә, мәҫәлән, ҡалдыҡтар менән эш итеү мәсьәләләрендә. Ер участкаларын бүлеү мәсьәләләре лә тиҙ хәл ителә.**



ҠЫҪҠАСА

# ЯНҒЫН СЫҒАРЫП ҠУЙМА!

**Башҡортостанда тәбиғәт янғындарын, шулай уҡ янғын сығыу хәүефен кәметеү өсөн республика буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы етәксеһе Марат Латипов 27 апрелдән махсус бойороҡка тиклем республика биләмәһендә янғынға ҡаршы махсус режим индерергә тәҡдим итте.** Унын һүҙҙәренсә, әлеге осорҙа янғын хәүефһеҙлегенә өҫтәмә талаптар ҡуйыла (шул иҫәптән усаҡ яғыу, ҡоро үлән, сүп-сар үртәү тыйыла, граждандарҙың урмандарға барыуы сикләнә һәм башҡалар). Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, янғынға ҡаршы махсус режим шарттарында янғын хәүефһеҙлеге талаптарын боҙған өсөн штрафтар түбәндәгесә: граждандарға - 10-20 мең һум; вазифа биләүселәргә - 30-60 мең һум; юридик шәхес булдырмайынса эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге алып барыусыларға - 60-80 мең һум; юридик шәхестәргә - 400-800 мең һум.

✓ **Башҡортостандан Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар сертификат иҫәбенә реабилитация үтергә мөмкин. Яҡын арала 52 478 һумлыҡ сертификаттар тапшыра башлау планлаштырыла.** Әлеге ваҡытта реестрға индереү өсөн потенциаль хеҙмәт күрһәтеүселәрҙән документтар ҡабул ителә, тип хәбәр итте республика хөкүмәте рәйесе урынбаҫары - финанс министры Лира Иғтисамова. "Бында беҙҙең бурыс - махсус хәрби операция биләмәһенән яраланып ҡайтҡан һәм реабилитацияға мохтаж яугирҙарға мөмкин тиклем ярҙам күрһәтеү", - тип билдәләне вице-премьер. Республикала махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам саралары тормошҡа ашырыу дауам итә, тип өҫтәне ул. 2023 йылда ошо маҡсатҡа 5,1 миллиард һум йүнәлтелгән. Башҡортостанда 39-ҙан ашыу ярҙам сараһы ғәмәлдә.

✓ **Хәҙер Берҙәм төбәк хеҙмәтендә - 122-2 номеры буйынса табипҡа яҙылғанда кол-үҙәк абоненттарҙан шәхси иҫәптең страховка номерын (СНИЛС) һорай.** Был тауыш буйынса шәхесте раҫлау өсөн кәрәк, тип белдерҙеләр Башҡортостан Республикаһының Һаулыҡ һаҡлау министрлығында. "Шылтыратыуға робот яуап бирә. СНИЛС буйынса идентификация табипҡа яҙылғанда хаталарға юл ҡуймаҫҡа мөмкинлек бирә", - тине Башҡортостан дәүләт идаралығының һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Динар Шәрәфетдинов. Берҙәм кол-үҙәктең 2-се роботлаштырылған линияһы ярҙамында табипҡа яҙылырға, өйгә табип ярҙамы саҡыртырға, вакцина яһатыу көнөн һайларға мөмкин, тип иҫкә төшөрҙөләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, йыл башынан алып ошо линияға 530 меңдән ашыу мөрәжәғәт килгән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӘЙҘӘГЕҘ, ДИКТАНТ ЯҘАЙЫҠ!




**Башҡортостан халҡын һәм башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныусыларҙы "Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант" яҙыу акцияһында ҡатнашырға саҡыралар. Быйыл акция 27-29 апрелдә үткәрелә. БСТ телеканалында тура трансляция 27 апрелдә сәғәт 11-ҙә башлана.**

Акцияны ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, 2024 йылда текстарҙың тематикаһы илһөйәрлеккә, йәштәргә, ғаилә ҡиммәттәренә һәм йолаларына арналған. Диктант яҙыу түбәндәге кимәлдә ҡаралған: башҡорт телен башлап өйрәнеүселәр кимәле; башҡорт телендә иркен аралашыусылар кимәле; башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында аралашыусылар өсөн.

Акцияның девизы: "Тел - халҡыбыҙҙың рухи байлығы". Акция Башҡортостан Башлығы бойороғона ярашлы йыл һайын апрелдең дүртенсе шәмбеһендә үткәрелә. Киң йәмәғәтселекте йәлеп итеү, тел мәҙәниәтен күтәреү, башҡорт телен үҫтереү һәм популярлаштырыу өсөн белем биреү ойошмаларында, юғары уҡыу йорттарында, мәҙәниәт учреждениеларында, коммерция предприятиеларында, йәмәғәт ойошмалары офистарында 27 апрелдә иртәнге сәғәт 11-ҙән 29 апрелгә тиклем офлайн-майҙансыҡтар ойошторола.

# ФОРУМ БЕҘҘӘ ҮТӘ!

**Мәскәүҙә "Беҙ бергә. Спорт" халыҡ-ара конгресс-күргәҙмә сараһы барышында Пермь крайынан Башҡортостан Республикаһына "Рәсәй - спорт державаһы" форумы штандартын тапшырыу тантанаһы үтте.**

Рәсәйҙең спорт министры Олег Матыцин билдәләүенсә, форум Рәсәйҙең спорт тормошонда ғына түгел, илебеҙҙең дуҫтарса мөнәсәбәттәге партнерҙары ла уға ҡыҙыҡһыныу белдерә. "Өфө форумы беҙгә яңы хис-тойғолар, танышыуҙар һәм белем бүләк итер, тип ышанам. Төбәктәр араһындағы дуҫлыҡ ваҡытлыса ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға һәм Рәсәй мәнфәғәтенә ышанысլы рәүештә алға барырға ярҙам итәсәк. Башҡортостанға уңыштар теләйем, аҡ юл", - тине Рәсәйҙең спорт министры.

"Беҙ Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Владимирович Путинға килеһе форумды үткәреү урыны итеп Өфө ҡалаһын һайлауы өсөн бик рәхмәтлебеҙ. Күрше Пермь крайында уҙған форумда ҡатнаштыҡ. Сара шәп, сағыу, бай йөкмәткеле булды. Форсаттан файҙаланып, барыһын да октябрь айында Өфөгә Рәсәй Федерацияһының төп спорт ваҡиғаһына саҡырам", - тине Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, Өфөлә "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара спорт форумын уҙғарыу көнө билдәле булды. Ҙур спорт сараһы 17 октябрҙә ойошторола. Был турала Хөкүмәттең оперативк кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. "Эш башланды. Форумда Рәсәй Президентының ҡатнашыуы көтөлә, ул Физик культура һәм спорт буйынса совет ултырышын үткәрә. Шуға күрә етди әҙерләнергә кәрәк", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# ТӘБИҒӘТТЕ ҺАҠЛАУ ЮЛЫНДАБЫҘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә үткән Экология форумын һәм VII "Экология һәм технологиялар" махсуслаштырылған күргәҙмәһен асыуҙа ҡатнашты.**

"Ошо яҙғы көндәрҙә беҙ һәр ваҡыт Башҡортостандың баш ҡалаһына эксперттарҙы, төҙөлөш, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, тәбиғәтте һаҡлау эшмәкәрлеге өлкәһендәге белгестәрҙе саҡырабыҙ. Һис шикһеҙ, был беҙҙең өсөн ҙур яуаплылыҡ һәм оло мәртәбә. Беҙ илебеҙҙә һәм Башҡортостанда биләмәләребеҙ, ҡалаларыбыҙ, ауылдарыбыҙ матур, уңайлы, төҙөк булһын өсөн күп эштәр башҡарабыҙ. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ системаһы һөҙөмтәле эшләһен, экологик проблемалар хәл ителһен өсөн. Шуға күрә беҙгә башҡа төбәктәрҙең тәжрибәһе менән танышыу мөһим. Ҡаҙағстан, Беларусь, Ҡырғыҙстан, Тажикстан һәм Рәсәй төбәктәре делегацияларын ихлас сәләмләйем. Өфөгә илебеҙҙең 15-тән ашыу төбәгенән вәкилдәр килде. Осрашыуҙан яҡшы тәьҫораттар алырһығыҙ, беҙҙең аралашыу файҙалы булыр тип ышанам", - тине Радий Хәбиров сараны асыу тантанаһында.

Дәүләт Думаһының экология, тәбиғәт ресурстары һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау комитеты рәйесе урынбаҫары Георгий Арапов үҙ сығышында Экологик форумдың мөһимлеге хаҡында һөйләне. Рәсәй экологик операторының генераль директоры Денис Буцаев билдәләүенсә, Өфөлә асылған экофорумда һәр ваҡыттағыса эксперттар һәм власть вәкилдәре ҡатнаша. "Башҡортостан үҙ миҫалында ҡатмарлы, комплекслы мәсьәләләрҙе нисек хәл итергә мөмкин икәнен күрһәтә, мәҫәлән, ҡалдыҡтар менән эш итеү мәсьәләләрендә. Ер участкаларын бүлеү, проекттар тураһында уртаҡ фекергә килеү йәһәтенән мәсьәләләр ҙә тиҙ хәл ителә. Әйткәндәй, 2023 йылда "Йәшел рейтинг"та республика 9-сы урынға күтәрелде", - тип билдәләне Денис Буцаев.

# ЗЫЯН КИЛТЕРЕҮСЕЛӘР БАР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Көньяҡ Урал төбәк-ара идаралығында булып, тәбиғәтте һаҡлау контроле мәсьәләләре өсөн яуаплы ведомствоның эшмәкәрлеге менән танышты.**

Идаралыҡ етәксеһе Роман Болотов һөйләүенсә, республикала федераль күҙәтеүҙең тирә-яҡ мөхиткә кире йоғонто яһаған 3516 объекты бар, шуларҙың 100-ҙән ашыуы - беренсе категориялы объекттар. 2024 йылдың аҙағына тиклем улар комплекслы экологик рөхсәт алырға тейеш, әлегә һигеҙ предприятиеның ғына бындай рөхсәте бар. Комплекслы экологик рөхсәт - Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан тирә-яҡ мөхиткә кире йоғонто яһаған объектҡа хужалыҡ һәм башҡа эшмәкәрлек алып барған юридик берәмеккә йәки шәхси эшҡыуарға бирелә торған һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау өлкәһендә мотлаҡ үтәлергә тейешле талаптарҙы үҙ эсенә алған документ. 2023 йылда тирә-йүнгә кире йоғонто өсөн 243 миллион һум аҡса ингән, был 2022 йыл менән сағыштырғанда 26 процентҡа күберәк. Был аҡса республика бюджетына килә һәм тәбиғәтте һаҡлау сараларына йүнәлтелә.

Радий Хәбиров Росприроднадзор идаралығы хеҙмәткәрҙәре менән аралашты, улар республика етәксеһенә рөхсәт биреү һәм контроль-күҙәтеү эшмәкәрлеген алып барыуҙары тураһында һөйләне. Идаралыҡтың бүлек начальнигы Рөстәм Әхмәҙуллин һүҙҙәренсә, инспекторҙар 2023 йылда 300-ҙән күберәк контроль-күҙәтеү сараһы үткәргән, тәбиғәтте һаҡлау ҡануниәтен боҙоуҙың 300-ҙән ашыу осрағын асыҡлаған. Тәбиғи компоненттарға килтерелгән зыян 1 миллиард һумдан күберәк суммаға баһаланған. Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү буйынса эш алып барыла.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы республикала йәшәүселәрҙе аномаль эҫе һауа тороuo хаҡында иҫкәртә. Гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхитте күҙәтеү идаралығы фаразы буйынса, 18-22 апрелдә төбәктә урыны менән һауа температураһы норманан 7-12 градусҡа юғарыраҡ булған аномаль эҫе һауа тороuo көтөлә. Һауа температураһы көндөҙ +20,+23 градусҡаса күтәрелеүе ихтимал.

✓Өфө үҙәгендә транспорт хәрәкәте ваҡытлыса ябыла. Сикләү 22 апрелдән 30 июнгә тиклем Совет урамынан Цюрупа урамына тиклемге юл участкаһында ғәмәлгә индерелә. "Сәбәбе - Октябрь революцияһы урамын реконструкциялау. 13-сө автобус маршрутының хәрәкәт схемаһы үҙгәрә: был осорҙа ул Ленин урамына Пушкин урамы буйлап инәсәк", - тип хәбәр иттеләр Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән. Водителдәрҙән маршрутты билдәләгәндә юлдың ябылыуын иҫәпкә алыуҙарын һорайҙар.

✓Өфө уҡыусыһы ҡытай теле буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһында еңеү яуланы. Олимпиаданың йомғаҡлау этабы 7 апрелдән 11-нә тиклем Мәскәү дәүләт лингвистика университетында үтте. Әҙһәм Фәйзуллин исемендәге 39-сы гимназияның 8-се класс уҡыусыһы Лю Синьжань яҙма һәм телдән тур эштәрен уңышлы башҡарып, еңеүсе булды, тип хәбәр итә Өфө мэрияһы. Ҡаланың мәғариф идаралығында уҡыусыны лайыҡлы еңеү менән ҡотланылар, шулай уҡ 39-сы гимназияның ҡытай теле уҡытыусыһы Ван Юнмейға рәхмәт белдерҙеләр.

✓Өфө рапирасыһы, өс тапҡыр Европа чемпионы, Олимпия уйындары еңеүсеһе Тимур Сафин фехтование буйынса Рәсәй чемпионатының бронза призеры булды, тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан. Турнир Пермь өлкәһенең Кондратово ауылында барҙы. Турнирҙа 26 төбәктән 500-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты.

✓"ЮВТ Аэро" авиакомпанияһы "Өфө" аэропортынан яңы йүнәлеш - Ярославль ҡалаһына тура рейс асылды. Осоштар дүшәмбе һәм шаршамбы көндәрендә Bombardier CRJ200 самолеттарында башҡарыла. Самолет рейсҡа Өфөнән көндәҙгә 1 тула 10 минутта сыға. Юлға 1 сәғәт 40 минут ваҡыт китә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Таныш булмаған кешеләргә аҡса күсермәгеҙ. Әгәр ҙә телефондан шылтыратып, кредит тәҡдим итеп, был аҡсаларҙы бер нисә тапҡыр арттырып алырға тәҡдим итһәләр, был - мутлашыусылар.***



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# МӨХИТЕБЕҘ - СИФАТЛЫ!

**РФ Төҙөлөш министрлығы 2023 йыл һөҙөмтәләре буйынса ил төбәктәре ҡалалары мөхитенең сифат индексын билдәләне. Шартлы рәүештә уңайлы климатлы тип иҫәпләнгән иң ҙур ҡалалар араһында билдәләнгән рейтингҡа ярашлы, Өфө яңынан 7-се урын биләне.**

Баш ҡалабыҙға, 2022 йылдағы кеүек үк, мөмкин булған 360 балдан 220 балл ҡуйылды. Әгәр ҙә сифат индексы 180 балдан артығыраҡ була икән, ҡала мөхите уңайлы тип табыла. Өфөнөң рейтингы "Торлаҡ һәм уның янындағы биләмә" төркөмө күрһәткестәре буйынса 32 балдан 36 балға, "Биләмәне йәшелләндереү"-ҙә - 45 балдан 49 балға, "Ижтимағи-эш инфраструктураһы һәм уның янындағы биләмә" төркөмөндә - 33-тән 36 балға, "Ижтимағи-ял итеү инфраструктураһы һәм уның янындағы биләмә" төркөмөндә 28 балдан 31 балға тиклем күтәрелде.

Рейтинг лидерҙарынан Мәскәү ҡалаһы 304, Санкт-Петербург 270 балл йыйҙы. Ҡала мөхитенең сифат рейтингы 2018 йылдан бирле билдәләнеп килә, ул саҡта Өфөгә 179 балл ҡуйылғайны. Ә "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы элегерәк хәбәр итеүенсә, IQ-ҡалалар араһында цифрлаштырыу күрһәткесе буйынса Өфө 5 ҡаланан торған лидерҙар төркөмөнә ингән.

# ТӘГӘРМӘСТЕ ҠАЙҘА ИЛТЕРГӘ?

**Өфөлә "Шина утилизацияһы" тигән экологик акция старт алды. Баш ҡала хакимиәте уны "Ҡаланы йыйыштырыу буйынса махсус автохужалыҡ" предприятиеһы менән берлектә үткәрә.**

Туҙған шиналарҙы йыйыу өсөн ҡала буйынса махсус контейнерҙар ҡуйылған, унда бөтөн маркалы резина шиналарҙы һәм покрышкаларҙы ташлай алаһығыҙ. Контейнерҙар Үҙәк, 1/7, Сельская Богородская, 27А, Коммунистик һәм Посадская урамдары, шулай уҡ Ирәндек һәм Әхмәтов урамдары, М. Рыльский һәм Өфө йылғаһы яры урамдары, Ленин һәм Вокзал урамдары киҫелешендә, Юл буйы, 61, Менделеев, 207, Баҡса, 20 адресы буйынса урынлашҡан. Был бункерҙарға автомобиль покрышкалары ғына ташларға була, улар ҡаты коммуналь, эре габаритлы, төҙөлөш сүп-сары өсөн түгел. Акция 28 апрелгә тиклем дауам итә.

# ҠАЙҺЫ УҠЫУ ЙОРТОНА?

**RAEX агентлығы гәҙиттәгеҫә Рәсәй юғары уҡыу йорттарының предмет рейтингтарын баҫтырып сығарҙы. Ул вуздарҙы сифатлы белем алыу өсөн шарттар, сығарылыш уҡыусыларының эш биреүселәргә ихтыяж кимәле һәм ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлеге кимәле кеүек өс интеграль күрһәткескә берләшкән 42 шарт буйынса баһалай.**

Өфө дәүләт нефть техник университеты ҡатнашҡан предмет йүнәлештәре һаны буйынса лидер булды. Нефть университеты һигеҙ өлкәлә алдынғылыкты бирмәгән: экология (18-се урын), геология (14-се урын), "нефть-газ эше" йүнәлешендә уҙған йылда университет рейтингта бер баҫҡысҡа күтәрелде һәм 7-се урынды биләне. Машиналар эшләү һәм робот техникаһы өлкәһендә лә юғары уҡыу йорто үҙенең күрһәткестәрен яҡшыртҡан. "Биотехнологиялар һәм биоинженерия" йүнәлешендә Өфө дәүләт нефть техник университеты 18-се урын яуланы, "энергетика, энергетика, машиналар эшләү һәм электротехника" йүнәлешендә вуз рейтингта 19-сы урында, химик технологиялар өлкәһендә 9-сы урында.

Өфө дәүләт авиация техник университетын һәм Башҡорт дәүләт университетын берләштергән Өфө фән һәм технологиялар университеты "авиация һәм ракета-космос техникаһы" йүнәлешендә үҙгәрешһеҙ 12-се һәм "география" йүнәлешендә 11-се урынды биләй.

Башҡорт дәүләт медицина университеты "медицина" (2022 йылдан алып күрһәтелгән 20 медицина университеты араһында рейтингта 8-се урында нығынған) һәм "фармация" (9-сы урын) йүнәлештәре буйынса иң яҡшылар иҫәбенә инде.

Башҡорт дәүләт аграр университеты, гәҙиттәгеҫә, "ауыл хужалығы" йүнәлешендә көслө (5-се урын). 2023 йылда агентлыҡ билдәләгән предметлы өлкәләр һаны 20 процентҡа артҡан һәм 35 йүнәлеш тәшкил иткән. Иң яҡшылар исемлегенә Рәсәйҙең 42 төбәгенән 164 вуз ингән.

# ВЕНЕР ҒӘЛИЕВ АЛЫША

**Стәрлетамаҡтан ҡатнаш көрәш легендаһы Венер Ғәлиев үҙенең киләһе алышын Өфөлә үткәрә. АСА (Абсолютный чемпионат Ахмат) компанияһы сайтында хәбәр ителеүенсә, алыш 31 майҙа "Өфө-Арена"ла була. Башҡорт спортсыһының дәғүәсеһе - Румыниянан Аурел Пиртеа.**

"31 майҙа Өфөлә АСА лигаһының икенсе турниры ойоштоpола. Урындағы көйәрмәндәр өсөн көтөлгән ваҡиға - икенсе йөшлеген кисергән "Башҡорт" ҡушаматлы Венер Ғәлиевтың әйләнеп ҡайтыуы. 2023 йылда 48 йәшлек Венер ике тапҡыр ваҡытынан алда еңеү яуланы", - тиелә АСА белдереүендә.

"Венер - ММА легендаһы. Ғәлиев 24 йыл сығыш яһай. Былтыр декабрҙәге алышында ул Бразилиянан килгән Хакран Диасты нокаутҡа ебәрҙе. Был юлы "Башҡорт" Аурел Пиртеаға ҡаршы сыға", - тип билдәләне АСА президенты Алексей Яценко.

Әйткәндәй, Венер Ғәлиев ММА-ла 24 йыл сығыш яһай. Беренсе алышын ул 2000 йылда үткәрә. Спортсы 36 еңеү яулаған.

ИҪКӘРТЕҮ

# ҺАМАН АЛДАНАЛАР!



**БР буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, бер тәүлек эсендә генә мутлашыусылар тураһында 28 мөрәжәғәт булған, уларҙың эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә халыҡ 13 миллион һум аҡсаһын юғалтҡан.**

Өфө ресторандарының береһендә баш бухгалтер булып эшләүсе 67 йәшлек ханымдың телефонына шылтыратыусы мутлашыусы үҙен финанс мониторингы һәм хоҡуҡ һаҡлау буйынса федераль хеҙмәте идаралығы хеҙмәткәре тип таныштыра һәм "хәүефһеҙ иҫәпкә" аҡса күсерергә күндерә. Һөҙөмтәлә, ҡатын үҙенең 120 мең һумын һәм ресторан иҫәбенән 7 миллион һумға яҡын аҡсаны ғына түгел, тағы 600 мең һумға яҡын аҡсаны кредитҡа алып күсерә. Өфөлә йәшәүсе тағы бер кеше ошондай уҡ алдашыуға эләгә. Бер магазин курьеры иһә 2 миллион һумлыҡ кредит алып, уға үҙенең 200 мең һумын да өҫтәп, мутлашыусыларҙы байыта.

73 йәшлек уҡытыусы мутлашыусылар ҡулына эләгеп, 15 йыл йыйған 5 миллион тирәһе аҡсаһынан ҡолаҡ ҡаҡҡан. Зыян күреүсе белдереүенсә, мессенджерҙа үҙе эшләгән колледж директоры исеменән уға банк һәм хоҡуҡ һаҡлау органы хеҙмәткәрҙәре шылтыратасағы тураһында хәбәр килгән. Улар шылтыратып, банк иҫәбенә алып барылған хәүефле операциялар тураһында белдерә һәм ундағы аҡсаларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн, махсус иҫәпкә күсерергә кәрәклеген әйтә. Биш көн дауамында зыян күреүсе төрлө банкоматтар аша мутлашыусыларға аҡса ебәрә. Уны битараф булмаған граждандар, банк һәм полиция хеҙмәткәрҙәре иҫкәртеп ҡарай, ләкин бер кем дә туҡтата алмай.

Баш ҡаланың 8-се полиция бүлегенә мөрәжәғәт итеүсе бер ҡатын 1 миллион һумын үҙ теләге менән мутлашыусыларға тотторол ҡуя. Тағы ла бер пенсионер ҡатын ошондай хәлгә тарый. Ҡыҙы аварияға эләккән тигән хәбәр менән ышандыра уны мутлашыусылар. Аферистар унан ҙур ғына сумма һорай, шулай ҙа һуңынан 90 меңгә риҙалаша. Аҡсаны ҡатындан курьер килеп ала. Күп тә үтмәй, ҡыҙы имен-аман ҡайтып инә һәм үҙе менән бындай хәлдең булмауы тураһында әйтә. Улар полицияға мөрәжәғәт итә. Әлеге мәлдә был бөтөн осраҡтар буйынса енәйәт эше асылған.

БР буйынса Эске эштәр министрлығы тағы ла бер ҡабат иҫкәртә: таныш булмаған кешеләргә аҡса күсермәгеҙ. Әгәр ҙә телефондан шылтыратып, кредит тәҡдим итеп, был аҡсаларҙы бер нисә тапҡыр арттырып алырға тәҡдим итһәләр, был - мутлашыусылар. Бәйләнеште өҙөгеҙ һәм шикле тәҡдимгә ышанмағыҙ. Мутлашыусыларҙың ялған номерҙар ҡулланыуы ихтималлығын да онотмағыҙ.

**БР буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡурай еләге

Ҡурай еләге (малина) июнь-июль айҙарында сәскә ата, июль-августа емеш бирә. Унда фруктоза һәм сахароза, пектиндар, органик кислоталар, күҙәнәклек, витаминдар (С, В, РР, D, Е, К, А һ.б.), баҡыр, калий, фосфор, кальций, йод, стронций, тимер, цинк, хром күп. Бактерицид матдәләр ҙа бар. Үҫемлектең барлыҡ өлөштәрен дә дауаланыуҙа ҡулланалар. Япрағын һәм сәскәһен сәскә атҡан осорҙа, емешен бешкәс, тамырын көҙ ҡаҙып алалар. Ҡурай еләге емеше пуриндарға бай, шуға подагра һәм нефрит булғанда ашамау хәйерле.

❖ Аллергия булғанда 2 ҡалаҡ киптерелгән ҡурай еләге сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойол, 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Ангинанан 2 ҡалаҡ ваҡланған кипкән йәки яңы ҡурай еләге япрағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойол, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөп, төнәтмәне эҫе көйөнсә эсергә. Уның менән тамаҡты сайҡарға ла була.

❖ Ашҡаҙан ауыртһа, 1 стакан яңы һығылған ҡурай еләге һутын эсергә.

❖ Геморройҙан ҡан ағыу, танау ҡанауҙан 1 ҡалаҡ йыуылған һәм ваҡланған ҡурай еләге тамырына 1 стакан һыу ҡойорға, 10 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә. Ҡулланырҙан алда һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң сирек стакан эсергә.

❖ Һипкелдәрҙе баҫыр өсөн ҡурай еләгенең яңы япрағынан һутын һығып алып, һипкелгә һөртөргә. Йәки 1 өлөш һутҡа 4 өлөш аҡ май йә вазелин нисбәтендә мазь әҙерләргә була.

❖ Эренле отит осрағында көҙ ҡаҙып алынған ҡурай еләге тамырын ваҡлап турарға, шуның 2-3 ҡалағына 1 литр һыу ҡойорға һәм 12 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне бер ай дауамында көнөнә 2 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Был ваҡыт эсендә ҡолаҡ ярыһындағы хатта элекке яралар ҙа уңала.

❖ Температура күтәрелгәндә урман ҡурай еләге шәп ярҙам итә. 2 ҡалаҡ кипкән ҡурай еләге емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойол, сәй һымаҡ бешерергә һәм бөтөргәнсе эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Ялан бөркөтө башҡа ҡоштар кеүек, ояһын һаҡлауға ныҡ иғтибар бирмәй. Бәпкәләр ризыҡ етмәүҙән һәләк булған осраҡтар йыш. Улар август башына ҡанаттарын нығыта.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ялан бөркөтө**

**(Степной орел)**



Ялан бөркөтөн иркен далаларҙа күрергә була. Ул ергә ултыра ла, бер урындан икенсеһенә осоп, һунар итә. Өлкән ҡош һоро төҫтә. Ҡайһы берҙәренең соңҡаһында ерән табы бар. Ҡойроғоноң өҫтөндә һәм алғы аяҡтарында аныҡ булмаған сыбар биҙәк бар, ҡоштар 5 йәшкә еткәндә, уларҙың тышҡы ҡиәфәте тап ошолай була. Ата ҡоштоң кәүҙә оҙонлоғо 72 см, инә ҡоштоҡо - 78, ҡанаттарын йәйһәләр, 190-200 см. Суҡышы ҡара, тәпәйҙәре һары, күҙҙәре һоро.

Республикала Яйыҡ йылғаһы киңлегендә, Яҡтыкүлдә, шулай уҡ Ейәнсура, Йылайыр, Мәләүез, Хәйбулла райондарында осрағаны бар. Уларҙың ни өсөн тап ошо төбәктәрҙә осрауын аңлатыуы ҡыйын, әммә ялан бөркөтө унда Ырымбур өлкәһенән осоп килгән тигән аңлатма дөрөҫлөккә тап килә.

Төйәк иткән урындарында иһә ҡоштар бер-береһенән байтаҡ айырым ерҙәргә оя ҡора. Ялан бөркөтө ысын мәғәнәһендә дала ҡошо, уға оя ҡороу өсөн йылға-күл буйы кәрәк түгел. Ҡола яланда оя ҡороуы ла ихтимал. Ә бына тауҙарҙы ул үҙ итмәй. Башҡа бөркөттәргә ҡарағанда, һағыраҡ.

Ялан бөркөтө - полифаг, уртаса һәм эре дала йәнлектәре, шул иҫәптән кимереүселәр, ҡоштар, йыландар менән туҡлана. Йомран тоторға ярата, ҡуянға һунар итә, ҡоштарҙың йәштәрен үҙ итә, емтектән дә баш тартмай.

Ҡышлау ерҙәрҙән башҡаларға ҡарағанда һуңыраҡ килә. Элекке ояларын яңыртып та ала, яңыһын төҙөргә лә мөмкин. Оя ерҙә лә, бейек булмаған ағаста ла була ала. 1-3 йомортҡа һала, 40-45 көн баҫа. 2 ай дауамында ата менән инә ҡош бәпкәләренә ризыҡ ташып ашата. Ялан бөркөтө башҡа ҡоштар кеүек, ояһын һаҡлауға ныҡ иғтибар бирмәй. Бәпкәләр ризыҡ етмәүҙән һәләк булған осраҡтар йыш. Улар август башына ҡанаттарын нығыта.

Ялан бөркөтө тотош илдә аҙ һанлы ҡош иҫәпләнә. Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең Ҡыҙыл китабына индерелгән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*КӨН АФӘТЕ*

# ЯҘҒЫ ТАШҠЫН



Бик һуң ғына Сибай мәғлүмәт үҙәге директоры Булат Кәшфулла улы Әбдрафиҡовҡа шылтыраттым. Ул тәүлектең теләһә ниндәй мәлендә борсоуыма күнеп, өйрәнеп бөткәнгә алды телефонын:

- Хәйерле төн булһын, йә, тыңлайым! - Яуабы, таптың шылтыратыр ваҡыт, тигәнерәк ишетелде.

- Иртәгә һыу баҫҡан Орск ҡалаһына барып ҡайтырға ине иҫәп, һеҙ ризалығығыҙҙы биргән хәлдә, әлбиттә!

- Кемдәр менән йыйынаһың инде?

- "Сибайский рабочий" гәзитенең мөхәрриренә әйтермен, үҙебеҙҙең редакциянан бер журналисты алырмын, шунан билдәле инде, мин үҙем!

- Иртәгә беҙгә Өфөнөң үҙенән комиссия килгәнлекте беләһең, ултырыш һуңынан уларҙы оҙатып, улай-былай иткәнсе, аҙна аҙағы яҡынлаша, әйҙә, киләһе аҙнаның башында уйлашайыҡ был эш хаҡында!

- Комиссия ни, эштәре шул, килер ҙә ҡайтыр, беҙгә бында йәшәргә, тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға кәрәк.

- Ҡыҙҙырған тимерҙе нисегерәк итеп һуғырға самалайһың?

- Ҡоро ҡашыҡ ауыҙҙы йырта, иң беренсе - гуманитар ярҙам алып барырға ине, билдәле булыуынса, ундағы халыҡ һәммәһенә мохтаж!

- Ярай, иртәгә эшкә барғас, айыҡ аҡыл менән хәл итербеҙ!

Иртәгеһенә иртә менән директор Сибай мәғлүмәт үҙәген, атап әйткәндә "Атайсал", "Сибайский рабочий", типография коллективтары хеҙмәткәрҙәрен йыйып алып, йыйылыуыбыҙҙың әтнәкәһен төшөндөрҙө, ҡайһы бер мәлдәргә үҙем асыҡлыҡ индерҙем. Шуныһы иғтибарға лайыҡ - әүҙем коллегаларыбыҙ беҙҙе һәр саҡ ярты һүҙҙән аңлап тора. Был юлы ла тиҙ арала аҡса йыйып, кәрәкле әйберҙәрҙе тупларға ла керешеп киттеләр, кемгәлер япһарып, ялтанып маташмай, туранан-тура яуаплы эшкә егелделәр. Өфө ҡунаҡтарын оҙатҡансы, водитель Ринат Хәсәнов шылтыратып, рапорт бирә лә һалды: "Кәрәкле әйберҙәр, аҙыҡ-түлек һатып алдыҡ, кейемһалымды тоҡтарға тултырҙыҡ, багажниктың артҡы яғы, салондың яртыһы тулы, машинаны заправить иттем, юлға әҙермен!"

Иртәгеһен таң ҡараңғыһында "Сибайский рабочий" гәзитенең баш мөхәррире Людмила Михайловна Ильязова, "Атайсал" гәзитенең журналисы Гөлдәр Сәйетәхмәт ҡыҙы Ҡадаева һәм мин сәхәр менән сәфәргә юлландыҡ. Атап үткән коллегаларым менән тәүге тапҡыр ғына бындай өҙәрем юлдарға сыҡмайбыҙ, юлдаш юлда һыналғанлыҡтан, уларҙың ныҡлығына, сыҙамлылығына өйрәнеп бөткәнмен. Машина нышып тултырылғанлыҡтан, ауыр ҡуҙғалып китте, шуға Ринатҡа күрһәтмә бирергә лә онотманым: "Ашыҡҡан етмәй, бойорған етә, тиҙәр халыҡта, артыҡлап өтәләнмә, барыр тарафҡа ҡасан да барып өлгөрөрбөҙ!"

Өс район биләмәһен үтеп, Ырымбур еренә аяҡ баҫтыҡ. Унғансы офоҡҡа таң ойоткоһо ҡунғайны инде. Йәйрәп ятҡан дала беҙҙе көн аяҙ булһа ла ҡыуан еле менән ҡаршы алды. Алдан уҡ шуны әйтмәксемен, сәфәр сәхифәләре гәзиттәрҙә, социаль селтәрҙәрҙә тулыһы менән ентекләп яҙылыр, шуға бар теләгем - башҡаларҙың ижади табағына әрһеҙ себендәй төшмәй генә күргән-ишеткәндәргә үҙ ыҙмамдан баһа биреү, һығымталар яһау. Ҡабатлауҙарҙың булыуы ла ихтимал, тик улайға уҡ китһә, бында бер ниндәй ҙә хилафлыҡ күрмәйем, доғаны ҡат-ҡат ҡабатлауҙан иман үҙгәрмәй. Был сәфәрҙе ойоштороп ебәреүем дә, кемдәндер ишеткәнсе, үҙең барып күреүгә ни етә уйынан, һәм ҡулдан килгән ярҙамды күрһәтеү теләгенән атҡарылды. Ошо йәһәттән төбәк гәзите "Атайсал" биттәренә көндәлек яңылыҡтарҙан әүәл аналитик, тәнҡит, ер-һыу атамалары, халыҡ йырҙары тарихтарын, милләтебеҙҙең үткәне, рух, йәшәйеш хаҡында мәҡәләләр бирергә тырышабыҙ, бәлки, бына ошолар менән ҡайһылыр кимәлдә үҙ йөҙөбөҙҙө күрһәтәбеҙ, ота-

*ТАРИХҺӨЙЛӘЙ*

# ӨФӨ ТЕАТРҘАРЫ ТАРИХЫНАН



**Өфө халҡын театр сәнғәте менән тәүләп бында һөргөнгә ебәрелгән поляктар таныштыра. 1772 йылда улар өфөләргә үҙҙәре ҡуйған "Пан Бронислав" спектаклен күрһәтә. Ҡыҙыҡлы һәм һис бер көтөлмәгән театраль акт тамашасыларға көслө тәьҫир итә, һәм был провинциаль Өфөлә үҙешмәкәр театр хәрәкәтен башлап ебәреүгә нигеҙ була. Әммә ҡалала беренсе даими эшләүсе театр XIX быуат урталарында ғына барлыҡҡа килә.**

1861 йылда Өфө губернаторы, талантлы яҙыусы Сергей Аксаковтың улы Григорий Аксаковтың ҡатыны Софья Александровна тырышлығы менән театр төҙөү өсөн етерлек аҡса туплана. Театрҙың ағас бинаһы ҡала үҙәгендә - Садовая (Матросов), Ильинская (Вәлиди), Телеграфная (Цюрупа), Воскресенская (Туҡай) урамдары арауығында урынлаша. Әммә ете йыл үтеүгә был театрҙа янғын сығып, бина янып бөтә. 1876 йылда ошо уҡ урында меценат Базилевский исемен йөрөткән ике ҡатлы яңы театр асыла.

Өфөлә ул саҡтағы иң билдәле театр заводчик, меценат Виденеев исеме менән атала. Ул хәҙерге Аксаков паркында төҙөлә, 1894 йылдан 1991 йылға тиклем эшләй. Унын сәхнәһендә бик күп күренекле сәнғәт әһелдәре, әҙәбиәт һәм фән белгестәре сығыш яһай. Мәҫәлән, СССР-ҙың буласаҡ халыҡ артисы Александра Яблочкина тап ошо сәхнәлә тамашасыларҙың күңелен яулай. Өфө театрҙарында сығыш яһаған Фёдор Шаляпин, замандашыбыҙ, күренекле балет артисы Рудольф Нуреев һуңынан барса донъя сәхнәләрендә танылыу таба.

✔ *Иң аҙаҡтан һыу баҫҡан ергә йүнәлдек. Ташҡын бер аҙ ҡайта төшкән. Кисә һыу аҫтында ҡалып, бөгөн асылған тәңгәлдә трамвай рельстары сырмалған тимер сымдай өйөлөп ята, арыраҡ ҡыйыҡтарына саҡлы һыуға сумған йорттар күренә.*



быҙ, баҫмабыҙҙың тиражын тотабыҙҙыр ҙа.

Ырымбур еренә аяҡ баҫыуға юл ҡырында һоро, ташландыҡ ауылдарҙың йыш осрауы бер аҙ көйефте ебәреңкерәне, шуға алыҫлашып та өлгөрмәй, тыуған төйәгебеҙҙең матурлығын, Сибай ҡалаһының тәҙеклөгән, таҙалығын, бөхтәлеген һағына ла башланыҡ. Барған юлыбыҙ күп тапалыуҙан иҙелгән, ҡыйралған, ҡайһылыр киммәлдә эшлектән сыҡҡан ҡырсынташ, яңы ҡар ирепбөткәнлектән көләйләр, инмәле-сыҡмалы ерҙәр күп, шуға машинабыҙ ҡорһағы менән ерҙе һөрөп тиерлек бара. Сары станцияһынан һуң юл бер аҙ ыңғайлана төштө. Туп-тура яңы Орск ҡалаһына ҡарай, навигатор күрһәткән йүнәлештән киттек, тәғәйен йортобоҙҙо ауырлыҡ менән эҙләп таптыҡ. Билдәле, күнелле ваҡиға түгел, шуғалыр ҙа йорттоң иркен залында ултырған кешеләрҙең ҡаштары төйөк, һәр кем үҙ уйына бирелгән, сәләмләүемде алып та тормай, үҙемде күрмәмешкә һалышып баш баҫтылар. Вахтала ултырған ҡатындарға мөрәжәғәт иттем һуңғы сиктә. Улар төп һыу баҫҡан ер бында түгел, иҫке Орск яғында, һарҡыу яҡта икәнлекте аңлатып, өҫтәмә адресты әйттеләр. Мин дә ныҡыша ҡуйҙым: "Беҙҙе һыу баҫҡан тәңгәлдең иң үҙәгенә, ҡаза күреүселәрҙең кисекмәҫтән ярҙамға мохтаж ерөнә ебәрегеҙ!" Бараһы урыныбыҙ Ырымбур яғына киткән, бынан 40 саҡрым арауыҡта икән дә баһа.

Гуманитар ярҙам нөктәһе иҫәпләнгән спорт комплексы бейек ҡойма менән уратып алынған, эс яҡта бер нисә ир кеше күренә. Йомошомдо әйттем. Мосолман ҡиәфәтле ир (милләте ҡаҙаҡ булһа кәрәк) рәшәткәгә эленгән, килтерелгән әйберҙәр, аҙыҡ-түлек сәғәт көндөҙгә икенән һуң ғына өләшелә башлай, тип яҙылған белдереүгә ымланы. "Юҡ, һеҙ беҙҙе аңлап етмәнегеҙ, беҙ, кирәкһенсә, гуманитар ярҙам килтерҙек!" тинем. Ирҙең йөҙө ирәмһеп китте лә шундуҡ ҡапҡаны шар асып ебәреп, машинабыҙҙы эс яҡҡа үткәрҙе. "Ҡайҙан килдегеҙ?" тип ҡыҙыҡһына был. "Башкортостандан!" "Из Башкирии, значит!" "Нет, из Башкортостана! Город Сибай, информационный центр!" "Где расположен этот город?" "Рядом с городом Магнитогорск!" "Я не был в ваших краях, но из информационных центров вы первые!"

Ирҙең Сибайҙы белмәүе бер аҙ эсте бошорһа ла, мәғлүмәт үҙәктәренән беренсе булыуыбыҙ бер аҙ тынысландырҙы.

Апаруҡ ҙур, киң майҙанды биләгән спорт комплексының артҡы яҡ ишегенә барып еткәнсе, беҙҙең йөк күҙ менән ҡаш араһында үҫмерҙәр, ирекмәндәр тарафынан бушатылып та ҡуйғайны. Бына ниндәй шәп, етеҙ, өлгөр егеттәр үҫеп килә! Ә беҙ уларҙы тәнҡитләүҙе, өҙлөкһөҙ тиргәүҙе ғәҙәт итеп алғанбыҙ. Көн барышында ошондайҙарҙы мәктәптә, гимназияла ла осраттым, бер нисәүһе менән әңгәмә ҡороп алырға ла тура килде. Иртә таңдан ҡара кискә саҡлы бер ниндәй түләүһеҙ улар халыҡҡа эскерһеҙ ярҙам күрһәтәләр, ҡулдарынан килгәндең барыһын да эшләйҙәр. Орск ҡалаһын һыу баҫыуҙың иртәгәһенә үк Сибай егеттәренең ярҙам ылауы ойоштороуҙарын күреп ныҡ ҡыуанғайным, бындағы йәштәрҙең фиҙакәрлеген күреп, илһөйәр быуындың алмашҡа килеүҙәренә тағы ла бер тапҡыр инандым.

Комплекстың директоры Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры дәрәжәһенә эйә ҡатын кеше. Бар эштәрҙе лә ыңғай йүнәлешкә һалған, хеҙмәткәрҙәр, эшселәр үҙҙәренең тәғәйен урынын белеп, һәр ҡушылғанды ығы-зығыһыҙ үтәп тә ҡуялар. Иркен зал әсәр һыу тултырылған пластик һауыттар, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, ҡулланыу кәрәк-яраҡтары менән тулып киткән. Килтерелгәндә маҡсатҡа ярашлы итеп, айырым урынлаштыралар. Тағы шуныһы - спорт комплексында ла, 3-сө һанлы гимназияла ла беҙҙе асыҡ йөҙлө, ихлас кешеләр ҡаршы алды, һорауҙарыбыҙ, теләктәребеҙ һүҙһеҙ үтәлде. Бер мөләйем йөҙлө, урта йәштәрҙәге ҡатын өс улын эйәртеп килеп, көн барышында ошонда эшләйҙәр икән. Һеҙ ҙә ҡазаланыусымы әллә, тигән һорауға ул былай тип яуап бирҙе: "У нас другая беда, недавно сгорел наш дом, мы - погорельцы, и поэтому чужую боль и страдания остальных - принимаем, пропускаем через сердце!"

Ошо бола мөлендә йыйын әтрәгәләмдәрҙең бермә-бер ишәйеп китеүҙәре хаҡында ла әйтеп үттеләр. Ни хәл итмәк, донъя бит игелекле, миһырбанлы кешеләрҙән генә тормай, әммә шуны һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк, ерҙең күсәрен барыбер иманлы кешеләр әйләндерә, донъя тотҡаһы уларҙың ҡулында. Ҡазаланыусылар менән дә әңгәмә ҡороп алырға тура килде, төрлө милләт кешеләре ине улар: урыҫтар, татарҙар, сиғандар, ҡаҙаҡтар. Мәләүез кешеһе, әммә ғүмере буйы ошонда көн иткән ир беҙҙең Башҡортостандан икәнлегебеҙҙе ишетеү менән артыбыҙҙан эйәртеп йөрөп хәбәр һөйләргә керешеп китте. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, былдай ҡурҡыныс ташҡынды ул һис ҡасан күрмәгән, ә рәсми мәғлүмәттәр ошондай оло ҡазаның бынан 100 йыл самаһы элек булыуын әйтә. Күптәре бер ҡат кейем менән, документтарын ҡулдарына саҡ алып өлгөрөп ташҡындан ҡасҡандар. Илле йәштәр самаһындағы ир ейәнсәрен алып, ҡатынын эштән барып алырға йүнәлгән. Машинаға саҡ инеп ултырып өлгөрәләр, ташҡын уларҙы баҫтыра ла башлай. Ярай әле ейәнсәребеҙ, документтарыбыҙ үҙебеҙ менән ине, тип ҡыуаналар хәҙер. Һикһән йәштәр тирәһендәге урыҫ әбейенең йортонда ике бесәйенең тороп ҡалыуын әйтеп иламһырап ултырыуын да аңлайбыҙ, һәр кемдең үҙ йыуанысы, үҙ ҡайғыһы! Гимназияның үткелегендә МФЦ, медицина, прокуратура, социаль өлкә хеҙмәткәрҙәренең халыҡҡа әүҙем ярҙам күрһәтеүҙәрен күрҙек. Ҡаҙаҡ ҡарты түшәнерләштаныр эҙләп килгәйне, тиҙ арала ул һорағандарын алып сығыу ягына ҡарай йүнәлде. Спорт залын тултырып, карауаттар урынлаштырылған, бында йыһы, яҡты, ашауэсеүгә мохтажлыҡтар юҡ, ҡунаҡта һәйбәт булһа ла өйөндә яҡшы, тигәндәй, ни тиклем генә бындағы шарттар һәйбәт булһа ла, үҙ йортоңа бер ни ҙә етмәй инде ул!

Иң аҙаҡтан һыу баҫҡан ергә йүнәлдек. Ташҡын бер аҙ ҡайта төшкән. Кисә һыу аҫтында ҡалып, бөгөн асылған тәңгәлдә трамвай рельстары сырмалған тимер сымдай өйөлөп ята, арыраҡ ҡыйыҡтарына саҡлы һыуға сумған йорттар күренә. Ҡыҙғаныс, йәнде екһендергән күренеш. Эсемдән генә, һыу ҡайтҡан хәлдә лә ауырлыҡтар алда әле, тип уйлап ҡуйҙым. Булмышыма ярашлы һәр саҡ яҙғы ташҡындарға ҡыуана торғайным, был ташҡын мине тәүге тапҡыр оло хафаға һалды, ул бысраҡлыҡтарҙы йыуып, ҡайҙалыр алып китмәне, кирәкһенсә, уны беҙ йәшәгән ергә килтереп тултырҙы. "Һыуҙан ҡалһа ла уттан ҡалмай!" ти халыҡ мәҡәле, әммә халыҡтың ғүмере буйы йыйған мөлкәтен ҡәһәрле һыу йотҡан, уларҙан ни генә тороп ҡалыр аҙаҡтан, мәсьәлә бына ниҙә. Әммә изге күңелле, алсаҡ, тырыш кешеләрҙе, илһөйәр йәштәрҙе күреп, был ваҡытлы ауырлыҡтарҙың сигенеренә өмөтләндем, ышандым.

Бына беҙ тыуған төйәкҡә ҡайтып етеп, Ирәндек тауҙары теҙмәһе янынан үткән юлдан елдерәбеҙ. Бер урынға өйөлөп, юғарыға ынтылып ҡалҡҡан суйыр таштарҙы күрәм. Улар берәһе икенсеһенә һыйынғанда ғына йыйылыкты оҙаҡ тоталар, ныҡ, ҡаҡшамаҫ булалар. Кешеләр ҙә шулай...

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

# ҺЫУҺАР ДАНЫ...



**Һыуһар һүрәте Рәсәй тарихында билдәле булған беренсе территориаль эмблемалар иҫәбенә инә. Иң элек ул Өфө губернаһы воеводаһының көмөш мисәтенә төшөрөлә.**

Һыуһар Өфө ҡалаһы гербына XVII быуат урталарында, Петр I реформалары ваҡытында индерелә. Шулай ҙа ҡаланың икенсе гербы - аҡ ат һүрәтлеһе лә була. Әммә ул оҙаҡҡа бармай, аҙаҡтан Өфө гарнизоны байраҡтарында ғына тороп ҡала. Ә һыуһарлы герб барыһына ла оҡшай, һәм ул бөгөн дә үҙенең композицияһы һәм төҫтәре буйынса тарихи гербты ҡабатлай.

Ҡиммәтле тиреле йәнлектең Өфө ҡалаһы менән бәйле булыуы тарихи яҡтан бик нигеҙле. Ул замандарҙа Башҡортостанда һыуһар ныҡ таралған була, ә уның йомшаҡ йөнлө матур тиреһе юғары баһалана. Башҡорттар аҡ батша Иван Грозныйға түләгән яһаҡтың бер өлөшө тап һыуһар тиреләре һаны менән иҫәпләнә.

Өфөнөң хәҙерге гербы рәссам Салауат Ғиләжетдинов тарафынан тергеҙелә. Гербтың үҙәк фигураһы - йүгереп барыусы тәбиғи көрән-һоро төҫлө һыуһар. Уның ғорур һыны - байлыҡ, ғорурлыҡ һәм дәрәжәле булыу символы. Гербтың көмөш төҫөндәге майҙаны - инаныс, саф йөрәклелек һәм күңелдән юғары ыҗданлылығы билдәһе. Гербтың аҫҡы яғындағы йәшел ялан - уңдырышлылыҡ, шатлыҡ, азатлыҡ, һиллек һәм тыныслыҡты символлаштыра.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

62-се полктың разведчиктары тәүәккәл эш итә. Гв. сержанттары Петр Остапов һәм Иван Кондратьев - боҙ кисәге өҫтөндә йылға аша сыға һәм дошмандың траншеяһына бәреп керә: Кондратьев ҡул пулеметы, Остапов автомат менән. Улар икәүләп дошмандың 50-нән ашыу һалдатын һәм офицерын юҡ итә, уларҙың иҫән ҡалғандары ҡаланың көнбайыш яғына табан сигенә. 62-се гв. атлы полкынан гв. лейтенанты А. Н. Гришко взводы йөҙә ғына боҙҙарҙа йылға аша сығып, дошман окоптарына ташлана.Улар артынан ПТР взводы сыға һәм дошмандың бер орудиеһын һәм пулеметын юҡ итә. Башҡа эскадрондар тиҙерәк йылға аша сығыу һәм ҡаланы штурмлауға ҡушылыу мөмкинлеген ала. 62-се полктың 45 миллиметрлы танкҡа ҡаршы орудиеларын да боҙ өҫтөндә сығаралар. Гв. кесе сержанты С. К. Капозяндың расчеты аҫтындағы боҙ ярылып китеп, орудие һыу төбөнә китә. Капозян һәм уның иптәштәре, боҙло һыуға сумып, орудиены ярға һөйрәп сығара. Уларҙың уты ҡала ситендәге урамды алыуға ныҡ ярҙам итә. Дивизия командиры шул көндә үк С. К. Капозянды III дәрәжә Дан ордены менән бүләкләүе хаҡында телефон аша хәбәр итә. Ҡала урамдарында фашистар гв. капитаны Н. А. Кузьменконың (62-се гв. атлы полкы) 1-се эскадронына орудиенан ут аса. Ҡылыссылар атакаһы туҡталып ҡала. Капитан Кузьменко үҙенең бер автоматсыһы менән дошман орудиеһына яҡын килеп, гранаталар ырғыта. Эскадрон яңынан атакаға күтәрелә. Капитан Кузьменко үҙенең яугирҙары менән, немец пушкаһын кирегә бора һалып, дошман өҫтөнә уларҙың үҙ снарядтарын яуҙыра.

Ҡаланы штурмлау еңел булмай: таш биналарҙан, сарҙаҡтарҙан ут асып, немецтар аяуһыҙ ҡаршылыҡ күрһәтә. Әммә гвардиясылар алға ашҡына, немец оборонаһы йә бер, йә икенсе урамда юҡ ителә, иҫән ҡалған дошман һалдаттары һәм офицерҙары ҡасып китеү яғын ҡарай. Беҙҙең яугирҙарыбыҙға 148-се гв. артминполкы һәм полк батареялары ярҙам итә. Дивизия штабы был мәлдә Пилица йылғаһының көнсығыш яғында ҡалған була. Бер мәл штабҡа немец автоколонна яҡынлашып килеүе белен. Штаб янында торған зенит батареяһы, яҡынайып килгән дошман машиналарына тура тоҫҡап, ут аса. Зенит орудиеларының бер нисә залпынан һуң урман юлында ундан ашыу емертелгән немец машинаһы ултырып ҡала. Машиналарҙан һикерешеп төшкән һалдат һәм офицерҙар, паникаға бирелеп, урманға ҡаса, әммә унда уларҙы штабты һаҡлаусы резерв эскадроны яугирҙары көслө ут менән ҡаршылай. Һөжүмтәлә 100 гитлеровсы әсиргә алына, улар иҫәбенә 20-нән ашыу офицер ҙа инә. Был дошмандың 42-се армия корпусы штабы була, ул Томашув ҡалаһын обороналауҙы ойоштороу өсөн ебәрелә.

Оккупациянан азат ителгән Томашув-Мазовецки халҡы беҙҙең атлыларыбыҙҙы ҡыуанып ҡаршы ала. Поляктар урамдарға икмәк-тоҙ менән сыға, немецтарҙың ҡасып-боҫоп ятҡан урындарын күрһәтә. Томашув йүнәлешендәге һөжүм итеү алыштарында 7-се гв. атлы корпусы дошмандың 2 меңдән ашыу һалдат һәм офицерын юҡ итә, 800 кешеһен әсиргә ала (шул иҫәптән 35 офицерын), 42-се армия корпусы штабын тар-мар итә. Шулай уҡ немецтарҙың бик күп хәрби техникаһы юҡ ителә, бай трофейҙар алына.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

*✓ Милли кейемебеҙҙе заман талаптарына яраҡлаштырып, йәки үҙебеҙҙе башҡорт, татар, урыҫ тип танытҡан биҙәктәр, тамғалар, образдар тыуҙырған кейемде көн дә кейергә тейешбеҙ.*

УЙЛЫҒА - УЙ

# БАШҠОРТОСТАНДА ЙӘШӘЙЕМ ДӘ УЛ,

## әммә башҡорттарҙы күрмәнем!

**Кесе Ватан - ул беҙ тыуған, йәшәгән, тәрбиәләнгән, мәҙәни үҙенсәлеген һәм традицияларын үҙләштергән урын. Шуға Кесе Ватан мәҙәниәтенә, милләтеңә, йолаларыңа, ғөрөф-ғәҙәттәреңә, әхлағыңа, атай һәм әсәй быуындарына бәйләнешең булырға тейеш.**

Аңлау өсөн мәҙәниәт, традициялар, этика кеүек төп төшөнсәләрҙең айышына төшөнөү зарур. Мәҙәниәт - латин теленән "эшкәртеү", "тәрбиәләү", "белем биреү", "үҫеш", "хөрмәтләү" тигәнде аңлата, ул йәмғиәттең ижади көстәре тыуҙырған матди һәм рухи ҡиммәттәрҙең үҫеш кимәле. Ябай тел менән әйткәндә, мәҙәниәт - ул теге йәки был ҡылыҡтарҙы тыйыу һәм рөхсәт итеү системаһы. Ә традициялар - быуындан-быуынға тапшырыла килгән идея, ҡараш, зауыҡ, эш итеү рәүеше, ғөрөф-ғәҙәттәр, үҙ-үҙеңде тотошонда, көнкүрешеңдә тәртип булдырған йола. Әммә беҙ бөгөн ошондай дөйөм төшөнсәләр менән үҙебеҙҙең берҙәйлегебеҙҙе таныйбыҙмы һуң?

Әгәр элек халыҡтың берҙәйлеген тамғалар, кейемдәр, йолалар, тәртип, ғөрөф-ғәҙәт һәм башҡалар сағылдырһа, хәҙер ул ниндәй телдә һөйләшеүгә ҡайтарып ҡалдырыла. Һәм көндәлек тормошта тик телде үҫтереү менән генә мәшғүлбеҙ. Әммә, билдәле булыуынса, тел - ул тик "һанлы код" менән ниндәйҙер мәғлүмәтте ҡағыҙға хәрефтәр ярҙамында күсереү генә, шул уҡ ваҡытта мәҙәниәт - ул табу, йәғни тыйыу. Ә ул үҙ сиратында теге йәки был милләттең тәртибенә йоғонто яһай. Беҙҙең берҙәйлекте аңлауыбыҙҙа (Башҡортостан һәм Рәсәйҙә йәшәгән башҡорт, татар, урыҫ, йәһүд, сыуаш, мордва һ.б. күп һанлы халыҡтарҙың) мәҙәниәтте төшөрөп ҡалдырып, ниндәй телдә һөйләшеүгә баҫым яһала. Һәм ышаныс менән әйтергә була, Башҡортостан ҡалаларында башҡорт, татар, урыҫ һ.б. этнос тамғалары юҡ. Ни өсөн? Әйҙәгеҙ, мәҙәниәтебеҙ һәм берҙәйлегебеҙгә ярашлы, бер нисә эҙмә-эҙлекле осраҡты ҡарайыҡ.

Этностың, халыҡтың быуаттар дауамында йәшәү һәм һаҡланып ҡалыу нигеҙендә уның мәҙәниәте, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, холҡо ята, шунан ғына теле һәм дине килә. Сөнки мәҙәниәт кешелә йәмғиәттә үҙ-үҙеңде тотоу кодекссын формалаштыра. Ә дин, белеүебеҙсә, күптәр менән идара итеү системаһы ғына ул. Бөгөн һеҙҙең менән берҙәйлектең ике аспектын ғына ҡарайыҡ: **кейем һәм йолалар.**

**Тәү сиратта кейемдә сағылған үҙебеҙҙең милли берҙәйлекте күҙҙән үткәрәйек.** Һүрәттә кейем өлгөләре бирелгән. Уң һәм һулда күрһәтелгән һүрәттәргә күҙ ташлағыҙ. Унда башҡорт, татар, урыҫ халыҡтарының милли ансамблдәре кейемдәре килтерелгән. Уларҙың ниндәй төҫтәр, тамғалар, биҙәктәрҙә тороуына иғтибар итегеҙ. Меңәр йыллыҡ тарихыбыҙ дауамында ата-бабаларыбыҙ тарафынан уларҙың һәр береһенә айырым мәғәнә һалыныуын, быуындан-быуынға ҡәҙерләп һаҡланып, тапшырыла килеүен беләбеҙ. **Әммә шундай һорау тыуа: семәрҙә, тамғала, биҙәктәрҙә сағылдырылған образдарҙың йәшерен мәғәнәһен кемебеҙ аңлай һәм уның тураһында һөйләй, йәки тамғаның атамаһын һәм аңлатмаһын булһа ла әйтеп бирә ала? Ә бит кейемгә ҡарап, беҙ кешенең ниндәй ырыуҙан, ауылдан, төбәктән булыуын билдәләйбеҙ, йәки ниндәй милләт кешеһе икәнен танйбыҙ.**







Әхәҙер һул яҡта күрһәтелгән һүрәттәргә күҙ һалығыҙ. Ябай яулыҡ - хиджаб. Уларға ҡарап, былар ғәрәптәр, тигән һығымтаға килергә була. Аҫтында аңлатмалы яҙыуы булмаһа, был беҙгә ят булған мәҙәниәттән килгән кейемдәгеләр беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙ икәнен белмәҫ тә инек. Дин менән бутамағыҙ. Мәҙәниәт һәм халыҡҡа ҡарата дин икенсе, хатта өсөнсө урында тороуын аңларға кәрәк.

Тарих дәүерҙәренә күҙ һалһаҡ, халҡыбыҙҙың дине мәжүсилектән Исламға тиклем үҙгәреш алған. Материализм да диндең бер төрө ул. Барлыҡҡа килгән генә осорҙа һәр бер дин бөтә кешеләрҙе лә үҙенә буйһондора, хатта аҡыллы һәм көслөләр ҙә ситтә ҡала алмай. Аҙаҡ уны тәфсирләйҙәр, хаҡ тормош урынына йолалар индерелә, һәм барыһы ла жрецтарҙың ике йөҙлөлөгө, уларҙың власть һәм хөрмәт артынан ҡыуыуы менән тамамлана.

**Бына инде ҡарағыҙ, урамдарҙа хиджаб кейгән ҡыҙҙар көндән-көн күбәйә һәм шул рәүешле башҡорт, татар һәм урыҫ халыҡтарының мәҙәниәтен уларға бөтөнләй ят булғанына алмаштыра. Шуныһы ҡыҙғаныс, былай кейенергә өгөтләгән йәштәр был рәүешле халҡының милли кейемен, үҙ мәҙәниәтен ҡыҫырыҡлауын аңламай. Әгәр ҙә улар Ислам диненә килгән икән, был турала бар донъяға белдереп, ғәрәп мәҙәниәтен рекламалап йөрөү урынына, үҙ милли кейемдәрен күрһәтергә нимә ҡамасаулай һуң? Яулыҡ бөтәһендә лә бар бит! Ислам динен ҡабул ит, әммә үҙ мәҙәниәтеңде һаҡла, күҙ буяу өсөн генә йөрөмә. Ислам - ул тыйнаҡлыҡ, ә ҡупыҡлыҡ түгел дә баһа.**

Тағы ла шундай бер факт, менталитет тураһында ла әйтмәй булмай. Донъяға ҡараштары йәһүд, христиан һәм мосолман диненә нигеҙләнгән халыҡтарҙан айырмалы рәүештә, ҡытайҙар киләсәгенә арҡаһы менән тора, шуға улар үткәндәренә текләп ҡарай. Традицияларҙың көсө, үҙ архетибыңды һаҡлау, башҡа халыҡтарҙы ассимиляцияға дусар итә алыу ҙа ошонан килә.







Был донъяла "йәшәгән" йылдарҙан сығып та фекер йөрөтөргә була. 2024 йыл һижри календарь буйынса 1446 йылға тура килә. Ә ҡытай календарына ярашлы, хәҙер 4591 йыл. Һинд календарынса 5000 йыл самаһы йәшәгәнбеҙ. Урыҫ календарында 7532 йыл, тик 1700 йылда 5508 йылын алып ташлағандар. Йәһүдтәрсә 5782 йылда йәшәйбеҙ. Тимәк, ҡытайҙар һәм һиндтар был йәһәттән беҙҙән бер ни тиклем олораҡ, тәрән аҡыллы ла. Беҙ ҙә аҡыллыраҡ булайыҡ.

**Шуға күрә Башҡортостанда үткән милли кейем көнө - үтә баҫалҡылыҡты сағылдыра, был шундай боронғо халыҡ вәкиле булыуҙан оялыу менән ауаздаш хатта.** Милли кейемебеҙҙе заман талаптарына яраҡлаштырып, йәки үҙебеҙҙе башҡорт, татар, урыҫ тип танытҡан биҙәктәр, тамғалар, образдар тыуҙырған кейемде көн дә кейергә тейешбеҙ. Ҡытайҙар, һиндтар, Урта Азия халыҡтары ла шулай итә һәм шул рәүешле үҙ мәҙәниәтен һаҡлай, үҫтерә генә түгел, туған телен дә йәшәтә! Беҙ уларҙан кәмме ни? Тик бында ла алтын урталыҡты һаҡлау зарур, юғиһә, урыҫтар әйтмешләй, алйотҡа, Хоҙайға табын, тиһәң, маңлайын ярыр. Сама тигәнде онотмау мөһим.

Берҙәйлегеңде, мәҙәниәтеңде, тел үҙенсәлектәреңде һаҡлау өсөн традицион кейемдәрҙе күҙ ҡараһылай һаҡларға, уларҙы заман талаптарына ярашлы үҙгәртергә, әммә әхлаҡи өлөшөнә баҫым яһарға кәрәк. Милли кейемдәрҙә булған биҙәктәр сигеүле кейем кейһәк тә яҡшы. Был эште мәктәптәрҙән башлау айырыуса өҫтөнлөклө, сөнки балаларыбыҙ күп милләтле берҙәм һәм диндәр, конфессиялар тигеҙлеге һаҡланған дәүләттә йәшәүебеҙ менән ғорурланырға тейеш.

**Тағы ла бер фекер алышыу талап иткән тема - йола, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ.** Ҡытайҙар әйтмешләй, беҙ, Себер халыҡтары, йәки Себер цивилизацияһы вәкилдәре һәр ваҡыт община менән йәшәгәнбеҙ. Һыуыҡ климатта йәшәүебеҙ ҙә быға йоғонто яһаусы факторҙарҙың береһе булыуы ихтимал, сөнки ырыуҙаштар ярҙамынан тыш тере ҡалыуы мөмкин булмаған. Шуға хатта өй төҙөгәндә лә кеше бер үҙе генә эшләмәгән, уға бөтә ырыу халҡы, заттары ярҙам итешкән. Ә мәғлүм булыуынса, бөтә ғаиләләр ҙә өс быуындан торған: олатай-өләсәй, атай-әсәй һәм кәмендә биш бала. Ғаиләләрҙә балаларҙың күплеге тере ҡалырға тырышыу, үлемесле ауырыуҙарға, нәҫелде дауам итеүгә бәйле булған, ә хәҙерге кеүек "модала" булған өсөн түгел. Сөнки ул заманда бөгөнгө кеүек пенсиялар булмаған, ата-әсәләр тураһында хәстәрлек тулыһынса балалар иңенә ятҡан. **Ә өс быуындан торған ғаилә балаларҙа һәм ейәндәрҙә өлкәндәргә ҡарата хөрмәт, ихтирам, түҙемлек һәм һөйөү тәрбиәләгән, сөнки улар ҙа тиҫтә йылдарҙан һуң шундай уҡ олатай-өләсәйгә әүереләсәк. Шуға, хәҙерге көндә Башҡортостанда ҡарттар йорто йәки балалар йорттары барлығы - ошо төбәктә йәшәүсе халыҡтар өсөн хурлыҡ билдәһе. Был ғаилә ҡиммәттәре, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең юҡҡа сығыуының һәм ер йөҙөндәге халыҡтарҙың нигеҙҙәре, киләсәге емерелеүенең бер күрһәткесе.**

Үрҙә телгә алынғанса, беҙ, башҡорттар, һәр ваҡыт община менән йәшәгәнбеҙ һәм ҡулдан килгәнсе бер-беребеҙгә ярҙам иткәнбеҙ. Ниндәйҙер мануфактура асырға кәрәк була икән, бөтә ырыу был эшкә ҡушылған, берәмтекләп аҡса йыйылған һәм шуға ҡорамалдар, тауар, сеймал һатып алынып, эш яйға һалынған. Әлбиттә, килем дә ырыу ағзалары араһында тигеҙ бүленгән, йәки тыуған-тыумасаны йәшәтеүгә, уҡытыуға, йорт һалып биреүгә кәрәк осраҡтарға тотонолған.

Хәҙер үҙебеҙ йәшәгән 21-се быуат системаһын сағыштырайыҡ, беҙ һаман да башҡорттар булып ҡалғанбыҙ ҙа һымаҡ... Әммә берәйһенең балалары өйләнешкәндә йәштәр өсөн торлаҡ мәсьәләләрен ата-әсәһенән башҡа кем хәстәрләшә? Күптәрҙең ата-әсәһе лә ярҙам итә алмай, йәш ғаилә банктан юғары процентҡа кредит алып, үҙ йүнен үҙҙәре күрергә мәжбүр була. Ә бит ҡатын-ҡыҙ бала табырға йөрьәт итһен һәм шул рәүешле үҙенә тәбиғәттән һалынған изге бурысын үтәһен, дәүләттең демография сәйәсәтенә ярҙам итһен өсөн үҙ өйө булыуы тәү шарт. Бөгөн беҙҙең йәш ғаиләләр 20-25 йыл ипотеканы түләүгә эшләй.

Ошо урында шундай һорау тыуа: "Ысынлап та башҡорт, татар, урыҫ, йәһүд, сыуаш, мордва йәки башҡа милләт кешеһеме ул һеҙ?" Әгәр һеҙ атамағыҙ ғына түгел, ә йолаларығыҙ буйынса ошо халыҡтарҙың бер вәкиле булһағыҙ, ҡан ҡәрҙәштәрегеҙ барыһы ла берләшеп, күптән фатир алырға ярҙам иткән булыр ине. Мәҫәлән, 100 ғаилә туғандаш икән, туйығыҙға 50 мең һумдан һалһалар ҙа (бер йыл эсендә был сумманы туплай алырҙар), ҡулығыҙға 5 миллион һум аҡса төшәсәк. Йәш ғаилә фатир һатып ала, йәки йорт һалдыра ала. Улар аяҡҡа баҫып алыу менән туғандарына ырыу менән шундай уҡ ярҙам күрһәтә башлай. Был йорт алыуҙа ғына түгел, шул уҡ шәхси эшеңде асыу, бизнесҡа ла ҡағыла.

Тик, ҡыҙғанысҡа күрә, Башҡортостанда башҡорттар, татарҙар, урыҫтар һәм башҡа ерле халыҡтар юҡ һымаҡ табаһа! Шуға был ҡырыҫ донъяла тере ҡалыу өсөн беҙгә тамырҙарыбыҙҙы барларға, мәҙәниәтебеҙҙе тергеҙергә һәм милләтте йәшәтер көстө табырға кәрәк. Күмәкләгән яу ҡайтарған, ти. Был йәһәттән ҡытайҙарҙан өлгө алырға була: улар бизнесты ла, эште лә ғаилә мәнфәғәтендә ҡора.

**Шамил БАТЫРШИН,**
**ӨДНТУ һәм М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның өлкән уҡытыусыһы, психология магистры.**
**Зәки ӘЛИБАЕВ,**
**БДПУ доценты.**

*АФАРИН!*

# БАШҠОРТСА СЫҒЫШ ЯҺАРҒА...

## балаларҙан өйрәнәйек!



**(Башы 1-се биттә).**

Быға тиклем "Шаяниум"да баш ҡаланың милли мәктәптәре - айырым, ә башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытылған белем усаҡтарынан КВН-командалары үҙ-ара ярыша ине. Шуға балаларҙың башҡорт телен белеү кимәлен, телмәрен баһалағанда рус мәктәптәренә ниндәйҙер ташлама менән ҡарала, уҡыусыларҙың тырышлығын күтәрмәләп ултырыла торғайны. Ә милли мәктәптәрҙең уҡыусылары һәр ваҡыт телмәр шымалығы менән һоҡландыра ине. Быйыл ойоштороусылар уйынсыларҙы был күрһәткес буйынса айырып тормаған. Шуға финалға сыҡҡан командаларҙан 21-се лицейҙан "Берҙәм егерме берҙәр" менән 86-сы гимназиянан "Алға" КВН-командаларының шаяртыуҙары тос булһа ла, телмәрҙәре аҡһағаны асыҡ күренде. Балалар үҙҙәре лә ошо турала белеп тора, хатта "Берҙәм егерме берҙәр" командаһы "Шаяниум" беҙҙең өсөн Башҡорт теле көнө", - тип билдәләне. Был КВН-командаһының отҡорлоғо, төрлө темаларға тапҡыр шаяртыуы ла оҡшаны: "Уҡытыусылыҡ шахтер эше һымаҡ, вроде алтын эҙләйҙәр, бер ҙә байымайҙар", - тип шаяртты улар.

Уйындың "Импровизация" тип аталған икенсе өлөшөндә жюри ағзалары биргән һорауға КВН-командалары шунда уҡ тапҡыр яуап уйлап табырға тейеш булды. Бында уҡыусыларҙың телмәр кимәле лә, отҡорлоғо, тапҡырлығы ла берҙәй һыналды. Баһалама ағзалары яңғыратҡан "Ни өсөн быйыл Башҡортостанға яҙ иртә килде?" һорауына Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһының "ХХ централ" командаһы "Рөстәм Ғиззәтуллин иртә йырлай башлаған", - тип яуаплаһа, М. Исҡужин исемендәге 136-сы лицейҙың "Һупайлы дәрүиштәре" "Өфөнөң 450 йыллығына бүләк", тип билдәләне.

Әйткәндәй, баш ҡаланың 450 йыллығына иҫтә ҡалырлыҡ бүләкте лә "эҙләне" квнсылар: Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фондынан блокноттар, мәсет, Көнсығыш сығыу юлы, 450 тапҡыр ҡул сабырға тигәнерәк яуаптар булды. Ә инде "Ни өсөн быйыл финалда республика мәктәптәре юҡ?" тигәнгә "Һупайлы дәрүиштәре"нең яуабы иң тапҡыры булды, беҙҙеңсә. Улар: "Был турала Пугачев урамында тығында ултырғандарҙан һорағыҙ", - тине.

Бына шулай бер нисә секунд эсендә яуап бирә-бирә финал уйынының өсөнсө һынауына яҡынлашты уҡыусылар. Ә унда "Музыкаль өйгә эш" әҙерләп килергә кәрәк булған. Командаларҙа йыр-моңға һәләтле уҡыусылар тупланыуын үҙ ҡолаҡтарыбыҙ менән ишеттек. Һәр сығыш үҙенсәлекле һәм ҡыҙыҡлы булды. "Етегән+1" КВН-командаһы башҡорт телен бик ныҡ яратҡан һәм шуға хатта дүшәмбе эшкә йөрөмәгән директорҙары менән маҡтанып, "Ҡыҙыл борос ныҡ әсе, Беҙҙең сығыштан һеҙгә ныҡ эҫе", - тип "эреләнде". Ә бына "Берҙәм егерме берҙәр"ҙең бер уйынсыһының күҙенә "арпа сыҡҡан", йырҙары ла шуға арналды: "Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ бергә, Төкөрәйек шул күҙгә", - тип тамашасыларҙы шау-гөр көлдөрөп алдылар. "Алға" КВН-командаһы ағзалары үҙҙәре әйтеүенсә, башҡорт телен аңлап етмәһәләр ҙә, бик ныҡ яратыуҙарын белдереп: "Мин, мин, мин башҡорт телен яратам", - тигән бер юллыҡты оҙаҡ ҡына ҡабатлап торҙолар. Хатта баһалама ағзаларын, еңеүсе итеп билдәләмәһәгеҙ, ошо йырҙы дүрт сәғәткә һуҙасаҡбыҙ, тип тә ҡурҡытып алдылар. "Һупайлы дәрүиштәре"нең музыкаль өйгә эше мәктәп, йыйылыштарҙан ата-әсәйҙәрҙе көтөп алыу, Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыу кеүек уҡыусыларға һәм уларҙың ата-әсәйҙәренә яҡын темаларға бағышланды. "Бөгөн беҙҙең сығышта яңғыраған йырҙар ата-әсәйҙәребеҙгә лә бик яҡын", - ти улар. "ХХ централ" КВН-командаһының һәр уйынсыһы йырсы икән, һәләтле балалар бөтә донъяны баҫҡан "бәлә" - ашханалағы сират тураһында ла, сатлама һыуыҡта гимназияға килмәгән балалар хаҡында ла йыр яҙған. Бына шундай һәр кемебеҙгә таныш, яҡын хәл-күренештәр тураһында балаларса бер ҡатлы, күңелдәргә үтеп инерлек сығыштарҙы ҡараныҡ быйылғы "Шаяниум"да.



"Берҙәм егерме берҙәр"



"ХХ централ"



"Һупайлы дәрүиштәре"

Ә инде еңеүселәргә килгәндә, урындар былай бүленде: III урын - "Алға" (86-сы гимназия), II урын - "Берҙәм егерме берҙәр" (21-се лицей), I урын - "ХХ централ" (20-се Башҡорт гимназияһы) менән "Етегән+1" (102-се Башҡорт гимназияһы) командаларына бирелде. Төп призды - финал уйынының Гран-приһын М. Исҡужин исемендәге 136-сы лицейҙың "Һупайлы дәрүиштәре" КВН-командаһы яуланы. Ғәҙәттәгесә, үҙ ролдәрен иң шәп уйнаған ҡыҙ һәм егет тә билдәләнде: 21-се лицейҙан 4-се класс уҡыусыһы Айлина Ҡәйүмова менән 136-сы лицейҙан 8-се класс уҡыусыһы Хәким Латипов. Айлина Ҡәйүмова "Шаяниум"да икенсе тапҡыр ҡатнаша. "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыбыҙ Ләлә Хафиз ҡыҙы Сафина менән бергә тырышып әҙерләндек. Беҙҙең командала урыҫ балалары ла сығыш яһай, улар башҡорт телен бик яҡшы белмәй, әммә тырышып өйрәнә. "Шаяниум" конкурсы беҙҙең өсөн нәҡ шул яҡтан файҙалы ла - телде яҡшыраҡ белергә, дуҫтар табырға ярҙам итә. Бында атай-әсәйҙәребеҙ, синыфташтарыбыҙ, уҡытыусылар беҙҙең сығыштарҙы ҡарарға килә һәм күтәрмәләп ултыра, ә был берләштерә. Былтыр беҙҙең "Берҙәм егерме берҙәр" командаһы "Шаяниум"да өсөнсө урын алғайны, быйыл - икенсе, киләһе йыл беренсе урын аласаҡбыҙ!" - ти Айлина.

"Шаяниум-2024" бәйгеһенең төп еңеүсеһе - "Һупайлы дәрүиштәре" командаһы уйынсылары Хәким Латипов, Аида Чембарисова, Денис Ғалин бер тауыштан быйылғы уйындарҙың шәп булыуын билдәләне. Уҡыусылар еңеүҙән шатлыҡтарын йәшермәне: "Йылдан-йыл шаяртыуҙарыбыҙ яҡшыра бара, быны ике йыл рәттән өсөнсө урын алып, был юлы Гран-прига үҫеп етеүебеҙ ҙә раҫлай. Бик тырышып әҙерләндек шул: көн һайын көләмәстәр уйланыҡ, сценарийҙар яҙҙыҡ, телмәребеҙҙе шымарттыҡ. Бында ҡатнашыу өлгәшебеҙгә һис йоғонто яһамай, ә, киреһенсә, күмәк кеше алдында сығыш яһарға өйрәнәбеҙ, ҡыйыуыраҡ булабыҙ", - тип һөйләне балалар.

Ҡатнашыусыларҙы Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева, баш ҡаланың Мәғариф идаралығы начальнигы Азат Батыршин тәбрикләне, шулай уҡ баһалама ағзалары -Башҡортостандың халыҡ артисы Рәсүл Ҡарабулатов, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Айгиз Баймөхәмәтов, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры Гөлназ Йосопова, БР Мәғариф министрлығының Милли мәғариф идаралығы начальнигы Илдус Ҡаһарманов, БР Туриндустрия һәм ҡунаҡсыллыҡ ойошмалары берлеге рәйесе Илдар Бикҡужин, "Йәйғор" лагеры директоры Радмир Буранғолов, Башҡортостан Юлдаш телевидениеһы алып барыусыһы Фаягөл Дәүләтйәрова ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе һәм иҫтәлекле бүләктәрен тапшырҙы. "Йылдан-йыл "Шаяниум" популярлаша бара, ҡатнашыусылар һаны ла арта. Бында белем усаҡтарыбыҙ педагогтарының хеҙмәтен дә тейешле баһаларға кәрәк, улар һәр ваҡыт уҡыусыларына ышаныс белдереп, күтәрмәләп тора. Киләсәктә лә уҡыусылар, уҡытыусылар был конкурста ҡатнашыуын дауам итер, тәжрибә һәм оҫталыҡ туплар, тип ышанам. Күтәренке кәйеф бүләк итеүегеҙ өсөн рәхмәт!" - тине Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева сара һуңында барлыҡ ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт итеп.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры Гөлназ Йосопова быйыл үҙ сығышында: "Һеҙҙең менән бергә мин дә башҡортса һөйләшеү оҫталығымды арттырам", - тип билдәләне, һәм "Шаяниум" ҡала конкурсының әһәмиәтен юғары баһаланы. Уның хаҡ һүҙҙәренә эйәреп, балаларҙан юғары телмәр оҫталығы талап итерҙән алда, өлкәндәргә лә бындай сараларҙа башҡортса сығыш яһауҙы үҙҙәренә мотлаҡ талап итеп ҡуйыу кәрәктер, тигән фекер тыуҙы быйылғы конкурстан һуң. Юғиһә, сәләмләгәндә бер һөйләмде башҡортса әйтеп, рус теленә күсеп телмәр тотоу ғәҙәткә инеп бара кеүек. Матур маҡсатта булдырылған һәм ике тиҫтәнән ашыу йыл бойомға ашырылған эштең тамырына шулай уйламайынса балта менән сапмаһаҡ ине.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

✓ *Инәйем элек тә шундай ҡарт инеме? Яулыҡ эсенән килеп сыҡҡан сәстәре - ап-аҡ. Бына иғтибар итмәгәнмен. Әгәр хәлемдән килһә, ҡолағына ғына, инәй, илама, тип бышылдар инем.*






Һалҡын соҡорҙа ятырмын тип уйлаһам, юҡ икән, еңел генә итеп күтәрәләр ҙә, әллә ҡайҙа алып менәләр, кәүҙәң генә аҫта ҡала. "Ошо ағарып ҡатҡан йөҙ, тырпайышҡан, күрһәткес бармағы ырғаҡ кеүек кәкерәйгән ҡулдар минеке инеме ни?" тип аптырап ҡарап тораһың. Күңелде йылытырлыҡ бер нәмә лә юҡ, әлбиттә, тик нимә бар, шуға риза булырға тура килә, сөнки бер нәмә лә үҙгәртә алмайһың.

Ҡартинәйем әйтә ине лә, имеш тә, кешенең йәне ҡырҡ көн кешеләр араһында ҡаңғырып йөрөй. Алдашмаған икән: йөрөйһөң, тик әллә ни ҡаңғырам тип әйтмәҫ инем, кәүҙәм ҡайҙа, мин дә шунда, уға еп менән бәйләнеп ҡуйылған ҡыуыҡ шикеллемен. Шуныһы насар, йәнле сағындағы кеүек дөпөлдәтә баҫып йөрөмәйһең, бер ауырлығың да юҡ, ә бары осаһың ғына. Ҡартинәйем ҡайһы саҡта юҡты ла һөйләй торған, бәлки, ҡырҡ көн түгел, оҙағыраҡ та йөрөйҙәрҙер, ә, бәлки, киреһенсә, тереләр донъяһында артыҡ икәндәрен тойоп, бында уларҙы бер нәмә лә тотоп тормаһа, шунда уҡ үҙ юлдары менән күккә үрләйҙәрҙер...

Минең хаҡта ла ул, атайыңа оҡшағанһың, оҙон ғүмерле булырһың, тигәйне, бына, булдым. Ауырлығымды көтмәгәндә юғалттым. Яҡында шартлау булһа, һауа ацетон кеүек яман еҫ менән тула, тын алып та булмай. Хатта күңел болғана башлай. Әле нимә булғанын аңламай ҙа тораһың. Ни эшләргә икәне лә тиҙ генә башыңа барып етмәй. Тик оҙаҡҡа юғалып ҡалырға ярамай. Һин бер яҡҡа ҡарап көтөп торһаң, икенсе яҡтан килтереп бәреүҙәре мөмкин. Шулай булды ла. Командир "Птичка!" тип ҡысҡырып ҡына өлгөрҙө: яңғыраны. Шаңҡып, артыма йығылдым, тәнемде йырғыслап яндырып әллә нәмә йөрөгән кеүек булды. Аҙаҡ донъя һүнде. Ҡараңғы тәрән ҡойо эсендә бер нөктә генә булып яҡтылыҡ күренде, шунда ынтылдым, ул ҙурайғандан ҙурайҙы, һәм бына яҡтыға килеп сыҡтым. Ҡайҙандыр өҫтән атайымдың мине исемем менән атап саҡырған тауышы ишетелде. Шул ғына.

Артиллерия, унда бит бары артиллерия. Уны ҡан ҡойош аллаһы тип әйтәләрме әле? Ҡайҙалыр шулай тип уҡығайным. Ғөмүмән, күберәк уҡырға кәрәк булған. Үкенесле уныһы. Уныһы ғына түгел, үкенесле нәмәләр байтаҡ йыйылып китә әле ул.

Тепловизор һатып алып, разведкаға йөрөргә өйрәнермен тип йөрөгәндә, шундай хәлдәр. Мин бит бөтә яҡҡа ла өлгөрөрмөн, алда әле саҡ башланған тормош тип уйлай инем. Әммә минең өсөн ул хәҙер тереләр араһында аҙашып йөрөгән ҡырҡ көн генә.

Йәненән айырылғас, кәүҙәң бөтөнләй кәрәкһеҙ нәмә булып ята. Шунда уҡ ул ҡәҙерһеҙгә лә әйләнә, был яҡты донъяла кәрәкмәгән, тереләргә ҡамасау килтергән артыҡ йөк кеүек. Йөктөң дә иң ауыры.

Әгәр һине белеп, борсолоп йөрөгән кешең булмаһа, бигерәк тә ситендер. Сит кешеләргә һинең ул йәнһеҙ ҡалған кәүҙәң сүп кенә. Шуныһы яҡшы, минең дуҫтарым бар. Беҙ ары-бире хәл булһа, бер-беребеҙҙе ташлап ҡуймаҫҡа, донъя тынып торған арала тыуған яҡтарға ҡайтарыу хәстәрен күрергә тип бер-беребеҙгә һүҙ бирешкәйнек.

Беҙ - ул Вадим, Дамир, мин. Ошо хәлдәрҙән алда ғына миңә ял бирҙеләр, ә малайҙарға - юҡ.

Ҡартатайымдың ауылында егеттәр, йәштәре байтаҡ булһа ла, бер-береһенә "малайҙар", тиҙәр. Бындағы малайҙар ҙа мине ялға оҙатҡанда, Илдар, һин кире кил инде, тип тылҡыны. Бигерәк тә Дамир ҡат-ҡат ҡосаҡлап: "Кара уны, малай, көтәбеҙ, килмәһәң, мәңге үпкәләйем", - тип тороп ҡалды. Мин уны: "Һин нимә, күрә алғаныс күрҙек, шул тиклемде бергә кисереп, мин һеҙҙе нисек ташлайым!"- тип тынысландырҙым. Ул тулҡынланһа, йә төшөрөп тә алһа, күҙҙәре ҡылый ҡарай башлай, бәлки, шуға ул йәлкерәктер. Дамирҙың инәһе ул бәләкәй саҡта уҡ сирләп, мандый алмай, ул атаһы һәм үгәй инәһе тәрбиәһендә үҫә, бәлки, шуға ла ул бигерәк тә минең ярҙамға мохтаж кеүек тойолғандыр.

Дамирҙың эсендәге тышында булһа, Вадимдың нимә уйлағанын белмәҫһең. Ул икебеҙҙе лә ҡурсалап йөрөй торған малай, бер нәмәгә бирешмәй, бер нәмәгә иҫе китмәй, аптырап ҡалмай, уның өсөн нисек булһа ла - "ничево". Ниндәй ҡот осҡос хәлдәр килеп сыға, ә ул бер нәмә лә булмаған кеүек йөрөп ята, шундай ғәҙәт инде кешелә. Һин йөрәгеңде ус төбөндә тотоп, атака көтөп ултырғанда ла уның йөҙө тыптыныс, кәрт һуғып ултыра, тиереһең. Берәйһенең шизаһы килеп сыкһа, "Ну-ка тыныслан!" тип, бәргесләп тә ҡуйыуы мөмкин. Бер "һалып" алғас (ә һалмаған сағыбыҙ бик һирәк), "Кайҙан килгән һинә шундай холоҡ?" тип һөйләшеп киткәндә, "Картатайым чекист булған", тип әйтеп һалмаһынмы. Ә уларҙы тойғоларға бирелмәҫкә махсус өйрәтәләр икән. Минең ҡартатайым совхозда управляющий ғына булып эшләгәс, ундай ғәҙәт эләкмәгән, һәр кемдең ҡаны туҡһан процент нәҫелдән килә ти бит. Ярай, ҡартаталары чекист булған шундай шәп дуҫ малайҙарым бар.

Уйлап ҡараһаң, миңә унай тура килде, ҡайғыртыр кешеләрем булды, ә малайҙар менән бер-бер хәл булһа, улар хаҡында миңә ҡайғыртып йөрөргә тура килер ине - быныһы күпкә ауырыраҡ тойола...

Ауылда саҡта ла дуҫтар бар ине, тик бергә һынауҙар үтмәгән дуҫлыҡ ышаныслы түгел, бында тыуған дуҫлыҡ менән сағыштырып та булмай. Яңғыҙ булһаң- яман. Ундайҙар ҙа бар, ана, берәү аяғын тундырҙы, артығын ебәргән дә, ергә ятып йоҡлаған. Аяғы ҡарайып торһа ла, ҡайҙа барһын, аҡһаҡлап йөрөй хәҙер. Ә урамдаҡыш, дуҫы булһа, ҡайғыртыр, эҙләп табып йылыға индерер ине. Борсолоп ҡарап йөрөгән кешең булмаһа, шулай. Ә беҙ бына эргәлә кемебеҙҙер булмаһа, ул ҡайҙа, ни хәлдә, тип ҡаңғыра башлайбыҙ.

Бына минең дә кәүҙәм күтәргеһеҙ булып ҡалғас, малайҙар икәүләшеп уны әллә күпме ер алып килде. Улар булмаһа, ятыр инем шунда. Бәлки, командирым борсолор, тик малайҙар шикелле үҙе һөйрәмәҫ ине, беҙгә бит ул саҡ сигенергә тура килде, минең ҡайғымы?

Былай беҙҙең хәлдәр ул тиклем яман түгел ине, беҙ күпмелер ваҡыт алғы һыҙыҡта торабыҙ ҙа, шунан ялға алып сығалар, ә иректән мәхрүм ителгәндәрҙе алып сығыу юҡ.

Минең саҡырыу атамаһы "Сталин". Был исем менән миңә бер нәмә лә булмаҫ кеүек ине, юҡ, хатта Сталин да ярҙам итә алманы. Шулай ҙа яңы хәлемә йәлашырға тырышам.

Кәүҙәм ауырайып, үҙем еңел генә булып елдәй елдереп йөрөй башлағас, күрҙем инде, ышаныслы булғанмы малайҙар, юҡмы? Ышаныслы, әлбиттә, улар мине сиратһыҙ ғына үткәреп, теге яҡҡа оҙатты. Беҙҙә йөк машинаһына тейәп, бер ҡалаға ебәрҙеләр, унда борт көтөп, бер подвалда күпмелер яттыҡ, аҙаҡ машина самолеттың ҡорһағына ғына инеп ултырҙы ла, беҙ осток. Шулай нисә көн уҙғандыр, минең хәлдә иҫәп-хисап алып барыуы ауыр. Аңҡы-тиңке булып йөрәгән саҡ та була...

Шулай ауылға алып ҡайттылар. Минең өсөн ҡайғырған кешеләр араһында иң ныҡ көйгәне ҡартатайым булғандыр. "Эх, тыңламаның, улым, һүҙемде",- тине ул минең кәүҙәм янына килгәс. Ә ялдан һуң китергә йыйынғанда: "Улым, өс йылың тулды, милицияға ғына эшкә ин дә ҡуй. Башҡа йөрөмә", - тигәйне. "Юҡ, ҡартатай, - тинем, - мин унда малайҙарға, киләм, тип һүҙ биреп киттем, ә һүҙендә торорға кәрәк..."

Быныһы бер сәбәп булһа, уның икенсеһе лә бар. Мин бит Ҡаҙағстанда, Кустанай өлкәһендә тыуғанмын, инәйем дә ҡаҙаҡ ҡыҙы, исеме лә был яҡтарҙағы исемдәргә оҡшамаған: Алтыншаш. Ҡартатайым тыуған яҡтарына ҡайтырға булғас, атайым менән инәйемде лә ҡалдырмаған. Инәйемдең сит ергә китәһе килмәһә лә, атайымдан тороп ҡалмаған. Ҡайтҡас, ҡартатай беҙгә лә бик шәптән уҡ булмаһа ла, өй һалып биргән.

Атайым-тракторсы, ауылда эш булмағас, Себергә йөрөп эшләне. Ҡайтһа, ял итә. Билдәле инде нисек ял итеүе. Шуға, тәүҙә ҡайтҡанын көтөп алам, аҙаҡ-киткәнен. Өй ҙә бәләкәй генә, дүрт кешелек урын юҡ.

Шуға, хеҙмәттә тороп ҡалып, тәүге тапҡыр ялға ҡайтҡас, булған аҡсаға ҡушып ипотека алып, район үҙәгендә уларға өй һатып алдым. Атайым ул саҡта иҫән ине әле, тик ул ашҡаҙаны менән интегеп, яман сирҙән тап йыл ярым элек китеп барҙы.

Хәҙер ул аҡсаны кем эшләп түләһен? Энем бәләкәй, инәйемдең бер төрлө лә һөнәре юҡ.Ҡартатайыма еңел, эшкә полицияға ин, тип әйтеүе, ул эш хаҡы менән шул тиклем бурысты ҡасан ғына ҡаплайһың? Шуға, ҡайһы яҡтан ҡараһаң да, китергә тура килде.

Исмаһам, энем менән инәйем һыуы, газы булған өйҙә кешесә йәшәр. Улайһа, ауыл өйөндә һыу ташырға, мейес яғырға, утын әҙерләргә кәрәк ине. Иҫке өй йылы тотмай, таң атыуға өшөп ята инек. Ә яңы өйҙә иркен, энемдең мин бала саҡта хыялланған айырым бүлмәһе бар. Уға хатта көнләшеп тә ҡуям. Ә миңә иҫке өйҙә бөтәһен күреп, бөтәһен ишетеп йәшәргә тура килде бит.

Тик шундай ҙа шәп өйҙә ҡатыным йәшәргә ҡалманы, мин хеҙмәткә китеү менән инәйем менән һүҙгә килешкән дә, үҙҙәренә ҡайтҡан да киткән. Шуға, ялға ҡайтҡанда мин ике арала йөрөнөм: ҡатынымды ла һағынып ҡайттым, инәйем дә йәл.

...Бына бөгөн уларҙың барыһын да күрәм. Мин белем алған мәктәп алдындағы майҙанда халыҡ йыйылған. Йәнемдән айырылған тәнем ҡыҙыл туҡыма менән көпләнгән табут эсендә ята. Ул һыу һеңдермәй торған ҡыпҡыҙыл япма менән ҡапланған ике тумба өҫтөнә ҡуйылған, портретым торған өҫтәл ныҡлы тимерҙән, матур һырҙар менән биҙәлгән, ул ҡара буяуға, ә биҙәктәре алтын төҫөнә манылған. Оҙаҡҡа сыҙарлыҡ итеп эшләгәндәр.

Әҙерләнгәндәр. Көткәндәр. Ергә ҡыҙыл балаҫ йәйгәндәр, ул табут аҫтында ла, эскәмйәлә ултырған кешеләрҙең аяҡ аҫтында ла бар. Хатта ғорурланып та киттем, мине оҙатырға шул тиклем кеше йыйылған.

Алда эскәмйәләр теҙелгән, береһендә ҡартатайым ултыра, уның эргәһендә урын буш, ҡартинәйем килмәгән, йә йығылып китеп кеше көлдөрөрмен тигәндер, ул бик ҡартайған инде, гел башы әйләнә. Ҡартатайым эргәһендә Фирүзәнең ата-инәһе ултыра. Инәһе көйәнтә кеүек бөгөлгән дә илай. Фирүзә үҙе улар эргәһендә түгел, һеңлеһе менән артта баҫып тора, ҡыҙыбыҙ илап ебәрһә, ситкәрәк китермен, тип уйлайҙыр.Тауышы көр шул минең ҡыҙымдың.

Инәйемдең аҡ яулығы әллә ҡайҙан күҙгә ташлана, ул ҡара күлдәк, ҡара ойоҡ кейгән, ҡайышы беләгенә эленгән сумкаһы һалынып төшкән, атлаған һыңғайға аяғына бәрелә. Тик ул бер нәмә лә һиҙмәй, күрмәй, ишетмәй. Ул илай, ҙур күлъяулыҡ менән күҙен һөртә лә, шунан ауыҙын ҡаплай. Ул күтәргеһеҙ ауыр йөк аҫтында ҡалған кеүек. Инәйем ҡайһы саҡта балаларса ғына уйлап ҡуя торған, әле лә, ваҡыт үтеү менән был йөк кәмер, миңә ул тиклем ауыр булмаҫ, тиҙер.

"Юҡ, инәй, был йөктө һин ғүмерең буйы йөкмәп барырһың инде, улай ғына ла түгел, ул торабара һине ауырһыраҡ баҫыр, шәфҡәтһеҙ баҫыр". Әммә был уйҙар уның башына ла килмәйҙер. Ә мин, күккә юл тотҡан меҫкен йән эйәһе, быларҙы бик яҡшы аңлайым, һәм өйөнә ҡайғы килгән һәр кемде йәлләйем...

Инәйем элек тә шундай ҡарт инеме? Яулыҡ эсенән килеп сыҡҡан сәстәре - ап-аҡ. Бына иғтибар итмәгәнмен. Әгәр хәлемдән килһә, ҡолағына ғына, инәй, илама, тип бышылдар инем. Мин һинең янында ғына, тип әйткем килә, тик был да мөмкин түгел. Ул минең ҡайҙа икәнде белде, шуға былай уҡ тиҙ әйләнеп ҡайтыр һәм шул хәлдә ҡайтыр тип уйламағандыр.

Ялдан һуң кире киткәндә юлда ла һыңғай ғына килеп торманы, поезға билеттар юҡ ине, өйҙән аҡса һорап, самолетҡа билет алдым. Шул саҡта уҡ инәйем менән һөйләшкәндә ул нимәләр һиҙенгән кеүек: "Бер ҙә юҡҡа ғына киттең, балам, мин магазинға иҙән йыуырға урынлаштым, икәүләшеп эшләһәк, был бурыстарҙы берәй нисек йырып сығыр инек әле", - тигәйне.

Ә ҡыҙымды әле Фирүзә үҙе, әле инәһе күтәреп ала. Бына ул үҫеп киткән кеүек тойола. Тойола ғыналыр, айырылышҡандан һуң әллә ни күп ваҡыт та үтмәне бит. Юҡ, барыбер үҫеп киткән, йәш ярым бит инде уға. Ана, ҡулынындағы кеөндилен нисек итеп тотоп алған, ул һәр ваҡыт шулай

✓ *Зәңгәр дуға, зеңгер дуға һүҙҙәре төрлө мәғәнәле. Зең - яңғырап сыҡҡан нәҙек тауыш. Йырҙа дөрөҫө - Зыңғыр дуға. Зыңғыр - ҡыңғырау, унан яңғырап сыҡҡан тауыш. Ҡыңғыраулы дуға.*



нимәләр мөйшәп йөрөй. Фирүзә, теше сыға, шуға теш ите ҡысыта, ти. Элекке сағым булһа, ҡыҙымды елтерәтеп күтәреп алыр, күккә сөйөр, ә ул сәрелдәп ебәрер, миңә сытырман йәбешер ине. Юҡ, элекке сағым түгел, бары ел булып уралап ҡына йөрөй алам, нисек теләһәм дә, хатта башынан да һыйпай алмайым. Бик үкенес.

Фирүзәм дә башына яулыҡ ябынған, тик уның яулығының төҫө ҡара, ә уның өҫтөнә ниндәйҙер ҡыҙыл-мыҙыл биҙәктәр төшөрөлгән. Ул миңә үпкәләгәндер инде, китмә тип, ул да ялынғайны. Мин бер мәртәбә генә барып, бурысымды үтәйем дә, башҡа бармайым, тип ышандырған булғайным...

Сибәр минең ҡатыным. Сөмҡара сәстәре яулығы аҫтынан сығып, арҡаһына төшөп тора. Мин шул сәстәр араһына йөҙөм менән инеп китеп, еҫенә иҫереп ятырға ярата инем. Ябығып та киткән кеүек, күҙҙәре лә шешенгән, йөҙөн дә ҡыҙыл таптар ҡаплаған. Илағандан инде. Күҙ йәштәре әле лә килеп сығып, битен сылата, ул әленән-әле ҡулы менән битен һыпырып ҡуя.

Илай алһам, мин дә үкереп илар инем.Тик йән илай алмай икән. Ә кәүҙәмдәге күҙҙәремде Вадим мине эҙләп тапҡас уҡ йомдороп ҡуйғайны...

Һул яҡта йәшел төҫтәге формала тылдыҡылар теҙелешеп тора, минең йәштәрҙә, билдәләренә ҡарағанда интендант ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүселәр. Костюм-галстук кейгән ағайҙар бер-бер артлы һөйләп, портретым аҫтына роза, ә ауылдыҡылар ҡәнәфер сәскәләре һалды.

Үлгәндән һуң орден менән наградланыуымды әйтеп, уны Фирүзәгә тапшырҙылар.Ҡыҙым шунда уҡ уны тартмаһынан алып, ҡулына эләктерҙе, шалтырамай ҙа, ашап та булмай, был ниндәй уйынсыҡ, тип уйлағандыр.

Мылтыҡтан атып, салют бирҙеләр, көтмәгәндә музыка уйнап ебәрҙе. Бына ҡуҙғалдылар. Алда бер һалдат портретымды, башҡалар табутты күтәреп алып китте. Фотола мин берет кейеп төшкәнмен, күптәнге фото, шуға бигерәк йәш күренәм, һуңғы ваҡытта фотоға төшкәнем булманы, хәҙер булмаҫ та инде.

Ҡәберлектә тынлыҡ, оркестр ҙа урында ҡалды, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа эскә инмәне, минең кәүҙәм атайым менән йәнәш ятасаҡ икән. Аҫта ла, өҫтә лә беҙ бергә буласаҡбыҙ. Ул да шулай яҡты донъянан китеп барғас, беҙҙең тирәлә осоп йөрөнөмө икән? Әммә беҙ генә бер нәмә лә һиҙмәнек, тимәк, минең барлыҡты ла бер кем дә һиҙмәй, хатта инәйем дә.

Хәҙер кәүҙәм ер ҡатламы аҫтында ҡалғас, беҙҙе бәйләп торосу еп өҙөләр инде, ә мин кем артынан китәйем икән?

Һин юҡ, улар бар, тереләргә йәбешеп ятып булмай инде, мин бында йөрөмәһәм, бәлки, улар оҙон-оҙаҡ ғүмер юлы үтер. Тереләр донъяһында һин артыҡһың.

Шуны беләм, мин инде башҡа бында килмәм, тереләргә хәтерләүҙәр генә ҡалдырып китеп барырмын, сөнки унда мине атайым көтә бит. Беҙ икәүләшеп ерҙә ҡалғандарҙы йыраҡтан ғына күҙәтербеҙ...

*ФЕКЕР ҠОРО*

# ЙЫРЫБЫҘ МИРАҪЫНА...

## еңел-елпе ҡарамайыҡ әле!

**Халҡыбыҙ йырҙарын бала саҡтан уҡ йотлоғоп тыңлайым. Атайым башҡарғандарын да тыңлап үҫтем. Һүҙҙәре - мәғәнәле, көйҙәре - моңло, күңелгә ятышлы. Шуны ла төшөндөм - киң таралған, быуаттар, йылдар ауазын, ҡиммәтен, аманатын беҙгә еткергән халыҡ ижадын үҙеңсә бororға, үҙгәртергә лә ярамай. Был тарихи ерлекте, ысынбарлыҡты, хәл-күренештәрҙе боҙоуға, яңылыш мәғлүмәт биреүгә килтерә. Ҡыҙғанысҡа күрә, бәғзеләр аңлай ҙа, аңламай ҙа үҙгәртә һәм был тора-бара ҡәҙимге хәлгә әйләнеп китә. Мәҫәлән...**

### Ҡаҙҙар китәме, әллә ҡыҙҙармы?

Һоҡланғыс моңло тауышлы йырсыбыҙ башҡарыуында "Юлдаш", "Ашҡаҙар" радиоларынан халыҡта ғәйәт киң таралған "Шахта" йыры ошолай яңғырай:

*Китә ҡаҙҙар, китә ҡаҙҙар,*
*Китә ҡаҙҙар Донбасҡа.*
*Мин дә уйлап торам әле*
*Шул ҡаҙҙарҙан ҡалмаҫҡа.*

Башҡорт иленән ҡаҙҙар Донбасҡа осамы икән? Байтаҡ йылдар әүәл иң тәүҙә шуны уйланым. Икенсенән, атайым: "Китә ҡыҙҙар, китә ҡыҙҙар", - тип йырлай торғайны ла баһа!.. Ҡыҙҙар, йәиһә егеттәр Донбасҡа эшкә киткән, һөйгәндәре уларҙан ҡалмаҫҡа теләгән. Гөлнур Яҡупова "Ҡатындар" трилогияһының "Бер һөйгәнем өсөн" өлөшөндә яҙыуынса: "...Әсәйем элек был көйҙө бошонҡо итеп көйләй торғайны, ә әле күтәренке кәйеф менән өҙҙөрөп һалдылар. Ә минсе, йөҙ тыңлаған һүҙҙәрҙе: "Китә ҡыҙҙар, китә ҡыҙҙар, китә ҡыҙҙар Донбасҡа", - тип эсемдән үҙгәртеп ултырам. Шахта ниңәләр атайымды түгел, ә Донбасс яҡтарындағы Мәүлиҙә исемле ҡыҙҙы хәтерләттесе?" Тарихи сығанаҡтар раҫлауынса, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Украинаның азат ителгән райондарына Башҡортостандан 152 меңдән ашыу кеше эшкә киткән. "Йырҙар" китабына (Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1984, 332-се бит) индерелгән "Шахта" (Ш. Маннур һүҙҙәре. Халыҡ көйө) йыры ла ошо фекерҙе сағылдыра:

*Китә йәнейем, китә йәнейем,*
*Китә йәнейем Донбасҡа,*
*Ул китә инде Донбасҡа,*
*Һүҙ бирҙек ташлашмаҫҡа.*
*Шахталарға һин төшөрһөң,*
*Йырлап күмер киҫерһең.*
*Әммә мине нык һағынһаң,*
*Бик һарғайһаң нишләрһең?..*
*Бик һағынһаң, бик һарғайһаң,*
*Йөрәккәйең тынмаһа,*
*Һағыныуҙарың сиктән ашһа,*
*Саҡыртырһың Донбасҡа...*

Күренекле яҙыусы, рухташым, ғәжәп моңло тауышлы, халыҡ йырҙарын яҡшы белеүсе Таңсулпан Ғарипова ла: "Китә йәнейем, китә йәнейем, китә йәнейем Донбасҡа", - тип йырлай. Шулай итеп, "Китә ҡаҙҙар..." тип йырлау ысынбарлыҡҡа тап килмәй.

### Ирәмәлкәй тауҙың аҡ башы

Шул ыңғайы тағы бер-ике йырға күҙ һалайыҡ әле. Киң билдәле "Азамат"ты ҡайһы берәүҙәр шулай йырлай:

*Алыҫтарҙан ағарып, ай, күренгән*
*Ирәндеккәй тауының аҡ ташы.*

"Башҡорт халыҡ ижады" томдарының "Йырҙар" (Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1974) китабына ла тап ошолай, хатта ки "ағарып" һүҙе төшөп ҡалып, тәүге юлда ижек иҫәбен кәметеп инеп киткән... Ирәндеккәйме икән?.. Аҡ ташымы икән?.. Аҡ таш алыҫтарҙан ағарып күренәме икән?.. Шундай урынлы һорауҙар тыуа. Баймаҡта ғына түгел, Учалыла ла Ирәндек тауы бар. Әммә Яйыҡ буйында шулай йырлайҙар:

*Алыҫтарҙан ағарып, ай, күренә*
*Ирәмәлкәй тауҙың аҡ башы.*

Нәҡ шулай! Ирәмәл - тәбиғәт ынйыларының ынйыһы! Ҙур Ирәмәлдең бейеклеге - 1582 метр, көньяҡ-көнбайыш тарафтан төньяҡ-көнсығышҡа 12 саҡрымға, көньяҡ-көнсығыштан төньяҡ-көнбайышҡа табан 8 саҡрымға һуҙылған. Башҡорт илендә Йәмәлекәй тауҙан (Ямантау) ҡала Ирәмәл иң бейек, иң йәмле һәм иң ғәжәп тау!.. Унда ҡар иртә ята, ҡышын бик ҡалын була һәм июнь аҙаҡтарынаса, июль урталарынаса ireп бөтмәй. Сыуаҡ көндәрҙә Ирәмәл Яйыҡ буйынан бик йыраҡтан, йөҙ самаһы саҡрымдан ағарып күренә һәм был халыҡ йырында ла сағыла. Шуның өсөн дә "аҡ ташы" тип түгел, ә "аҡ башы" тип йырлау дөрөҫ.

Был хаҡта мин гәзиттә лә, "Ҡан ҡәрҙәштәр төйәге" китабыма (Өфө, "Китап", 1998) ингән "Иҙел башы - Ирәмәлтау" очеркымда ла яҙып сыҡҡайным. Мәгәр тиҫтә йылдар үтһә лә йырсыларыбыҙ, йырҙар йыйынтыҡтарын төҙөүселәребеҙ фәһем дә алмай, быға иғтибар ҙа итмәй. Күрәһең, гәзит-журнал, китап уҡымайҙар.

"Ирәндеккәй" тип йырлауға килгәндә, был - халыҡ йырҙарына, ғөмүмән, йырҙарға милләттәштәребеҙҙең үҙ төйәгендәге ерһыу атамаларын ҡушыу күренеше. Арҙаҡлы шәхестәрҙе лә үҙҙәренеке һанап, ерләштереп ҡуялар. Быны әүәл билдәле фольклорсы, филология фәндәре докторы Әхмәт ағай Сөләймәнов та билдәләп үткәйне. Минеңсә, нисек кенә йәнтөйәгеңде яратһаң да, олуғ күрһәң дә, халыҡ йырҙарына, айырыуса тарихи йырҙарға үҙең теләгәнсә, үҙ белдегеңсә үҙгәреш индерергә ярамай.

### Осҡаны һирәкме?

Шаян йырҙарҙан һаналған, туйҙарҙа, һәр мәжлестә тиерлек йырланған "Күбәләгем"-дең бер куплетында күптәр иғтибар бирмәгән ҡаршылыҡ, мәғәнәһеҙлек бар:

*Күбәләктәр бик күп була,*
*Ләкин осҡаны һирәк.*
*Үҙеңә тиң күбәләкте,*
*Күбәләгем, түңәрәгем,*
*Аҫыл ҡошом, һандуғасым,*
*Һайлай белергә кәрәк.*

Был куплет, ҡыуанысҡа, 1984 йылда нәшер ителгән "Йырҙар" китабына инмәгән. Әммә уны һәр саҡ йырлайҙар. Һәммәбеҙгә билдәле, күбәләк - төрлө төҫтәге ҡуш ҡанатлы, елпелдәп, боролоштар яһап осҡан йән эйәһе. Осоу уға туйыныу, башҡа бөжәктәрҙән ҡотолоу өсөн дә мөһим. Белгестәр әйтеүенсә, күбәләктәр илле саҡрым тиҙлек менән меңәр саҡрым ара үтә ала. Кемдер үрҙәге "Күбәләктәр бик күп була, ләкин осҡаны һирәк"те - образлылыҡ сараһы тиер. Эйе, йырҙа образлылыҡ ярылып ята. Әммә баштағы ике юлда, сағыштырыуҙарҙан алда, ысын, тәбиғи күбәләк тураһында һүҙ бара - "Күбәләк гөлдәргә ҡунһа, гөлдәр тирбәлә микән?.. Күбәләккәй гөлгә ҡунған, гөлдә булғас ояһы". Ә "Осҡаны һирәк" - төп тексҡа үҙ һүҙҙәрен өҫтәүсенең төплө уйламайынса, үҙ белдегенсә хаталаныуы, яңылыш, ялған мәғлүмәт биреүе кеүек ҡабул ителә.

### Зыңғыр дуға була

"Сибай" йырының авторы Сибай кантон, йәғни Шаһиәхмәт Утарбай улы Сибаев, тиҙәр. Ул Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылында алтынсы Башҡорт казак ғәскәре башлығы, сәсән, импровизатор. Ғалимдар фекеренсә, "Сибай" йырын XIX быуаттың икенсе яртыһында юғары вазифаны биләгән хәрби кеше ижад иткән. Был йыр шулай уҡ башҡорт халыҡ ижады китаптарына төрлө вариант һәм төрлөсә һүҙҙәр менән инеп киткән:

*Йәшел генә сана, **зәңгәр** дуға*
*Ектерһәнә, Фатимам, тураtҡа.*
***Атайсалға** ҡайтып кантон булһам,*
*Ирешер инем, Фатимам, моратҡа.*

Йәки:

*Йәшел генә сана, **зеңгер** дуға*
*Еткерһәнә,Фатимам, турыатҡа.*
*Эй-й… Атайсалға ҡайтып торор ҙа булһам,*
*Ирешәр инем дә, Фатимам, моратҡа.*

Әүәл йәшел сана түгел, ә йәшәнкә сана, тип йырланған, тиҙәр. Йәшәнкә терһәк тигәнде аңлата. Зәңгәр дуға, зеңгер дуға һүҙҙәре төрлө мәғәнәле. Зең - яңғырап сыҡҡан нәҙек тауыш. Йырҙа дөрөҫө - Зыңғыр дуға. Зыңғыр - ҡыңғырау, унан яңғырап сыҡҡан тауыш. Ҡыңғыраулы дуға. Йырҙың дөрөҫө:

*Йәшәнкә лә сана, зыңғыр дуға,*
*Ектерһәнә, Фатимам, тураtҡа.*
*Эй...Үҙ илемә ҡайтып торор ҙа булһам,*
*Ирешер инем, Фатимам, моратҡа.*

### Атайсалмы, әллә тыуған илме?

Бөрйәндең "Күҫәкбей" иртәгендә сағылыуынса, Күҫәкбей Ҡарағөләмбәтте туҡмап, һөйрәтеп, Ҡайраҡлы йылғаһы буйлап алып ҡайта. Байтаҡ барғас, бер яланға сығалар. Шул ерҙә Ҡарағөләмбәт түҙмәй, Күҫәкбейгә инәлә:

"Атай", сал мине ошонда! Ыҙалатып йөрөтмә мине ҡарт көнөмдә, түҙер хәлем ҡалманы!" - ти ул Күҫәкбейҙе "атай" тип ололап. Шунан был ергә Бөрйәндә Атай сал, атайсал, тип атама биргәндәр...

Күрәһегеҙ, бына ҡайҙан килә атайсал һүҙенең килеп сығышы! Беҙҙең заманда бер шағир һүҙ асылын, мәғәнәһен һанға һуҡмай, Атай салыуға тыуған ил, тыуған ер, бәләкәй ватан, йәнтөйәк мәғәнәһен һалды. Шунан китте таралып атайсал. Имеш, тыуған ерем - атайсалым! Бына шулай, үҙ илемә урынына атайсалға һүҙе ҡулланыла башланы.

"Сибай кантон" йырының йәнә бер вариантында нәҡ тыуған илемә тип йырлана ла инде:

*Яу башлығы булып, ай, мин киттем*
*Тамъян менән Ҡатай иленә.*
*Аҡ ҡорбандар салып, нәҙер әйттем,*
*Ҡайтһам ине тыуған илемә.*

*Алыҫтан да ҡарай, ай, күренгән*
*Иҙел башы Ирәмәл тау икән.*
*Әйтегеҙсе сәләм Фатимаға,*
*Беҙҙең илдәр иҫән-һау микән?*

*Ебәк кенә баулы көмөш ҡылыс*
*Талдырҙы ла нәҙекәй билемдә.*
*Ҡалһа ҡалһын, Ҡатай, ай, илегеҙ,*
*Күргем килә тыуған илемдә.*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тарихи йырҙар, ер-һыу, тыуған төйәк тураһында йырҙар - ҙур мәғлүмәти сығанаҡ, гәүһәрҙәрҙән аҫылыраҡ ынйы, хазина. Арҙаҡлы ғалимыбыҙ Салауат Галин яҙғанса: "Йырҙарҙа беҙ тарихта булып үткән иң мөһим, иң күренекле ваҡиғаларҙың поэтик йылъяҙмаһын, халыҡ тормошоноң, йолаларының төрлө яҡлап сағылышын, уның эстетик һәм философик ҡараштарының кәүҙәләнештәрен күрәбеҙ". Шуға ла йыр мираҫына һис кенә лә еңел-елпе ҡарарға, уның асылын боҙорға ярамай, уға иғтибар ҙа, ихтирам да үтә мөһим. Бай йөкмәткеле, мәғәнәле йыр сығарыу, йыр йырлау - тәрән аҡыл, ҙур һәләт емеше. Ул мәғлүмәтле лә, имле лә, фәһемле лә килеш йәшәргә, халҡыбыҙға, йәштәребеҙгә, балаларыбыҙға тапшырылырға тейеш.**

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

✓ *Башҡорт ҡатын-ҡыҙы өсөн иң ҡәҙерле бүләк - ул яулыҡ йәки сәскәле шәл. Ә француз яуынан яугир башҡорт ошондай бүләк алып ҡайтһын әле!*



ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛДЫ КҮПМЕ АШАРҒА?

■ Академик Ройтберг клиникаһы табибы, эндокринолог Наталия Тананакина белдереүенсә, өлкән кеше өсөн балдың нормаһы көнөнә 1-2 ҡалаҡтан артмаҫҡа тейеш. Шулай уҡ балдың сифаты ла мөһим. Шәкәр йәки башҡа өҫтәмәләр ҡушылмаған балды ышаныслы умартасыларҙан ғына һатып алырға кәңәш ителә. Балдың һәм составында бал булған продукттарҙың аллергияға килтереү ихтималын да онотмаҫҡа кәрәк, ти табип. Был татлы ризыҡтың файҙаһы тураһында күп һөйләргә була. Унда организмға ыңғай тәьҫир итеүсе витаминдар һәм минералдар күп. Гастроэнтеролог Парандзем Берегамян да тәмтом ашағыҡ килһә, балға, емеш-еләктәргә, урбечҡа, ҡара шоколадҡа, кипкән емештәргә, зефир һәи ҡаҡҡа өҫтөнлөк бирергә кәрәк тигән фекерҙә. Көндәлек калорияның 10 процентын ғына шәкәр алып торорға тейеш, тип билдәләй табип.

■ Магазин кәштәләрендә еләк күренә лә башланы. Агроном Владимир Викулов әйтеүенсә, еләк һатып алғанда яҡшылап ҡарарға кәрәк, еләктәрҙә тап, йәмшәйгән урындар юҡмы? Шулай уҡ уның "койроғо" йәшел булыуы мөһим. "Һабағы йәшел икән, тимәк, ул яңыраҡ ҡына өҙөлгән. Әгәр ҙә "койроҡ" ҡарая башлаһа, еләк оҙаҡ һаҡланған, шуға ла уның файҙаһы тураһында һөйләү ҙә ауыр. Һатып алынған еләкте мотлаҡ йыуырға кәрәк. 1 литр һыуға 1-2 балғалаҡ сода өҫтәргә лә мөмкин. Шунан еләкте яңынан таҙа һыу менән сайығыҙ", - тип кәңәш итә белгес. Агроном шулай уҡ еләкте урамдан алмаҫҡа тигән ҡарашта, уның нисек һәм ниндәй шарттарҙа үҫтергәндәрен белмәйһегеҙ бит. Шуға ла магазиндарҙан һатып алыу иң ҡулайы, унда барлыҡ мәғлүмәт тә яҙылырға тейеш.

■ "Мамма" клиникаһының баш табибы, онколог, онкохирург, химиотерапевт Антон Иванов әйтеүенсә, брокколи, помидор ашау, шулай уҡ ҡәһүә эсеү яман шеш сирҙәрен булдырмаҫҡа мөмкинлек бирә. "Газета. ру" баҫмаһына биргән интервьюһында ул тап шулай тип белдерҙе. "Брокколи, шулай уҡ төҫлө кәбеҫтәлә антиоксиданттар күп, улар күкрәк яман шешенә ҡаршы тора, ә ҡәһүә тире яман шешен иҫкәртә. Уларҙан тыш, помидор менән көртмәлелә ликопин бар, ул да профилактик сифаттары менән билдәле", - тип аңлата Иванов. Онколог шулай уҡ эсәктәр өсөн файҙалы ризыҡтарҙы ла атай. Рукколала каротиноидтар күп, шуға ла быға тиклем быңдай йәшел тәмләткестәр ҡулланмағанһығыҙ икән, уларға ла иғтибар итегеҙ. Йәшел сәй иһә сиргә дусар булғандарға файҙалы, ул сирҙең аҙыуына юл ҡуймай. Тағы ла етен орлоҡтары, диңгеҙ ылымыҡтары, сәтләүектәр, емеш-еләк гел өҫтәлегеҙҙә булһын.

■ Аяҡ кейемен нисек һайлайһығыҙ? Подолог, тарвматолог-ортопед Владимир Шуманов белдереүенсә, күптәр үҙ үлсәменән бәләкәйерәк аяҡ кейеме алырға күнеккән. Барыбер һуҙыла ул, тип уйлайһығыҙ икән, хаталанаһығыҙ. Аяҡ кейеме тап-таман ғына булырға тейеш түгел, бер аҙ иркенерәген һайлау яҡшыраҡ. Сөнки кеше атлағанда аяҡтар яҡынса ярты-бер сантиметрға һуҙыла, шуға ла бармаҡтар өсөн урын булырға тейеш. Аяҡ кейеменең башы ла ослайып бөтмәһен, ул саҡта табан һәм тырнаҡтарҙың формаһы боҙола. Аяҡтарығыҙ сәләмәт булһын тиһәгеҙ, көндәлек кейгән аяҡ кейемен яҡшылап һайлап алығыҙ, ул уңайлы булһын.

ХӘТЕРКИТАП

# ФРАНЦУЗ ЯУЛЫҠ КӘШТӘЛӘ...



**Башҡорт ҡатын - ҡыҙҙарының милли кейемен француз яулыҡһыҙ күҙ алдына баҫтырыуы ла ҡыйын. Француз яулыҡ, француз ҡушъулыҡ беҙҙең милли кейембеҙҙең айырып алғыһыҙ бер матур, сағыу өлөшө. Сәскәлекәй генә, биҙәкәй генә, ҙур ғына ҡыҙыл ситса яулыҡ һиндә бар икән - һин үҙең дә байһың, сөнки яулыҡ үҙе үк оло мәртәбәгә эйә.**

Француз яулыҡты, ҡашмау кеүек үк, кейәүгә сыҡҡан йәш кәләш ябынған. Килен (йәки кейәү) күреneше итеп ҡоҙалар яғына француз яулыҡ өләшеү - был иһә килендең (йәки кейәүҙең) етеш йәшәгән, болло ғаиләнән икәнен күрһәткән.

Француз яулыҡтың башҡорттарҙың көнкүрешенә, тормошона үтеп инеүе, таралыуы халҡыбыҙҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында ике тиҫтәнән артыҡ атлы полк менән ҡатнашыуы, 1813-1814 йылдарҙа Рәсәйҙән ситтә барған походтарҙа хәрәкәт итеүе, сигенгән француз ғәскәрҙәрен эҙәрлекләп, тар-мар итеүгә тос өлөш индереүе, Парижға-са барып етеп, енеүсе булып ҡайтыу ваҡиғаларына туранан-тура бәйле.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙы өсөн иң ҡәҙерле бүләк - ул яулыҡ йәки сәскәле шәл. Ә француз яуынан яугир башҡорт ошондай бүләк алып ҡайтһын әле! Бығаса башҡорт илендә быңдай яулыҡтар булһа ла, һирәк осрағандыр. Француз яуы булған яҡтарҙан килгән яулыҡтың да "француз яулыҡ" тип атала башлауы, моғайын, тәбиғиҙер. Һиндостандың Кашмир ҡалаһынан килтерелгән кешмир (кизе) шәлдәр, яулыҡтар, Италияның Болонья ҡалаһында сығарылған туҡыманан тегелгән болонья плащ-курткалар атамаһы ла бер ниндәй һорау тыуҙырмай.

Беҙ бала саҡта инәйҙәрҙең һәр береһендә тиерлек боронғо француз яулыҡ була торғайны, тик үҙҙәре шул тиклем ҡәҙерләгән яулыҡтарының ни өсөн француз яулыҡ тип атала икәнен генә аңлата алмайҙар ине.

"Француз яулыҡ биҙәкәй
Ябынмайым, инәкәй?" - тип, кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙарҙың ата йортонан сеңләп китеү күренештәре лә булған бит элек. Мәҫәлән, улар, моғайын, шулай тип сеңләгәндер:

Ҡыҙ:
Француз яулыҡ биҙәкәй,
Ябынмайым, еңгәкәй.
Атам йортонан китәм бит,
Нисек түҙер йөрәккәй?..
Еңгә:
Француз яулыҡ ала биҙәк,
Ябыныңһың, балаҡай.
Бер беҙҙән генә ҡалмаған,
Һағыныңһың, иларһың да,
Өйрәнерһең, балаҡай...

Яҙып ябыналар ине инәйҙәр "һырансуз" яулыҡтарын. Яулыҡ ҙур, уны урталай бөкләп ябыныуы яйһыҙыраҡ - баштан артып ҡала. Йәтешерәк кәүҙәле, ҡураныс инәйҙәрҙең арҡаһын, яурындарын тотошлай яба яулыҡ. Ике яурын аша алға тартып ҡуялар. Арт яҡтан ҡулдаҡ итәктәренән осона ҡәҙәр етә яҙа хатта. Ысынлап та, үҙе бер кейем һымаҡ шул - үҙе матур, үҙе йылы, үҙе кәрәк.

Был ҡәҙерле яулыҡтарҙың урыны йә һандыҡта, йә кәштәлә ине. Ҡағып - һелкеп, дүрткә-бишкә бөкләп, һалып ҡуялар. Ә байрам көндәрендә уны урҙаға эләләр. Ҡунаҡтан ҡайтҡас, тағы урҙаға элеп торалар. Ул ҡомартҡы, ул монаят, ул аманат. Әсәйҙән - ҡыҙына, ҡыҙынан- ейәнсәргә, ейәнсәрҙән бүләсәргә был ҡәҙерле мираҫ тапшырыла килә...

Француз яулыҡ тураһында йырҙар йырлана, бейеүҙәр һалына. Эре-эре аҡ сәскәле йә ҡусҡар биҙәкле ҡыҙыл яулыҡ бәхет, тоғролоҡ, мөхәббәт символы кеүек ул. Мәҫәлән, "Йәшермәсе йөҙөңдө, һылыуым, Француз яулығыңды ас", - тигән ҡурай-лы-йырлы бейеүҙе барыбыҙ ҙа беләбеҙ.

Һөйгән ҡыҙына яуҙан француз яулыҡ алып ҡайтҡан мәргән уксы, батыр егет Харис тураһында матур риүәйәт бар. Ҡыҫҡасаһы ошолай: "Француз яуы ҡупҡас, Харис та яуға әҙерләнә башлай. Эйәр - өпсөнө, башҡа кәрәк - яраҡтары менән атын әҙерләй, янын, уҡ-һаҙаҡтарын ала. Ирәмәлтауға барып, ата-бабалар рухынан ризалыҡ ала. Һөйгән ҡыҙы Нәйлә Харисҡа былай ти:

- Һин яныңдың керешенә минең толомомдан алып, сәсемде ҡушып иш. Уҡтарың тура осор, ә мин һәр саҡ яныңда булырмын, һине һаҡлап, ҡурсалап йөрөрмөн.

Лейпциг янындағы алышта Харис французлдарҙың ғәскәр байрағын ҡулға төшөрә. Шул ҡыҙыл байраҡты Харис, дошмандарҙы тар-мар иткәс, Нәйләгә бүләк итеп алып ҡайта. "Ана, күрәһеңме, хатта исемеңдең хәрефе сигеп ҡуйылған", - ти Харис. Ысынлап та, бүләктең мөйөшөндә "N" (Наполеон) хәрефе бар икән. Уныңса, "N" икән, тимәк - Нәйлә!

Бер фараз буйынса, француз яулыҡ атлыларҙың ауыҙ-моронон ябыр өсөн ҡулланылған яулыҡтан барлыҡҡа килгән. Оҙайлы походтарҙа, алыш - бәрелештәр мәлендә меңдәрсә ат тояҡтары ҡалҡытҡан саңтуҙан танауға, ауыҙға тулмаһын өсөн атлылар ярты биттәренә яулыҡ бәйләгән. Күҙҙәргә, һыбаҡшып аҡҡан тирҙәргә һөртөп алырға ла кәрәк булып торғандыр яулыҡтар. Ә шулай ҙа француз яулыҡтың тарихына яуап төптә, алыҫ тарихталыр. Унының да асыҡлары тарихсылар.

Таңһылыу ВӘЛИЕВА.

БЫЛ - МӨҺИМ!

# БЕЛЕҮ ӨСӨН ҺӨЙЛӘШЕҮ КӘРӘК!

**СПИД-ты һәм инфекцион сирҙәрҙе профилактикалау һәм көрәш буйынса республика үҙәге апрелдә йәштәр араһында ВИЧ таралыуҙы иҫкәртеүгә йүнәлтелгән сара ойоштора. Сәләмәт мөнәсәбәттәрҙе пропагандалауға арналған был проект 2014 йылдан тормошҡа ашырыла һәм ошо ваҡыт эсендә унда 30 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан.**



Проект авторы Дмитрий Никифоров әйтеүенсә, үҫмерҙәр өлкәнәйгән осорҙарында күп проблемалары менән яңғыҙ ҡала. "Эшләй башлаған осорҙа муниципалитеттар хакимиәттәре был мәсьәләгә һиҫкәнеп ҡарай ине, хәҙер иһә үҙҙәре ҡасан килеүебеҙҙе белешеп, шылтыратып тора. Башҡортостан буйлап йөрөп, һәр ерҙә 200-ҙән алып 600-гә тиклем кешенән торған тулы залдар йыябыҙ. Йәштәр менән уларҙың телендә әңгәмәләшәбеҙ", - ти ул. Бынан тыш, эш социаль селтәрҙәрҙә лә алып барыла. Ул да уйын формаһында бара. Әйтәйек, викторина ойоштороп, йәштәрҙең ВИЧ буйынса белемдәрен камиллаштырырға мөмкин. Март айында 2500 кеше ошо уйындарға

**✓ Үҙенең былай машина алмаҫына шиген раҫлау өсөн ул ҡатынының фекерен белеште. Уныһы, иренең көҙгөләге сағылышы булараҡ, былай "аҡылһыҙ фантазия"ға ҡәтғи ҡаршы булды.**



ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨ ХӘБӘР

# ҺУНАР МИҘГЕЛЕ



**Башҡортостанда ҡоштарға яҙғы һунар миҙгеле асылды. Республиканың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, һунар итеү ваҡыты һунар урынына бәйле.**

Мәсәлән, беренсе зонала (Әлшәй, Ауырғазы, Баймаҡ, Баҡалы, Бәләбәй, Бишбүләк, Благовар, Бүздәк, Дәүләкән, Йәрмәкәй, Ейәнсура, Күгәрсен, Кушнаренко, Көйөргәҙе, Мәләүез, Миәкә, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Федоровка, Хәйбулла, Шишмә, Шаран райондары) ҡаҙҙарға, ата өйрәктәргә - 12 апрелдән 21-енә, ә ҡурпысыҡҡа, шулай уҡ ата һуйыр менән ҡорға 20 апрелдән 29-ына тиклем һунар итергә мөмкин.

Икенсе зонала (Әбйәлил, Архангел, Асҡын, Балтас, Балаҡатай, Бөрө, Благовещен, Борай, Бөрйән, Ғафури, Дыуан, Дүртөйлө, Йылайыр, Иглин, Илеш, Ишембай, Ҡалтасы, Ҡариҙел, Ҡырмыҫҡалы, Ҡыйғы, Краснокама, Мәсетле, Мишкә, Нуриман, Салауат, Тәтешле, Учалы, Саҡмағош, Яңауыл райондары) ҡаҙҙарға, ата өйрәктәргә - 19 апрелдән 28-нә, ә ҡурпысыҡҡа, шулай уҡ ата һуйыр менән ҡорға 27 апрелдән 6 майға хәтлем һунар рөхсәт ителә.

Өсөнсө зонала (Белорет районында) ҡаҙҙарға, ата өйрәктәргә - 26 апрелдән 5 майға тиклем, ҡурпысыҡҡа, шулай уҡ ата һуйыр менән ҡорға 27 апрелдән 6 майға ҡәҙәр һунар итергә була.

Бынан тыш, 13 апрелдән 12 майға тиклем тере өйрәктәр менән һунар рөхсәт ителә.

Һунар итеү өсөн махсус рөхсәт алырға кәрәк. Һунар ваҡытында ҡош-ҡортто эҙәрлекләү маҡсатында йөҙөү сараларын ҡулланыу тыйыла.

# МАШИНА УРЛАУСЫЛАР...



**Ҡытай машиналары - машина урлаусылар араһында популяр түгел. Һуңғы бер нисә йылда Рәсәй баҙарына Ҡытай машиналары күпләп килтерелһә лә, уларҙы урлауҙың бер осрағы ла теркәлмәгән.**

Эксперттар быны уларға запас өлөштәр табыу еңеллеге менән бәйләй. Шулай ҙа киләсәктә был хәл үҙгәрергә лә мөмкин, тип белдерә улар. 2023 йыл һөҙөмтәләре буйынса страховкалау компанияларында яңы Ҡытай машиналарын страховкалау һандары 2,5 тапҡырға тиклем артҡан. 90 процент осраҡта автомобилдәр һүтелеп, уның запас өлөштәрен һатыу өсөн урлана. Ә Ҡытай автопром вәкилдәре Рәсәй автомобилдәр баҙарына машиналар менән бергә күпләп запас өлөштәр ҙә индергән һәм шулай уҡ машиналарға 5-7 йыл гарантия ла бирә. Бөтә был факторҙар Ҡытай автомобилдәрен урланыуҙан "һаҡлай", сөнки "ҡара баҙар"ҙа уларҙың запас өлөштәренә һорау юҡ. Ә иң күп урланған машиналар иҫәбенә Корея автомобилдәре инә.

# ЙҮНСЕЛДӘР ЙҮНЛӘЙ



**Иглин ауылынан Ирек Кәримов ағастан төрлө әйберҙәр: ябай ғына йәшниктәрҙән алып ҡатмарлы биҙәү элементтары, һауыт-һаба, өй йыһаздары эшләй. Һатып алыусылар оҫта эшләгән тәрилкәләргә, шәкәр, салат һауыттарына һоҡланыуын йәшермәй.**

Йүнсел производствоһын киңәйтергә ниәтләй. 2023 йылдың декабрендә ул Иглин районы хакимиәтенә консультация һорап мөрәжәғәт иткән. Тейешле ярҙам алғас, эшҡыуар адреслы социаль ярҙам юллау өсөн документтар тапшырған. Кәримов ошо 350 мең һум аҡсаға яңы заманса станоктар, ағас эшкәртеү ҡоралдары һатып алған. Хәҙер эшҡыуарҙың үҙ бренды бар. Оҫтаның һнағған әйберҙәрен маркетплейстарҙа һатып алырға була. Ул артабан үҫешеү, үҙ тәжрибәһен уртаҡлашыу ниәте менән йәшәй.

Ә бына Шишмә районының Күсем ауылынан ҡымыҙ бешеүсе Флүр Йосопов 25 йыл башҡорт тоҡомло аттар үрсетеү менән шөғөлләнә. Уның ҙур хужалығында 130 ат, шул иҫәптән 80 һауын бейә бар. 2023 йылда эшҡыуар йылҡы малы тоҡомон яңыртыу өсөн алты айғыр һатып алған, шуларҙың дүртәүһе - башҡорт тоҡомло һәм ике йөк аты. Муниципаль программа ярҙамында ул үҙенең сығымдарын ҡаплауға 500 мең һум субсидияға эйә булған. Хәҙер Флүр Йосопов яңы ниәт менән йәшәй. Яҡын киләсәктә ул ит эшкәртеү өсөн махсус ҡоралдар һатып алып, деликатестар етештереү эшен яйға һалырға ниәтләй. Үҙенең хыялын бойомға ашырыу өсөн эшҡыуар ярҙам һорап мөрәжәғәт итергә уйлай.

# БАТЫР УЛДАР



**Көйөргәҙе районынан бер туған ағалы-эне махсус хәрби операцияла ҡатнаша. "Шайтан" позывнойлы яугир Авдеевка йүнәлешендәге штурм подразделениеһында һуғыша, ә кесеһе, "Рафа", Кременчугта дошман миналарын зарарһыҙландыра.**

Яугирҙарҙы өйҙә ғаиләләре көтә: "Шайтан"дың студент улы һәм етенсе класта уҡыған ҡыҙы, "Рафа"ның үҫеп еткән улдары һәм фармацевт һөнәренә уҡып йөрөгән ҡыҙы бар. "Ирем үлгәндән һуң мин улдарымдың алтын ҡулдарына һәм оҫталығына таянып йәшәй инем. Улар бала саҡтан спорт һәм техника менән мауыға. Мәктәптә көрәш менән шөғөлләнделәр, йыл да һабантуйҙа сығыш яһап, бүләкһеҙ ҡайтмайҙар ине. Ә техниканы нисек ярата улар! Был уларға аталарынан күскән. Өлкән улым алты йәшендә, атаһының алдына ултырып, машина йөрөтөргә өйрәнде. Аҙаҡ улдарым тракторҙа, йөк машинаһында, экскаваторҙа йөрөнө. Тәмле итеп икмәк тә бешерә белә улар. Бер ҡасан да эштән ҡайтҡанымды көтөп ултырманылар, өй эштәрен үҙҙәре башҡарып ҡуя инеләр", - ти яугирҙарҙың әсәһе Сәриә Сәмәрҙән ҡыҙы.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Дуҫымдың машинаһы

Бер яҡшы дуҫым күптән порше машинаһы һатып алырға хыялланды. 20 йыл дауамына ул үҙенең хыялын баҫырып килде, уны уйҙарынан алып ташларға тырышты, үҙен быға лайыҡ түгел тип уйланы. Шуға ҡарамаҫтан, хыялы үҫә һәм нығына барҙы. Үҙенең былай машина алмаҫына шиген раҫлау өсөн ул ҡатынының фекерен белеште. Уныһы, иренең көҙгөләге сағылышы булараҡ, былай "аҡылһыҙ фантазия"ға ҡәтғи ҡаршы булды. Сихырлы ҡулса!

Дуҫым менән осрашҡан һайын мин уны башҡаларҙан кәңәш һорарға түгел, ә үҙенә ҡәтғи ҡарар ҡабул итеп, машина һатып алырға өгөтләй инем. Әгәр ул машина алырға ниәтләһә, аҡсаһы ла табыласағын, ҡатыны ла уны "аҡылһыҙлыҡта" ғәйепләмәйәсәгенә инандырырға тырыштым.

Ахырҙа, шешәләге "ен" атылды! Дуҫым салонға барып, машина һатып алды. Ике көндән һуң минә килде һәм уның шул саҡта күҙҙәренең нисек янып торғанын күрһәгеҙ! Бер ай ҙа үтмәне, эшендә күберәк аҡса ала башланы, ҡатыны ла машинаға ҡарашын үҙгәртте һәм магазинға порше машинаһында барыуы уға оҡшап ҡалды.

"Ен"дәр һеҙҙең эсегеҙҙә. Ә тирә-яҡтан урап алыусылар - көҙгөләге сағылышығыҙ. Бына ни өсөн ғаилә ағзалары һеҙгә шул тиклем ҡәҙерле, шул уҡ ваҡытта улар ҡаты ла була ала. Икенсе төрлө әйткәндә, ғаилә ағзаларына ни тиклем нығыраҡ бәйләнгәнһегеҙ, шул тиклем улар һеҙҙә ҡурҡыу һәм хәүеф тойғоһон арттыра. Уларҙы тәңкитләрҙән йәки улар менән бәйләнеште өҙөрҙән алда, күңелегеҙгә ҡарағыҙ һәм унда генераль таҙартыу ойоштороғоҙ. Ерҙәге Ожмах - ысынлап та иҫ киткес урын ул!

## Бизнеста Дао ҡанундары

### Математик ғаләм

Ерҙәге Ожмах рәхәтлеген кисереп йәшәү өсөн үҙләштергән һабаҡтарығыҙ ҙа етерлек. Әммә рациональ мейегеҙгә бер аҙ аҙыҡ бирер өсөн Ғаләмдең төп функцияһы менән дә таныштырып китәйем. Әлбиттә, ул минең аңлауым, тәжрибәләрем һәм тикшеренеүҙәремә нигеҙләнә.

Ғаләмдең аныҡлығын һәм математик логикаһын яҙып аңлатып булмай. Фән беҙгә көн һайын тәбиғәт механизмдарын аңлау аңыбыҙ өсөн ябыҡ икәнлеген раҫлай. Уйлап ҡына ҡарағыҙ: беҙ миллионлаған галактика араһында йәшәйбеҙ.

Ғаләмдең сикһеҙлеге мине мажараларҙың бер ҡасан да бөтмәҫенә ышанырға мәжбүр итә һәм мин берәй заман тағы ла ҡатмарлыраҡ мәсьәләләрҙе хәл итә алыу кимәленә етеремә инандыра. Был мин Ерҙәге Ожмах минә биргән барлыҡ мөмкинлектәрҙе алып бөткәс, тормошҡа ашасаҡ. Ул ғына ла түгел,үҙем өйрәнгән барлыҡ диндәрҙә һәр саҡ бер үк принципты осраттым: иртәме-һуңмы беҙгә был Ожмахты ҡалдырып, икенсе ерҙәргә китергә тура киләсәк. Ҡайҙа, ниндәй? Әйтеүе ауыр. Яуап һеҙҙең туризмды нисек аңлауығыҙға бәйле.

Әгәр Ғаләм сикһеҙ икән, ни өсөн беҙҙекенә бөтөнләй оҡшамаған башҡа ғаләмдәр булмаҫҡа тейеш? Ә әлегә беҙгә ҙур эш башҡарырға, үҙ Ғаләмебеҙ менән идара иткән ҡанундарҙы аңларға кәрәк.

Пьер МОРАНСИ.

теркәлеп, уларҙың 1200-ө уны уңышлы үткән. "Йәштәр ошондай викториналарҙы башҡа инфекцион сирҙәр, шулай уҡ буллинг, наркомания, алкоголизмды профилактикалау буйынса ла үткәреүебеҙҙе һорай", - ти Дмитрий Никифоров.

Үҙәктең баш табибы Рафаэль Яппаров билдәләүенсә, хәҙер йәштәр ВИЧ тураһында өлкәндәргә ҡарағанда ла күберәкте белә, ә ололар иһә унан ҡурҡа, әммә мәғлүмәт туплауға иғтибар итмәй. "Бәлки, шуғалыр ҙа, һуңғы йылдарҙа ВИЧ йоҡтороуҙың яңы осраҡтары 35 йәштә үткәндәр араһында теркәлә. ВИЧ бер ҡайҙа ла юғалмаған, коронавирус осоронда ла ул булды, шуға сәләмәтлегегеҙгә иғтибарлы булығыҙ", - ти Р. Яппаров.

Был темаға ата-әсәләрҙең күҙ йомоп ҡарауы ла билдәле. ВИЧ йоҡтороу хәүефе аҫтында 16-17 йәшлек үҫмерҙәр һәм 40-45 йәшлек өлкәндәр тора. Шуға ла ата-әсәләргә лә балаһын ҡурсалау өсөн тәүҙә үҙенә мәғлүмәтле булыу кәрәк.

"Өлкәндәрсә һөйләшеү" акцияһы 5 апрелдә старт алды, ул Октябрьский, Күмертау, Мәләүез, Стәрлетамаҡ, Белорет, Учалы, Нефтекама, Бөрө ҡалаларында һәм Ермолаево, Раевка, Асҡар ауылдарында үтә. ВИЧ проблемаһы тураһында һөйләшеү мөһим, тигән фекерҙә сараны ойоштороусылар.

# ҠЫҘЫЛСАНАН ҺАҠЛАН!

**Былтырғы йыл башынан Башҡортостанда ҡыҙылса менән эпидемиологик хәл киҫкен тора. Өфө хакимиәтенең халыҡ сәләмәтлеген һаҡлау бүлеге белгестәре билдәләүенсә, сир артыуының төп сәбәбе - прививканан баш тартыу һәм тап ошо кешеләр уны тарата ла инде.**

Бөгөнгө көндә ҡыҙылсанан һаҡланыуҙың берҙән-бер юлы - вакцина яһатыу. 2004 йылдан республикала өлкән кешеләр араһында ла планға ярашлы иммунизация үткәрелә. Ҡыҙылсаға ҡаршы вакцинация балаға 12 ай тулғанда яһала һәм ул мотлаҡ эшләнә торған тұләүһеҙ вакциналарҙың милли календарына ингән. Ревакцинация 6, 15 йәштән 17, 22 йәштән 29 йәшкә тиклем үткәрелә. Был ҡурҡыныс сиргә ҡарата ныҡлы иммунитет булдырырға ярҙам итә. Ҡапыл ҡайҙалыр ҡыҙылса сире асыҡлана икән, быға тиклем ҡыҙылсанан вакцина яһатмаған, уның яһатылғанмы, юҡмы икәнен аныҡ белмәгән, ҡыҙылса менән ауырымаған һәм бер тапҡыр ғына вакцина яһатҡандар барыһы ла йәшенә ҡарамай иммунизация үтергә бурыслы. Был сирҙең тиҙ йоғоу һәм йортто һауа юлдары аша ла таралыу сифатына бәйле.

Балалар, ололарға ҡарағанда, прививканы еңел кисерә. Ҡыҙылсаға ҡаршы профилактик прививканы йәшәгән урыныгыҙ буйынса медицина учреждениеһында яһата алаһығыҙ.



## 22 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "Модный приговор". (0+).
09.55 "Жить здорово!" (16+).
10.45, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 "По законам военного времени. Битва за Ростов". Т/с (12+).
00.10 Премьера. "Обыкновенный фашизм-2". Фильм второй. Д/с (18+).
01.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". (16+).
02.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". (16+).
02.45, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". (16+).
03.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". (16+).
04.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Ангелы района". Т/с (16+).
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.05 "Тайны следствия". Т/с (16+).
03.40 "Версия". Т/с (16+).
04.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Сәләм".**
**10.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. (12+).**
**10.45 "Ҡурай даны". (12+).**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). (12+).**
**11.45, 13.45, 17.45, 18.15, 04.00 Интервью. (12+).**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз). (12+).**
**12.15 Письма солдатам. (12+).**
**12.30 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 00.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 "Этно-краса". (6+).**
**15.30 Преград. Net. (6+).**
**15.45 "Нурбостан сәйәхәте". М/с (6+).**
**16.00 Башҡорттар. (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**18.00 Специальный репортаж. (12+).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**22.00 Тайм-аут. (12+).**
**23.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. (12+).**
**01.30 "Бесприданница". (12+).**

## 23 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "Модный приговор". (0+).
09.55 "Жить здорово!" (16+).
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 "По законам военного времени. Битва за Ростов". Т/с (12+).
00.10 Премьера. "Владимир Высоцкий. "Я вышел на подмостки..." К 60-летию Театра на Таганке. Д/ф (16+).
01.10 "Юрий Любимов. Человек века". Д/ф (12+).
02.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". (16+).
02.50, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". (16+).
03.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Космические истории". (16+).
04.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Ангелы района". Т/с (16+).
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.05 "Тайны следствия". Т/с (16+).
03.40 "Версия". Т/с (16+).
04.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". (12+).**
**10.45 Новости СВО (на баш. яз).**
**11.00 Автограф. (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 18.15 Интервью. (12+).**
**12.00 Тайм-аут. (12+).**
**12.30, 03.15 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 00.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". (6+).**
**15.45 "Мультфильмы". М/ф (6+).**
**16.00 "Бай". (12+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**17.45 Криминальный спектр. (16+).**
**18.00 Письма солдатам. (12+).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**23.00 Күстәнәс. Илгиз Таһиров. (12+).**
**23.30 Караоке по-башкирски. (12+).**
**01.30 Спектакль "Наш одуванчик". (12+).**

## 24 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "Модный приговор". (0+).
09.55 "Жить здорово!" (16+).
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 "По законам военного времени. Битва за Ростов". Т/с (12+).
00.10, 04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". (16+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". (16+).
02.25, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!" (18+).
03.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Ангелы района". Т/с (16+).
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.05 "Тайны следствия". Т/с (16+).
03.40 "Версия". Т/с (16+).
04.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Сәләм".**
**10.00, 10.15 "Ҡурай даны". (12+).**
**10.30 История одного села. (12+).**
**10.45, 13.45, 17.45 Интервью. (12+).**
**11.00 "Дорога к храму". (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. (16+).**
**12.00 Дознание. (16+).**
**12.15 Письма солдатам. (12+).**
**12.30, 03.15 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 00.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 "КультУра". (6+).**
**15.30 МузКәрәҙ. (6+).**
**16.00 Автограф. (12+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**18.00 Тормош. (12+).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**22.00 Историческая среда. (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. (12+).**
**01.30 "Караул, тещу украли!" (12+).**

## 25 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "Модный приговор". (0+).
09.55 "Жить здорово!" (16+).
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 "По законам военного времени. Битва за Ростов". Т/с (12+).
00.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". (16+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". (16+).
02.25, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". (16+).
03.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Театральный подкаст". (16+).
04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Ангелы района". Т/с (16+).
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.05 "Тайны следствия". Т/с (16+).
03.40 "Версия". Т/с (16+).
04.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Сәләм".**
**10.00 Үткән ғүмер. (12+).**
**10.30 "Дорога к храму". (6+).**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 16.15, 17.00, 04.00 Интервью. (12+).**
**12.00 Историческая среда. (12+).**
**12.30 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 00.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 Сулпылар. (6+).**
**15.45 Городок АЮЯ. (6+).**
**16.00 Дознание. (16+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.15 История признания. (12+).**
**17.45 Криминальный спектр. (16+).**
**18.00 Башҡорттар. (6+).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**
**19.45 Мама. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**22.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**23.00 Колесо времени. (12+).**
**01.30 Спектакль "Нәркәс". (12+).**
**03.45 История одного села. (12+).**

## 26 АПРЕЛЯ
## ПЯТНИЦА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "Модный приговор". (0+).
09.55 "Жить здорово!" (16+).
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 "По законам военного времени. Битва за Ростов". Т/с (12+).
00.10 "Один на один". Х/ф (12+).
01.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". (16+).
02.40, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!" (18+).
03.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Баден-Баден". (16+).
04.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 16.30 "60 минут". (12+).
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. (12+).
19.00 "Тот самый Киселёв". Д/ф (12+).
21.30 "Удивительные люди. Новый сезон". (12+).
23.55 "Земля Эльзы". Х/ф (12+).
02.00 "46-й Московский Международный кинофестиваль. Торжественное закрытие".
03.00 "Напрасная жертва". Х/ф (12+).
04.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00 "Йома". (6+).**
**10.30 Моя планета - Башкортостан. (12+).**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. (16+).**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. (12+).**
**12.15 Специальный репортаж. (12+).**
**12.30, 05.00 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 04.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 01.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 Лит-ра. (6+).**
**15.45 "Этно-краса". (6+).**
**16.00 Хазина. (12+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**19.00 Честно говоря. (12+).**
**19.45, 06.00 История одного села. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**20.30 "Ете егет". (12+).**
**22.00 Своих не бросаем. (12+).**
**22.15 Территория женского счастья. (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. (12+).**
**23.45 "Йырзарза йылдар". Лучшие исполнители башкирских народных песен. (12+).**
**02.45 "Весело живем". (12+).**

## 27 АПРЕЛЯ
## СУББОТА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 16.00 Новости.
09.05 Премьера. "Модный приговор". (0+).
09.55 "Жить здорово!" (16+).
10.45, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
16.15 "Мужское / Женское". (16+).
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. (16+).
19.45 "Поле чудес". (16+).
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. (16+).
22.55 "Юрий Любимов. Человек века". Д/ф (12+).
23.45 "Голос". Новый сезон. Финал. Прямой эфир. (12+).
01.55 "Матадор". (16+).
03.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". (16+).
04.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!". (16+).
04.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
08.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
08.20 Местное время. Суббота.
08.35 "По секрету всему свету".
09.00 "Формула еды". (12+).
09.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "В кругу друзей".
12.50 "Доктор Мясников". (12+).
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" (16+).
17.50 "Привет, Андрей!" (12+).
21.00 "Морская Заморская". Х/ф (16+).
00.35 "Наказание без преступления". Х/ф (12+).
04.20 "Москва - Лопушки". Х/ф (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.30, 13.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**07.45 Үткән ғүмер. (12+).**
**08.15 "Ете егет". (12+).**
**09.00, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**09.15, 13.45, 17.00, 17.45, 19.00 Интервью. (12+).**
**09.30 Письма солдатам. (12+).**
**09.45 Своих не бросаем. (12+).**
**10.00 Күстәнәс. (12+).**
**10.30 "Ҡурай даны". (12+).**
**10.50 "Международный диктант по башкирскому языку". (12+).**
**13.00 Башҡорттар. (6+).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 Атайсал. (6+).**
**15.45 "Нурбостан сәйәхәте". М/с (6+).**
**16.00, 04.45 Колесо времени. (12+).**
**17.15, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**18.00, 02.00 Автограф. (12+).**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. (6+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. (12+).**
**22.00, 03.30 Республика LIVE #дома. (12+).**
**22.30, 04.00 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. (12+).**
**23.45 "Ҡурай-шоу". (12+).**
**00.15 "Море мечты". (12+).**
**02.30 Счастливый час. (12+).**
**05.45 Аль-Фатиха. (6+).**

## 28 АПРЕЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10, 04.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". (16+).
06.55 Играй, гармонь любимая! (12+).
07.40 "Часовой". (12+).
08.10 "Здоровье". (16+).
09.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. (12+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. (12+).
10.15 Премьера. "Модный приговор". (0+).
11.05 Премьера. "Повара на колесах". (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" (0+).
14.10 "Мертвый сезон". К 100-летию великого актера. Х/ф (12+).
17.00 Премьера. "Мертвый сезон" и вся жизнь Донатаса Баниониса". К 100-летию великого актера. Д/ф (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. (16+).
21.00 "Время".
23.00 "Голос". Новый сезон. Финал. (12+).
01.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". (16+).
01.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Театральный подкаст". (16+).
02.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". (16+).
03.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". (16+).
04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". (16+).

### РОССИЯ 1

06.00, 01.05 "Охота на верного". Х/ф (12+).
08.00 Местное время. Воскресенье.
08.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
09.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены.
12.50 "Лети, пёрышко". Х/ф (12+).
17.50 "Песни от всей души". (12+).
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.52 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.30 Новости (на баш. яз).**
**07.45 "Йома". (6+).**
**08.15 Тормош. (12+).**
**08.45 "Ҡурай даны". (12+).**
**09.00 Орнамент. (12+).**
**09.15 Письма солдатам. (12+).**
**09.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**09.45, 21.15, 06.45 Специальный репортаж. (12+).**
**10.00 "Мультфильмы". М/ф (6+).**
**10.30 Книга сказок. (6+).**
**10.45 Городок АЮЯ. (6+).**
**11.00 Гора новостей. (6+).**
**11.15 Сулпылар-2024. (6+).**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. (6+).**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). (12+).**
**13.15, 02.30, 05.30 История одного села. (12+).**
**13.30 Пером и оружием. Рамазан Кутушев. (12+).**
**14.00 Дарю песню. (12+).**
**16.00, 03.15 Дорога к храму. (6+).**
**16.30 Честно говоря. (12+).**
**17.15, 05.45 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.30 Автограф. (12+).**
**18.00 Патриот РФ. (12+).**
**18.15 Концерт. (6+).**
**21.00 Дознание. (16+).**
**21.30, 03.45, 06.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 02.45 Республика LIVE #дома. (12+).**
**22.45 Концерт камерной музыки. Шаляпинский зал УГИИ им. З.Исмагилова. (12+).**
**00.30 М. Корягина "Часы с кукушкой". Спектакль Чувашского государственного драмтеатра им. К.В. Иванова. (12+).**
**04.30 Счастливый час. (12+).**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Апрель (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (13) дүшәмбе | 3:39 | 5:58 | 13:30 | 18:13 | 20:31 | 22:52 |
| 23 (14) шишәмбе | 3:35 | 5:56 | 13:30 | 18:14 | 20:33 | 22:56 |
| 24 (15) шаршамбы | 3:31 | 5:53 | 13:30 | 18:15 | 20:35 | 23:00 |
| 25 (16) кесе йома | 3:26 | 5:51 | 13:30 | 18:17 | 20:37 | 23:04 |
| 26 (17) йома | 3:22 | 5:49 | 13:30 | 18:18 | 20:39 | 23:08 |
| 27 (18) шәмбе | 3:18 | 5:47 | 13:30 | 18:19 | 20:41 | 23:12 |
| 28 (19) йәкшәмбе | 3:15 | 5:45 | 13:30 | 18:20 | 20:43 | 23:13 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 28 АПРЕЛЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ТУҒАНЛАШҠАН ҠАЛАЛАР КӨНӨ



**Был байрам 1957 йылда булдырылған Бөтә донъя туғанлашҡан ҡалалар федерацияһы тарафынан апрелдең һуңғы йәкшәмбеһендә билдәләнә.**

Бөтә донъя туғанлашҡан ҡалалар федерацияһы - халыҡ-ара хөкүмәткә ҡарамаған ойошма, ул төрлө илдәрҙең ҡалалары араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәренә булышлыҡ итеү маҡсатында ойошторола. Ул 2004 йылда "Берләшкән ҡалалар һәм урындағы власть" Бөтә донъя ойошмаһына әүерелгәнсе, 160-тан ашыу илдең 3500-ҙән ашыу ҡалаһын дуҫлаштыра.

Дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тураһында ҡалалар араһындағы тәүге килешеү 1942 йылда уҡ Сталинград һәм Англияның Ковентри ҡалалары араһында төҙөлә: икеһе лә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ҙур зыян күргән. Ә Бөтә донъя туғанлашҡан ҡалалар көнөн 1963 йылдан бирле йыл һайын билдәләйҙәр.

Совет осоронда ла туғандаш ҡалалар була, әле лә был эш дауам итә. Беренселәрҙән булып Мәскәү бәйләнештәр булдыра, хәҙерге көндә ул сит илдәрҙең тиҫтәләгән баш ҡалаһы менән хеҙмәттәшлек итә. Ә бына Санкт-Петербург ҡалаһы Осака, Манчестер, Гамбург, Бомбей менән дуҫтарса мөнәсәбәттә, Волгоград иһә Ковентри, Порт-Саид, Хиросима, Дижон менән хеҙмәттәшлектә.

Башҡортостан ҡалалары ла был яҡшы эштән ситтә ҡалмай. Бөгөнгө көндә Өфөнөң ун туғандашы бар. Уларҙың ҡайһы берҙәре менән баш ҡалабыҙ күптән дуҫтарса мөнәсәбәттә булһа, ҡайһылары һуңғы йылдарҙа килешеүҙәр төҙөгән. Араларында Ҡытай Халыҡ Республикаһы ҡалалары өҫтөнлөк итә. Башваҡыста Өфө менән туғанлашҡан ҡайһы бер ҡалаларҙы табырһығыҙ.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**14-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сик. Һаҡ. Наҙ. Миәкә. Юрға. Мәжнүн. Юнышҡы. Негр. Мао. Васыят. Абвер. Ҡорам. Янсыҡ. Сәй. Ян. Көйгәнәк. Ҡата. Фата. Рәшә. Наза. Бард. Ебәк.

**Вертикаль буйынса:** Юлдашев. Юнысова. Як. Рәсәй. Мамыҡ. Гәрәбә. Кинйәбулатов. Әфәнде. Әйтем. Ника. Ҡаһарманова. Аквапарк. Сынаяҡ. Нервы. Ноҡот. Ҡоҙа.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26 апрель "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш), музыкаль комедия. 12+

**27 апрель Премьера! "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова), драма. 16+

**28 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 апрель "Униженные"** (З. Биишева), драма. 12+

**24 апрель "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 18.00 16+

**25 апрель "Волшебная мельница"** (М. Кәрим), әкиәт. 11.00 0+

**26 апрель "Дейеүкәй"** (С. Лебо). 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**25 апрель "Бесәй батыр"** (А. Чалухиди). 18.00 0+

**"Живи!"** (Р. Сванидзе). 19.00 6+

**27 апрель "Етем төлкө"** (О. Штырляева). 14.00 0+

**Премьера! "Винни-пух"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 6+

**28 апрель "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 апрель "Йырҙарым һеҙгә ҡала"** "Юлдаш" радиоһы концерты. 6+

**24 апрель "Башҡортса саундтрек"**. 6+

**24 апрель** Филармонияның Камерный оркестры концерты. 6+

**26 апрель** Джаз көнөнә концерт. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**22 апрель "Сказки гуляют по свету"** (Т. Бабичева), мажараһы менән ӨДСИ студенттары. 10.00 0+

*"Ҙур гастролдәр" сиктәрендә Г. Цадаса исемендәге Авар музыкаль-драма театры **24-26 апрелдә** сығыш яһай:*

**24 апрель Семья вурдалака"** (В. Сигарев), драма. 12.00, 15.00 12+

**25 апрель Семья вурдалака"** (В. Сигарев), драма. 14.00 12+

**"Случай в селе"** (П. Расулов), комедия. 12+

**26 апрель Не хочу быть собакой"** (С. Белов, С. Куварев), әкиәт. 10.00 0+

**27 апрель "Метранпаж мажаралары"** (А. Вампилов), комедия. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**23 апрель Премьера! "Как избежать зла?"** (Д. Сидерос), мәктәп драмаһы менән Баймаҡ халыҡ ижады үҙәгендә. 13.00 12+

**24 апрель "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 12+

**27 апрель "Его Величество Колобок второй"** шаян әкиәт. 12.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**25 апрель "Татыу ғаилә - ил күрке"** 33-сө концерт миҙгелен ябыу сараһы. 6+

**26 апрель "Әсәй, бына һиңә килендәр!"** (И. Зәйниев), комедия. 12+

**27 апрель Премьера! "Диләфрүзгә дүрт кейәү"**, (Т. Миңнуллин), комедия. 12+

**28 апрель "СуперЗаяц"** (И. Чернышев), әкиәт. 12.00 0+

## БР Милли музейы

**23 апрель "Шәхестәрҙә музей тарихы"** автор экскурсияһы. 11.00 6+

**25 апрель "Алтын приискыһы хужалары һәм шәфҡәтселәр Рәмиевтар ғаиләһе"** автор экскурсияһы. 11.00 6+

**"Ҡарғатуй"** байрамы. 12.00 0+

**26 апрель Радиация аварияларына һәм һәләкәт эҙемтәләрен бөтөрөүселәр көнөнә** сара. 11.00 12+

**Ротангтан кашпо үреү** буйынса оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

*✓ Үҙенең ахмаҡ икәнен белгән ахмаҡ - ысын дәрәжәһендә аҡыл эйәһе, ә инде үҙен иң аҡыллыһы тип уйлаған кеше - иң ахмағы.*

*(Будда).*



ИЛ-ЙӨРТ ХӘБӘРЕ

# ЯУГИР ИСЕМЕНДӘГЕ БӘЙГЕ



**Сибайҙа тыуған ил именлеге өсөн батырҙарса һәләк булған Сибай филармонияһы бейеүсеһе Илнар Хәтмуллиндың яҡты иҫтәлегенә бағышлап, "Бейеү ҡанаттарында" тигән фестиваль-конкурс үтте.**

Бәйгелә бөтәһе 29 бейеү коллективы, йәғни 500-ҙән ашыу кеше ҡатнашты. Ярышҡа Баймаҡ, Әбйәлил, Белорет, Хәйбулла районДарынан, хатта күрше Силәбе өлкәһенән Магнитогорск ҡалаһынан бейеү ансамблдәре йыйылды.

Фестиваль-конкурста Сибай филармонияһы янында эшләп килгән "Ынйыҡай" өлгөлө балалар бейеү ансамбленән төрлө йәштәге коллективтары башҡарған "Ҡаһым түрә", "Два строя" бейеүҙәре Гран-при яуланы.

Махсус хәрби операцияла батырҙарса һәләк булған Илнар Хәтмуллин атаһы Илдар Булат улы, әсәһе Лариса Шәйнур ҡыҙы кеүек, бәләкәйҙән бейеүгә әүәҫ була, ҡаланың "Осҡон" халыҡ балалар ансамблендә шөғөлләнә. 2 йәшендә сәхнәлә атаһы менән "Генерал Игзаков" бейеүен башҡарғанда уҡ халыҡ геройы-полководецтың эске торошон, рухи көсөн һынландыра алыуы менән барыһын да әсир итә.

Оҫта йәш бейеүсене 2017 йылда Сибай филармонияһына балет артисы итеп эшкә алалар. Ул бер үк ваҡытта Сибай тәҙәләш һәм сервис колледжында уҡый, уны 2019 йылда тамамлағас, әрме сафында бронетранспортер водитель-механигы булып хеҙмәт итә. Хеҙмәтен тултырып ҡайтҡас, Сибай концерт-театр берекмәһендә эшен дауам итте.

Егет 2022 йылдың 26 сентябрендә Махсус хәрби операцияға китә, унда мотоуҡсылар ротаһында хеҙмәт итә. 2023 йылдың 30 июнендә хәрби бурысын үтәгәндә батырҙарса һәләк була. Һәләк булғандан һуң Илнар Хәтмуллин Рәсәй Президенты Указына ярашлы Батырлыҡ ордены, Башҡортостан Башлығы Указына ярашлы генерал Шаймуратов ордены менән наградланды.

Һуғыш бергәүҙе лә аямай. Бәрелеш башланғандан алып әллә күпме аҫыл-аҫыл ир-егеттәребеҙҙе юғалттыҡ. Уларҙы Тыуған ил, яҡташтары бер ваҡытта ла онотмаҫ. Илнар Илдар улы ла мәңге беҙҙең хәтерҙә ҡаласаҡ.

**Гөлдәр ҠАДАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## НАМЫҪҺЫҘҘЫҢ... йөҙө ҡаптай

Сәсәндең теле уртаҡ, сибәрҙең йөҙө уртаҡ, оҫтаның ҡулы уртаҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙенең ахмаҡ икәнен белгән ахмаҡ - ысын дәрәжәһендә аҡыл эйәһе, ә инде үҙен иң аҡыллыһы тип уйлаған кеше - иң ахмағы.

**(Будда).**

Хәҡиҡәткә ғашиҡ кешегә шағир булырға ла, бөйөк булырға ла тырышырға кәрәкмәй. Ул ысын мәғәнәһендә шағир һәм бөйөк.

**(Жюль Ренар).**

Тыуғандар булып йәшәргә тыуҙырылған кешеләрҙе һуғыш хайуанға әйләндерә.

**(Вольтер).**

Уй сығанағы һымаҡ уҡ, мөхәббәт тә сиктәрҙе белмәй: ул мәңгелек һымаҡ тәрән, күк йөҙө һымаҡ бейек, Йыһан һымаҡ киң.

**(Альфред де Виньи).**

Ысын дуҫ һәр нәмәлә беҙгә оҡшарға тырышмаясаҡ, һәр ҡылығыбыҙ өсөн маҡтарға ла атлығып тормаясаҡ, ул беҙҙәге иң яҡшыны ғына ҡабул итәсәк.

**(Плутарх).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Юлсы бер ауылдан икенсеһенә китеп бара, ти. Ярты юлды үткәс, бер аҙ ял итеп алырға була. Бәхетенә, юл ситендәге матур яланда ботаҡтарын киң йәйеп, манго ағасы үҫеп ултыра. Юлсы ошо ағасҡа һөйәлеп ултыра ла, юғарыға ҡарап, ағас ботаҡтарын, япраҡтарын, емештәрен күҙҙән үткәреп, уйға ҡала: "Ҡайһылай матур ботаҡтар! Ә емештәре һуң, емештәре! Эйе, уларҙы бар итеүсе ахмаҡ түгел..." Хәҙер инде юлсы һуҙылып төшөп ята ла, ағас тәҙәләшөн тағы күҙҙән үткәрә: "Ә шулай ҙа был ағасты бар итеүҙе миңә ҡушһалар, мин башҡа төрлө эшләр инем. Шундай ҙур ағас, ә емештәре бәләкәй генә. Алма саҡлы ғына. Эйе, һиҙелеп тора, был ағасты булдырыусы нимәнелер уйлап еткермәгән. Бына пальманы алайыҡ: үҙе манго ағасынан бәләкәйерәк, ә емештәре ҙурыраҡ. Ҡабаҡты алайыҡ: үҙе өй саҡлым, ә һабағы нәҙек кенә. Ни тиһәң дә, барлыҡҡа килтереүсе улай уҡ аҡыллы түгел ахры..." Шундай һығымтаға килә юлсы. Тәбиғәттән ниндәйҙер етешһеҙлек табыуына ҡәнәғәтләнеп ята торғас, йоҡлап та китә.**

**Бер саҡ юлсының башына нимәлер килеп төшә һәм ул ҡурҡып уянып, урынынан ырғып тора. Тирә-яғын байҡап, үҙен ҡурҡытыусыны эҙләй. Әммә ул ятҡан урында манго емешенән башҡа бер нәмә лә булмай. Юлсы, ауыртҡан ерен тырнап, манго емешен ҡулына ала һәм уға рәхмәтле ҡиәфәт менән ҡарап тора: "Әлдә генә манго шундай бәләкәй булған. Ҙурыраҡ булһа, ошонда тәбиғәткә һоҡланып ултыра ла алмаҫ инем! Юҡ, ни тиһәң дә, тәбиғәт үҙ эшен белә икән!" - тигән һығымтаға килә ул".**

СӘХНӘ ТҮРЕНДӘ...

## ТУҒАНДАР ЙЫЙЫЛА

**16-23 майҙа Өфөлә "Туғанлыҡ" халыҡ-ара милли театрҙар фестивале уҙғарыла. Быға фестиваль "Төрки телле театрҙар фестивале" тип атала ине, хәҙер уның форматы киңәйҙе.**

Фестивалде ойоштороусылар булып Башҡортостан Хөкүмәте, Мәҙәниәт министрлығы һәм М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры сығыш яһай, фестиваль дирекцияһы етәксеһе - Иршат Фәйзуллин. Фестивалдең художество етәксеһе, театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов һәм театр тәнҡитсеһе Айһылыу Сәғитова фестиваль афишаһына иң көслө режиссерҙарҙың спектаклдәрен һайлап алды. Ҡатнашыусылар араһында Ҡаҙағстан, Татарстан, Сыуашстан, Абхазия, Тыва, Хакасия, Дағстан, Төньяҡ Осетия, Ҡалмыҡстан театрҙары бар. Быйылғы фестивалдә 14 театр ҡатнаша. 12 спектакль - конкурс программаһында, ә икеүһе конкурстан тыш күрһәтелә. "Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының күренекле башҡорт драматургы Нәжиб Асанбаев пьесаһы буйынса ҡуйылған "Ҡыҙыл паша" спектакле лә конкурстан тыш күрһәтелә", - тине театрҙың баш мөхәррире Динара Ҡәйүмова.

Көнөнә ике спектакль күрһәтеләсәк, уларҙы өс майҙансыкта - Башҡорт дәүләт академия драма театрында, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында һәм "Нур" татар театрында ҡарарға мөмкин.

Быйылғы фестивалдең төп яңылығы шул: "Иң яҡшы спектакль" призы бирелмәй. Уның ҡарауы, "Иң яҡшы хореограф эше" тигән яңы номинация булдырылды. Конкурста бөтәһе һигеҙ номинация: "Иң яҡшы режиссер эше", "Иң яҡшы сценография", "Иң яҡшы ир-егет роле", "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле", "Икенсе пландағы иң яҡшы ир-егет роле", "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле", "Тамашасылар һөйөүе призы".

ТЕЛҺӨЙӘР

## УШАНДАҠТАР ТАБЫЛДЫ

**Беҙ ҡулланған ҡалын-ҡалын китаптарҙа һүҙҙәр һалдаттар шикелле бик ҡаты тәртиптә теҙелгән. Араларында телдән төшмәгән һүҙҙәргә ушандаҡтары ла бихисап. Иң тәүҙә шул ушандаҡ менән танышайыҡ.**

**Ушандаҡ.** Алыҫ туғандар, сыбыҡ осо нәҫелдә "ушандаҡ" тигән бер һүҙ ҙә белдерә ала. Әйтәйек: *Төрлө урында ушандаҡтар күп. Ушандаҡтар менән дә тығыҙ аралашабыҙ. Сит илдә лә ушандаҡ табылды.*

**Уша. 1.** Мейестең ҡырынан сығып торған урыны шулай атала. Мәҫәлән: *Мейес ушаһына һөйәлеү.* **2.** Өй кәрнизен дә уша тип йөрөтөү бар. Миҫал: *Ушаны буяу. Йорт ушаһын семәрләп эшләгәндәр.*

**Үҙле.** Йәбешкәк, һуҙылыусан әйберҙең сифатын шулай атайҙар. Мәҫәлән: *Ҡамырҙы үҙле итеп баҫыу. Үҙле измә әҙерләү.*

**Үҙемсе.** Үҙен генә уйлаған, эгоист кеше үҙемсе була. Миҫал: *Үҙемсе холоҡ. Баланы үҙемсе итеп тәрбиәләмә.*

**Үкел.** Ҡиәмәтлек менән үкел бер үк мәғәнәгә эйә. Миҫалға: *Үкел ҡыҙ. Үкел ул. Үкел әсәй менән үкел атайҙы ҡунаҡҡа саҡырыу.*

**Шулай итеп, телмәребеҙгә тиҙерәк әйәләштерепи, йыш ҡулланған лексиконға ушандаҡ һүҙҙәрҙе лә яҡын туған итәйек.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1582218911006 24015

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
18 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111732